ИЖТИМАҒИ-СӘЙӘСИ-МӘҘӘНИ ГӘЗИТ

# Киске Өфө

20-26 март (буранай) 2021

№ 12 (950)

kiskeufa.ru • 2002 йылдан башлап сыға • һатыуҙа хаҡы ирекле

БЫЛ ҺАНДА УҠЫҒЫҘ:

Ҡартлыкты ҡәҙерлә - ҡәҙер күрерһең



3

Интернетта, цифрлы технологияларҙа...



башҡорт теленең үҙ урыны бармы? 8-9

Минә ижадым да ҡәҙерле...



11

Беҙ ағартмаһаҡ, кем ағартыр донъяны!



12-13

ТВ-программа 14

***"Беҙҙең бөтә дәүләтебеҙҙә тик башҡорттар ғына аҫаба хоҡуғында ер биләй. Уларға башҡа урында бушлай ер бирелмәйәсәк. Хатта урыҫ казактарының да үҙ ере юҡ, улар йәшәгән ер - ҡаҙнаныҡы. Казактар ул ерҙе һата һәм ҡуртымға бирә алмай, ә башҡорттарға быларҙың барыһы ла закон менән рөхсәт ителгән".***

***А.П. БЕЗАК.***

## ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

?

### Һәр төбәктең, ҡаланың, ауылдың абруйлы, хөрмәтле кешеләре бар. Шуларҙың кемеһе тураһында һөйләргә телә инегеҙ?

***Сәйфулла ӘМИРОВ, Мәләүез районы:*** Һорау бик ҡыҙыҡ ҡуйылған. Беҙҙә, гәҙиттә, кешене бер тапҡыр булһа ла матбуғатта ҙурлап телгә алһалар, ул әҙәм, эш боҙмаһа, ғүмер буйы маҡтала ла маҡтала. Шул уҡ ваҡытта халҡына, яҡташтарына, ауылдаштарына бихисап ярҙам иткән, улар өсөн көсөн дә, ваҡытын да йәлләмәгән, әммә милләтебеҙгә хас баҫалҡылығы, башҡа кеше күҙенә артыҡ күренергә тырышмауы арҡаһында ситтә торғандарҙы тик яҡындары, туғандары һәм фекерҙәштәре генә белә.

Мәләүез районында ла бар ул ундай кеше. Ул - Ғәйнетдин Камалетдинов. Ундайҙар хаҡында, гәҙиттә, үҙ-үҙен булдырған, тиҙәр беҙҙең яҡтарҙа. Кескәй генә йәштә атайһыҙ ҡалып, бала саҡтан ауыр хеҙмәттә сынығып үҫә, ауырлыҡтар алдында бөгөлөп төшмәй. Шуға ла, ниндәй генә вазифаға тәғәйенләнһә лә, юғалып ҡалманы, һәр саҡ йөкмәтелгән бурысты еренә еткереп үтәне. Тырышлығы ҡала һәм район етәкселәре тарафынан юғары баһалана, уға һәр ваҡыт яуаплылыҡ талап иткән эште ышанып тапшыралар. Мәләүез ҡалаһында урынлашҡан 7-се айырым һөнәри-янғын һағы отряды начальнигы итеп ҡуйыуҙары ла шуға асыҡ миҫал. Карьера үҫешендә уға булышлыҡ итерлек яҡындары ла, таныштары ла булмауын иҫәпкә алғанда, был вазифаға үҙ һәләте, белеме һәм ныҡышмалылығы арҡаһында ирешеүен барыһы ла белә. Хәҙер күптән хаҡлы ялда ул.

Ғәйнетдин ағайҙың башҡаларҙан айырмалы бер һыҙаты бар - ул үҙ милләтен яратып ҡына ҡалмай, ә милләттәштәренә ғүмер буйы ярҙам итте һәм итә. Ҙур тормош юлы үткән яҡташыбыҙҙың тормош тәжрибәһе лә бай һәм ул уның менән йомарт бүлешә. 1988 йылда ҡала-районда беренсе "Көнгәк" башҡорт ижтимағи-сәйәси берекмәһе ойошторолғас, тәүге көндәрҙән үк уның эшендә әүҙем ҡатнашты, үҙенең аҡыллы фекерҙәре менән күп кенә хаталар эшләүҙән һаҡлап ҡалды. Беҙҙең бик күптәребеҙ редакцияға заводтарҙан, ойошмаларҙан килгәйне, ҡайһы берҙәребеҙгә утыҙ йәш тә тулмағайны. Урындағы бюрократтар менән аралашыу тәжрибәһе лә юҡ кимәлендә. Бына шундай осорҙа кәңәштәре бигерәк тә кәрәк булды ағайҙың. Ул ваҡыттан утыҙ йыллап ғүмер уҙһа ла уның бер әйтемде йыш ҡабатлағаны хәтерҙә уйылып ҡалған: "Егеттәр, был юлы ишекте көсәнеп этмәгеҙ, уны үҙебеҙгә тартып та еңел генә асырға була", - тип проблеманы хәл итеү юлдарын кәңәш итә торғайны.

Ҡайһы бер һуңғы осорҙа ғына милли аңы уянған милләттәштәребеҙҙең өлкән быуынды телебеҙ, тарихыбыҙ өсөн көрәшмәүҙә ғәйепләүе ишетелә башланы. Улар хаҡлы түгел, әлбиттә. Торғонлоҡ осоро тип аталған йылдарҙа ла милләтебеҙҙе ҡайғыртҡан, уның вәкилдәренә ярҙам иткән илһөйәрҙәр булды. Улар ошо тырышлыҡтары өсөн рәсми рәүештә маҡтауҙар көтмәне, награда һорап, юғары вазифалар таптырып йөрөмәне. Заманалар үҙгәргәс тә үҙ идеалдарына тоғро ҡалыуын иҫбатланы. Ғәйнетдин Шәмсетдин улы, мәҫәлән, ғүмер буйы үҙ халҡына хеҙмәт итте. Янғын һағы отряды начальнигы булып эшләгән осорҙа милләттәштәребеҙҙе күпләп эшкә алды. Сығышы менән беҙҙең ауылдан ике ағай Мәләүездә Ғәйнетдин ағай етәкләгән ойошмала эшләне, умарта тоттолар. Эш хаҡы бәләкәй булһа ла, улар матур йәшәне. Донъялары етеш, кирбес йорттар һалып инделәр, электән үк еңел автомобилдәре булды, тормоштарына зарланманылар. Әйткәндәй, уларҙың береһе Илсекәев ағай бөгөн дә, 84 йәштә булыуына ҡарамаҫтан, умарта тота. Ысынында иһә бөгөн үҙмәшғүлдәр тигән төшөнсәнең нигеҙендә совет заманында улар һалған ҡиммәттәр ята.

Ғәйнетдин ағай Камалетдинов бөгөн 1773-1775 йылдарҙағы Крәҫтиәндәр һуғышы етәкселәренең береһе Кинйә Арыҫлановтың атаһы Арыҫлан батыр Аҡҡолов нигеҙләгән ауылда йәшәй. Бер һөйләшеүҙә ағай, милләтебеҙгә ике данлыҡлы ул - Арыҫлан батыр Аҡҡоловты, уның улы Кинйә абыҙ Арыҫлановтарҙы биргән ауылға дәүләт тарафынан уларҙың дәрәжәһенә ярашлы мәсет тә төҙөлөргә тейеш тә бит, тип, үҙенең уй-фекерҙәре менән дә уртаҡлашҡайны. Ҡыҙғаныҫҡа ҡаршы, ошондай тарихи шәхестәргә арналған ябай ғына обелиск та ҡуйылмаған бөгөн ауылда.

## ҺАЙ-ҺАЙ-ҺАЙ!

# РУХИӘТ БАЙРАМЫ

**Өфөлә М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театрында "Урал батыр мәктәбе" проектына йомғаҡ яһап, "Рухиәт байрамы" тантанаһы уҙғарылды. 2020 йылдың августында старт алған проект БР Башлығы грантына "Аҡ тирмә" милли-мәҙәни үҙәк тарафынан ойошторолдо.**

Сарала "Урал батыр" эпосын белгән уҡыусылар, "Урал батыр мәктәбе" уҡытыу программаһы тормошҡа ашырылған милли гимназия, лицей, балалар баҡсалары етәкселәре һәм башҡорт теле уҡытыусылары ҡатнашты.

"Аҡ тирмә" милли-мәҙәни үҙәге рәйесе Рәйсә Күзбәкова билдәләүенсә, проект сиктәрендә мәктәптәрҙә тирә-яҡ мөхитте һаҡлау, һыу яткылыҡтарын таҙартыу, айыҡлыҡ өсөн көрәш, ололарға ярҙам итеү буйынса эштәр, төрлө шәхестәр менән осрашыуҙар, ижади конкурстар үткәрелгән. Шулай уҡ уҡытыусылар, етәкселәр һәм йәмәғәт ойошмалары вәкилдәре ҡатнашлығында онлайн дәрестәр ойошторолған. Идея авторы билдәле яҙыусы Мәрйәм Бураҡаева, ә проекттың концепцияһын филология фәндәре докторы, профессор Фәнил Күзбәков төҙөгән. "Глобалләшеү осоронда хатта цивилизация башында торған халыҡтарға ла юғалыу ҡурҡынысы янай. Һаны күпме булыуға ҡарамай, барлыҡ милләттәрҙе лә тик рухи берҙәмлек кенә ҡотҡарып ҡаласаҡ. Мәшһүр "Урал батыр" эпосы - ул башҡорт халҡының үҫешенә ҙур йоғонто яһаған милли фәлсәфәне үҙ эсенә алған рухи мираҫыбыҙ. Беҙ уны өйрәнергә һәм эпоста әйтелгән ата-бабаларыбыҙ васыятын тотоп йәшәргә тейешбеҙ", - ти проект авторҙары.



✓ Бейегәндә үксәләренән ут сәсрәтеп, сыбырткыны йәшендәй ялтлатҡан бейеүсебеҙ - күндән, тимерҙән күҙ яуын алырлыҡ әйберҙәр яһай белгән алтын ҡуллы оҫта ла, хис-тойғоларға бай, нескә күңелле шиғриәт һөйөүсе лә.



АҠЫЛЛЫҒА - ИШАРА

# ХӘЛ ИТӘ АЛМАҺАҢ...

## мәсьәләгә ҡарашыңды үҙгәрт



**Оло йәштәге бер танышым бар. Аҙмы-күпме - һикһән йәшен тултырҙы быйыл. Аралашып йәшәүебеҙгә егерме биш йыл тирәһе ваҡыт үткәндер. Йәш арабыҙ ҙур булһа ла, күп фекерҙәребеҙ уртаҡ, шуға ла дуҫлығыбыҙ оҙаҡҡа һуҙылғандыр, тип уйлайым.**

Өлкән әхирәтемдең иғтибарҙы йәлеп иткән иң мөһим сифаты - тормошто яратыуы. Был хаҡта ул, әлбиттә, һөрән һалып йөрөмәй. Ошо һыҙатын йыш ҡына башҡаларға ла өлгө итеп ҡуям мин. Тормошҡа ғашиҡлығы ябай ғына күренештәрҙә лә сағыла. Мәҫәлән, ғәҙәти көнитмешенә ниндәйҙер яңылыҡ индерергә тырышыуынан да быны төҫмөрләргә мөмкин. Һикһәне тулғансы пенсияһы аҙ булды. Әммә аҡсаһын коммуналь түләүҙән, дарыуҙан, аҙыҡ-түлектән арттырып, өҫтөнә ниндәйҙер яңы бер нәмә һатып ала йәки өйөндә нимәнелер яңырта. Кухня таҫтамалын булһа ла алмаштырып ҡуя ул. Түшәк кәрәк-яраҡтарын, һауыт-һабаһын да төҫө, биҙәге уңғансы тотонмай. Ямғыр яуһа, уның тамсыһынан, ҡар яуһа, уның бөртөгөнән матурлыҡ табып, баларса ҡыуана.

Бынан бер нисә йыл элек аяғын һындырып, дауаханаға яткайны. Шунда уның һаулығы өсөн нисек көрәшкәнен күреп хайран ҡалғайным. "Миңә нисек тә торорға кәрәк!" - тип үҙ-үҙенәме, әллә эргәһендәге кешеләргәме, тиҫтәләгән-йөҙләгән тапҡыр әйтә ине. Йәйен-ҡышын тәҙрә төбөндә сәскә атҡан гөлдәрен уйлап хәсрәтләнде.

Торорға, яңынан аяҡҡа баҫырға уның шул тиклем теләге ҙур булды. Һөйәк туҡымаһын нисек тиҙерәк уңалтыу, нығытыу тураһында медицина белешмәләрен алдырып уҡыны, йәш саҡта алған энциклопедияларын яңынан аҡтарҙы, врачтар менән кәңәшләште, үҙе һымаҡ имгәнгән кешеләрҙең тәжрибәһен өйрәнде. Һынған һөйәк буйынса бөтә белгәнен, ишеткәнен, уҡығанын бергә туплап, алтын урталыҡты табып, операцияһыҙ-ниһеҙ барыбер аяғына баҫты.

Күптән түгел уның тағы бер һоҡланғыс сифатын астым.

- Тормоштан, кешеләрҙән, күршеләрҙән ҡәнәғәт булырға өйрәнә башланым, - тип әйтеп һалды ул.

Туғыҙынсы тиҫтәһен ваҡлаһа ла, ул һаман үҙ өҫтөндә эшләй, холоҡфиғеленең ыңғай-кире яҡтарын анализлай ҙа баһа!

Ысынлап та, йыш ҡына күрше-тирәһе шаулауына, экологияға, илдә барған сәйәси ваҡиғаларға, магазиндағы аҙыҡ-түлектең сифатһыҙлығына, хаҡтарға зарланғанын ишеткәнем бар. Был холоҡ бөтәһендә лә бар тип, уға иғтибар ҙа бирмәй инем. Ә ул ошо ҡылығын кире сифат тип, унан ҡотолорға уйлай икән дә.

- Нисегерәк ҡәнәғәт булырға өйрәнәһегеҙ? - тим.

- Иң беренсе, быға тиклем мине тынысһыҙлаған, хәүефкә һалған, борсоған күренештәр менән ризалаша башланым. Күпме тыпырсынһам да, күршемдең төн уртаһына тиклем телевизор ҡарарға яратыуын, һатыуҙағы аҙыҡ-түлектең сифатын, хаҡын мин бер нисек тә үҙгәртә алмайым бит. Ошоға тиклем ошо ябай ғына нәмәне аңламағанмын. Әрләшеп-бәхәсләшеп, нисек тә булһа һүҙемде һүҙ итермен тип уйлап, үҙемә лә, башҡаларға ла тынғылыҡ бирмәгәнмен икән. Аллаға шөкөр, күршем эскесе йәки янъялсы түгел. Аҙыҡ-түлек магазинында ҡытлыҡ юҡ, теләгәнеңде һайлап алырға мөмкин, - ти ул.

Проблеманы хәл итә алмаһаң, уға ҡарашыңды үҙгәрт, тигән хәҡиҡәткә тукһанға аяҡ баҫҡас ҡына төшөнөп, камиллашыуҙың тағы бер баҫҡысына күтәрелде ул. Бына бит, үҙгәрәм тиһәң, һикһәндә лә, туҡһанда ла үҙгәрергә була. Юғиһә, холоҡто үҙгәртеп булмай тип яңылышабыҙ...

**Ләйсән СӘЛИХОВА.**

ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...

## ? һәр төбәктең, ҡаланың, ауылдың абруйлы, хөрмәтле кешеләре бар. Шуларҙың кемеһе тураһында һөйләргә теләр инегеҙ?

***Баныу ҠАҺАРМАНОВА, Учалы ҡалаһы:*** Беҙҙең тарафтарҙа ла бөтә республикаға, илгә билдәле кешеләр бик күп. Мин бөгөн күп ҡырлы аҫылташ кеүек һәр яҡлап килгән һәләтле яҡташым Марат Яҡупов тураһында һөйләргә теләйем. Ул Фәйзи Ғәскәров исемендәге Дәүләт академия халыҡ бейеүҙәре ансамбле составында донъя сәхнәләрен дер һелкеткән, меңләгән тамашасыларҙың йөрәген яулаған артист булараҡ күптәргә таныш. Әммә уның беҙҙе хайран иткән тағы бик күп һәләттәре бар. Бейегәндә үксәләренән ут сәсрәтеп, сыбырткыны йәшендәй ялтлатҡан бейеүсебеҙ - күндән, тимерҙән күҙ яуын алырлыҡ әйберҙәр яһай белгән алтын ҡуллы оҫта ла, хис-тойғоларға бай, нескә күңелле шиғриәт һөйөүсе лә.

Ә ул үҙе бала саҡта хәрби кеше булырға хыялланған. "Хәрбиҙәрҙең тормошо ныҡ ылыҡтыра торғайны. Ә бер көндө, дәрестән ҡайтышлай, Рәис ағай Низаметдинов урамда осратып, тотоп алды ла: "Нишләп йөрөйһөң, әйҙә, киттек "Ирәмәл"гә бейергә!" - тине. Һүҙен йыҡманым, барҙым. Шунан "Ләйсән" бейеү ансамбленә күстем. Ун беренсе класты тамамлағас та, ансамбль менән гастролгә Испанияға сығып киттек. Ҡайтыуыма әсәйем: "Документтарыңды сәнғәт училищеһына, хореография бүлегенә алып барҙым", - тип тора. Элекке, ауыл балалары өлгөргәнлек аттестаты алыу менән автомәктәптә уҡыны ла, армияға барҙы, үҙем өсөн дә шундайыраҡ киләсәкте күҙаллағайным да, ләкин әсәйем, армияға ебәрмәйем, ти ҙә ҡуя. Ә мин, барам, тип ныҡышам. Бәхәсләшеп бөттөк... Училищела уҡығанда хеҙмәт итергә алманылар, аҙаҡ, Фәйзи Ғәскәров ансамблендә эш башлағас, тағы бронь биреп ҡалдырҙылар. Шулай ҙа, һуңлап булһа ла, армияға барҙым. 2003-2005 йылдарҙа Һамарҙа спорт ротаһында хеҙмәт итеп, кире ансамблгә ҡайттым", - ти ул.

Талантлы бейеүсе ҡыҙы тыуғас, бөтәһен дә аптыратып, өс йыл янғын һүндереү часында ла эшләп ала. Быныһы уның бала саҡ хыялындағы хәрби эшкә ынтылыу булғандыр, бәлки. Әммә ижади күңеле бер төрлөлөк менән килешә алмай артистың. Ансамблдең директоры ла осраған һайын уны эшкә саҡыра. Туған тейешле Луиза апай Фархшатова "Ләйсән" бейеү коллективының юбилейында осрашҡанда уға: "Икенсе күрешкәндә бейеп йөрөмәһәңме!" - тип иҫкәртеп киткәс, сәхнә тормошона кире ҡайта.

Талантлы яҡташым бейеү менән генә йәшәмәй. Уның яратҡан шөғөлдәре бик күп. Ғөмүмән, ул эш менән булышҡанда ғына үҙен тулыһынса бәхетле тоя. Һәр көнөн ниндәйҙер шөғөлгә бағышлап, һәр минутын файҙа менән үткәреп, тормошҡа бар ижади көсөн биреп йәшәргә тырыша. Әле ул саҡ ҡына буш ваҡыты сығыу менән сыбыртҡы үреү, ҡайыш яһау менән шөғөлләнә. Был эшкә тотоноуы ла осраҡлы ғына килеп сыға. Ансамблдә гел генә теге йәки был бейеүгә атрибуттар талап ителә бит инде. Кейемдәр цехы начальнигының, сыбыртҡылар таба алмайым, тигәнен ишеткәс, өйгә ҡайтып, ботинкаларының шнурҙарын сисеп, ишеп ҡарай. Был эш уға яңылыҡ булмай, ишеп ҡарамаһа ла, бала саҡта атаһының сыбыртҡы, арҡан үргәнен күргәне була. Эш рәте килеп сығырын аңлағас, күн магазинынан кәрәкле нәмәләр һатып алып, сыбыртҡы ишә лә, эшкә алып бара. Шулай итеп, үҙенә ҡыҙыҡ та, файҙалы ла хоббиға юлыға ул.

Шулай уҡ шиғыр уҡырға, тыңларға ярата. Шиғриәттең йәнгә сихәт икәнен күптән аңлаған. Мифтахетдин Аҡмулланың, Геннадий Шпаликовтың, Роберт Рождественскийҙың шиғырҙарын хәтер һандығына һалып ҡуйған. Наилә апай Сәфәрғолованың "Йөрәк һүҙе" шиғри проектына барып, ҡатнашыусыларҙың нисек шиғыр уҡыуҙарын тыңлап, ысын мәғәнәһендә йөрәктән сыҡҡан ғына йөрәккә етеүенә шаһит булып ҡайта.

Амстердамда ла шундай уҡ көслө хис-тойғолар ташҡынын кисерергә насип була яҡташыма. Данлы башҡорт атлыларына һәйкәл асыу айҡанлы ойошторолған тантанала ҡатнашырға тура килә уға. Скульптор Александр Таратыновтың Нидерландтарҙа һәйкәлде тап ошо сүрәттә (башҡорт атлыһы йылғаны һыбай кисеп, башҡаларҙы үҙ артынан саҡырып тора) һәм шул ерҙә урынлаштырыуы тарихи факттарға тура килә: Голландияны французданан азат иткән башҡорт атлылары полктары Айсел йылғаһы аша Вессен ауылы янында сыҡҡан. Гүйә, тарихи ҡуласала 205 йылға кире әйләнеп ҡайтып, яугир ата-бабаларыбыҙҙы күҙ алдына килтереп, уларҙың батырлығын, ҡаһарманлығын йәне-тәне менән тойоп, ниндәй ауырлыҡтар кисереп тә, рух ныҡлығын юғалтмаған ватандаштары өсөн ғорурлыҡ хисе татый Башҡортостандың атҡаҙанған артисы Марат Яҡупов. "Йәшәй килә, үҙем өсөн шуны асыҡланым: был тормошта бер нәмә лә эҙһеҙ юғалмай һәм бер нәмә лә осраҡлы ғына килеп сыҡмай. Һәр һүҙебеҙ, аҙымыбыҙ, ҡылығыбыҙ тейешле һөҙөмтәгә килтерә, һәр осрашыуҙың, танышыуҙың йәшерен асылы бар", - ти ул.

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Пандемия башланғандан алып Башҡортостанда бөтәһе 328 кешенең ғүмере өҙөлгән. Уҙған тәүлектә Башҡортостанда коронавирус инфекцияһын йоҡтороуҙың 117 осрағы раҫланған. Республикала йәмғеһе 31 меңдән ашыу сирле теркәлгән. Хәҙерге ваҡытта 264 пациент - стационарҙа, 4945 сирле амбулатор шарттарҙа дауалана. Тәүлек эсендә 201 кеше һауығып сыҡҡан. Дауахананан тыш пневмонияға килгәндә, уҙған тәүлектә республикала 120 кеше сирләгән. Шул уҡ ваҡытта 131 кеше һауығып сыҡҡан.

✓Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Өфөлә WorldSkills милли чемпионатын уҙғарыуға әҙерләнеү тураһында бойороҡҡа ҡул ҡуйҙы. IX WorldSkills Russia чемпионатының финалын 21-25 июлдә үткәрергә хәл ителде. Сараға әҙерләнеү буйынса ойоштороу комитетының составы раҫланды. Уның рәйесе - Башҡортостан Республикаһы Хөкүмәте Премьер-министры Андрей Назаров. Дирекцияға чемпионатҡа әҙерләнеү һәм уны уҙғарыу буйынса саралар планын төҙөү бурысы йөкмәтелде.

✓БР Һаулыҡ һаҡлау министрлығы арҡа-мускул атрофияһын дауалау өсөн 36 ҡап "Нусинерсен" ("Спинраза") препаратын һатып ала. Дарыу менән Люберцы ҡалаһынан "Ирвин" яуаплылығы сикләнгән йәмғиәт тәьмин итә, уның менән 203,5 млн һумға килешеү төҙөләсәк. Башҡортостанда арҡа-мускул атрофияһы диагнозы ҡуйылған 42 ауырыу йәшәй, быға тиклем республика шулай уҡ 45 ҡап дарыу һатып алған. "Спинраза" былтыр ноябрь айында йәшәү өсөн мөһим дарыуҙар исемлегенә индерелгән.

✓РФ Дәүләт Думаһының Ғаилә, ҡатын-ҡыҙ һәм балалар мәсьәләһе буйынса комитеты ағзаһы Инга Йомашева шәхси клиникаларҙа аборт яһауҙы тыйырға, ҡатын-ҡыҙ ризалығын биргән документ атамаһын "Гөманлыҡты һаҡлау ҡағыҙы" тип үҙгәртергә һәм балиғ булмағандарға ата-әсәһе ризалығынан тыш аборт яһатыуҙы тыйырға, абортты һәм уның хәүефһеҙлеген рекламалау өсөн яуаплылыҡты ҡәтғиләштерергә тәҡдим итте. Шәхси клиникаларҙа аборт ҡатын мөрәжәғәт иткән көндә үк яһалырға мөмкин, ә уға "тыныслыҡ аҙнаһы" бирергә кәрәк, тип иҫәпләй депутат.

*✓ Хатта бит, ана, эшҡыуар-бизнесмендар ҙа был яуаплы эште тулайым үҙ өҫтәренә алырға батырсылыҡ итмәй, ә субсидия һәм башҡа шундай дәүләт ярҙам сараларына өмөт итә.*



*БЫНАҒАЙЫШ!*

# ҠАРТЛЫҠТЫ ҠӘҘЕРЛӘ - ҠӘҘЕР КҮРЕРҺЕҢ



**Тағы ла шул моңһоу, ауыр темаға әйләнеп ҡайтырға тура килә. Был турала беҙ гәзитебеҙҙең алдағы һандарында ла яҙғайныҡ инде. Әлеге лә баяғы дәүләт сәйәсәтенең үгәйһетелгән бер йүнәлеше - өлкән йәштәгеләр һәм шуларҙың да иң бәхетһеҙҙәре - ҡараусыһыҙ ҡалған ярҙамға мохтаж яңғыҙаҡ ҡарттар - дөрөҫөрәге, аҡтыҡ көндәрендә уларҙы һыйындырырлыҡ йылы мөйөш хаҡында бара һүҙ.**

Сараһыҙҙың көнөнән уларҙың йәшәрлек итеп ҡулайлаштырылмаған тар, тынсыу, ә иң ҡурҡынысы, хәүефһеҙлек талаптарына яуап бирмәгән шарттарҙа берәй ауыл йортонда көн күреүҙәре билдәле. Ана шул ташландыҡ биналар күптәренең һуңғы төйәгенә әүерелеп, һис бер ғәйепһеҙҙән шунда янып үлә торалар. Был хаҡта ла бар донъяға мәғлүм. Күк күкрәмәй, урыҫ суҡынмай, тигәндәй, шундай фажиғәнән һуң бер аҙ шаулашып алалар ҙа, тағы шымалар. Тынлыҡ, әйтерһең дә, тиҫтәләгән әбей-бабай ғүмере бер төн эсендә көл-күмергә ҡалмаған. Ғәфләт тынлығы, күрәһең, киләһе шау-шыуға тиклем. Ғәйеплене таптылар, төрмәгә яптылар һәм шуның менән эш тә бөттөмө инде?

Әйткәндәй, өлкән быуын хаҡында хәстәрлек күрергә тейешле социаль органдар кабинеттарында был йәһәттән әлеге ваҡытта ниҙәр булып ята икән? Ошо мәсьәлә буйынса кәңәшмәлә республика ғаилә, хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министры Ленара Иванова ҡарттар йорттарын күләгәнән сығарыу һәм был бизнесты лицензиялау юлы менән контролгә алыу хаҡында һөйләгән. Министр шулай уҡ БР Дәүләт Йыйылышы тарафынан ҡарттар йорттарын мотлаҡ лицензиялау тураһында закон проектының Рәсәй закон сығарыусылар советына ебәрелеүе, ләкин был тәҡдимдең Мәскәүҙә яҡлау тапмауы хаҡында хәбәр итә. Сәбәбен өндәшмәһәләр ҙә был хәлгә аптырарға түгел. Үҙ көндәрен саҡҡа үҙҙәре күрергә тырышҡан был ауыл "учреждение"ларынан лицензия талап итеү кәрәктер ҙә, бәлки, ләкин был улар эшен ҡатмарлаштырыу ғына буласаҡ, сөнки ул документты юллап алыуы - ай-һай... Хатта бит, ана, эшҡыуар-бизнесмендар ҙа был яуаплы эште тулайым үҙ өҫтәренә алырға батырсылыҡ итмәй, ә субсидия һәм башҡа шундай дәүләт ярҙам сараларына өмөт итә һәм был бизнесты улар рәсми рәүештә дәүләт ярҙамы менән генә алып барырға риза. Сөнки уларға бит эште нулдән башларға: ҡуртымға бина юлларға йәки уны һатып алырға һәм өлкәндәрҙе ҡабул итә алырҙай хәлгә килтерергә тура киләсәк. Үҙ иҫәптәренә. Ә кәңәшмәлә ҡатнашыусылар билдәләүенсә, социаль эшҡыуарлыҡҡа банктан кредит алыу бик ҡатмарлы мәсьәлә.

Бына шулай: бәхетһеҙ ҡарттар яҙмышынан бизнес эшләү планы иң беренсе урында тора бөгөн. Килемһеҙ эш бирәүгә лә, хатта дәүләттең үҙенә лә кәрәкмәй. Тимәк, әлеге көндә ярҙамға мохтаж, кеше көнлө 6 меңләп өлкән кеше лә берәүгә лә кәрәк түгел? Дәүләт интернаттарында ни бары 2 меңләп кеше йәшәһә, республика буйынса, министр Л.Иванова һүҙҙәре менән әйткәндә, "шау-шыулы хәлдәрҙән һуңғы оператив-эҙләнеү" саралары һөҙөмтәһендә асыҡланған йөҙләп шәхси ҡарттар йорттарында тағы 1,5 мең ҡарт-ҡоро көн итә. Был, тимәк, мәсьәләгә чиновниктар күҙлегенән ҡарағанда, бизнес өсөн яңы офоҡтар аса. Тимәк, ти халыҡты социаль яҡлау министрлығы етәксеһе лә, бының өсөн бары тик эшҡыуарҙарға "уйын ҡағиҙәләрен аңлатырға, яҡшы инструменттар бирергә һәм ярҙам итергә" ҡала.

Бөтәһе лә дөрөҫ һымаҡ, тик бына "уйын ҡағиҙәләре", бизнес төшөнсәләре артында төҫһеҙләнеп ҡалған әлеге кеше көнлө 6 мең ҡарттың яҙмышы өсөн әсенеү, йөрәк һыҙланыуы һәм ябай ғына мәрхәмәтлелек тойғоһо етмәй кеүек. Дәүләт органы ни өсөн был мөһим социаль мәсьәләне эшҡыуарҙар иңенә ауҙармаҡсы? Ә бит бәләкәй һәм урта бизнесҡа ла бөгөн күтәрелеп китеүе бик еңелдән түгел, гәрсә улар ил иҡтисадына ҡеүәт килтерерҙәй булған хәлдә лә. Ә бында уларға социаль бурыс йөкмәтелмәксе. Ә ниңә дәүләт бөтә ҡарауһыҙ ҡарттар яҙмышын да үҙ ҡанаты аҫтына һыйындыра алмай? Дәүләттең кешелеклелек кимәле уның үҙ ҡарттарына мөнәсәбәте менән билдәләнә, тигән хәҡиҡәт тә бар бит, юғиһә. Дәүләт чиновниктары аҡыллы кәңәшмәләр үткәргәнсе, эшҡыуарҙар менән һатыулашҡансы, бәхәс һәм бизнес-пландар ҡорғансы күпме йылдар үтер, әйтеүе ҡыйын, әммә шул ваҡыт арауығында яҡты донъяның "тамуҡ утында" янып, ташландыҡ йорт харабаларында туңып, йөҙләгән, бәлки, меңәрләгән ҡарттарҙың ғүмере өҙөлә... Дөрөҫ, мәсьәлә бигүк өмөтһөҙ ҙә түгел һымаҡ. Күңелгә йылы өҫтәгәне ошо мәғлүмәт булды: быйыл социаль эшҡыуарлыҡҡа ярҙам сиктәрендә федераль бюджеттан төбәккә 130 млн аҡса күсереләсәк, тиҙәр. Тимәк, социаль хеҙмәттәр күрһәтеү менән мәшғүл эшҡыуарҙар үҙ проекттарын бойомға ашырыу өсөн 500-әр мең грант алыу мөмкинлегенә эйә буласаҡ. Республика Ғаилә, хеҙмәт һәм халыҡты социаль яҡлау министрлығы социаль хеҙмәттәр күрһәтеү менән мәшғүлдәрҙең реестрын алып бара. Бөгөнгө көндә был реестрҙа 204 ойошма иҫәпләнә. Шулай итеп, дәүләт ярҙамында был өлкәлә тиҙҙән урындарҙағы ҡарттар йорттарын ҡурсалау, яңынан тергеҙеү буйынса үҙгәрештәр башланыр, тип өмөт итергә генә ҡала.

**Фәүзиә ИҘЕЛБАЕВА.**

*ӘЙТ, ТИҺӘГЕҘ...*

## ?

## *Һәр төбәктең, каланың, ауылдың абруйлы, хөрмәтле кешеләре бар. Шуларҙың кемеһе тураһында һөйләргә теләр инегеҙ?*

***Гүзәл ИҪӘНГИЛДИНА, Баймаҡ ҡалаһы:*** Данлы яҡташтарым тураһында уйлағанда, төрлө өлкәлә эшләгән, үҙенең фиҙаҡәр хеҙмәте менән тыуған яғыбыҙҙың, республика, илебеҙҙең нигеҙ ныҡлығына тос өлөшөн индергән бихисап кешеләр күҙ алдыма килеп баҫа. Айырыуса коронавирус ҡоторған мәлдә беҙҙең янybыҙҙа булған, һәр саҡ ярҙамға ашыҡҡан бар Баймаҡ табиптарына оло рәхмәт һүҙҙәрен еткерге килә. Үҙҙәрен, яҡындарын хәүеф аҫтына ҡуйып, улар тәүлек әйләнәһенә ҡурҡыныс сиргә ҡаршы көрәште, кешеләрҙе ҡотҡарҙы. Баймаҡ үҙәк ҡала дауаханаһында асылған ковид госпитален республиканың атҡаҙанған врачы, хеҙмәт ветераны һәм күптәргә киң билдәле врач Гөлнур Әҙеһәм ҡыҙы Латипова етәкләне. Бер-бер артлы килтерелгән ауырыуҙар, уларҙың ауыр хәле, алдағы билдәһеҙлек... Ошондай ҡатмарлы минутта Гөлнур Әҙеһәм ҡыҙына хәл иткес ҡарарҙар ҡабул итергә, ҡайһы саҡта ҡәтғи һәм ҡаты итеп үҙ һүҙҙәрен әйтергә тура килә. Иң ауыры - коронавирустан хеҙмәттәштәре ауырый башлаған мәл булғандыр. Шулай ҙа Гөлнур Латипова һәм уның коллективы коронавирусты ауыҙлыҡлап тотоуға бар көсөн һала. Эшен яратып башҡарған табип аҙаҡҡа тиклем ныҡ баҫып тора. Хәлһеҙләнеп ҡайтып йығылған мәлдәрендә тормош иптәше Фәрит Ғәзим улы, үҙе кеүек медицина юлын һайлап, хәҙерге ваҡытта билдәле врач булып өлгөргән балалары Эльвира, Радмир һәм һеңлеһе, күп ауырыуҙарҙы аяҡҡа баҫтырған көслө невропатолог Гөлнара Әҙеһәм ҡыҙы Самарбаеваның ныҡлы терәк-таяныс булыуы көс бирә уға. Коронавирус инде сигенде, тип, еңел тын алып ҡуйған мәлдә генә Гөлнур Әҙеһәм ҡыҙының үҙен ошо ауырыу аяҡтан йыға. Яҡындарының доғалары, ғүмерен һаҡлап алып ҡалған пациенттарының рәхмәттәре менән ул һауығып, яңынан яратҡан эшенә тотона. Гөлнур Әҙеһәм ҡыҙының ил өсөн хәүефле мәлдә булған фиҙаҡәр хеҙмәте иғтибарһыҙ ҡалманы. Ул коронавирусҡа ҡаршы көрәшкә индергән тос өлөшө өсөн Рәсәй Президенты Владимир Путиндың Почет грамотаһы менән бүләкләнде. Бына шундай батыр йөрәкле кешеләр беҙҙең замандаштарыбыҙ һәм уларҙың эштәре тураһында халыҡ белергә, ваҡытында үҙ баһаһын бирергә, рәхмәт һүҙҙәрен еткерергә тейеш.

**Лена АБДРАХМАНОВА яҙып алды.**

## НИМӘ? ҠАЙҘА? ҠАСАН?

✓Башҡортостандың Сауҙа һәм хеҙмәттәр министрлығы Республика мосолмандары диниә назараты менән берлектә төбәктең юл буйы комплексарында һәм сауҙа үҙәктәрендә намаҙ уҡыу өсөн бүлмәләр асыу мәсьәләһен тикшерҙе. "2024 йылға тиклем ҡабул ителгән Башҡортостан территорияһында юл буйы көнкүреш хеҙмәтен күрһәтеүҙе үҫтереү концепцияһында яңы асылған комплекстар өсөн был тәҡдим индерелгән", - ти министр Алексей Гусев. Шулай уҡ ул мөфтөй Айнур Бирғәлин менән "Һөт кухняһы" продукцияһына "Хәләл" сертификатын алыу мәсьәләһе буйынса ла фекер алышты.

✓Франция инвесторҙары Патрик Хоффман һәм Антуан Менделовичи Башҡортостанда 30 мең бал ҡорто күсенән етештереү базаһы, халыҡ-ара аккредитацяға эйә булған бал сифаты лабораторияһы асырға һәм халыҡ-ара экспорт өсөн йылына 7 мең тоннаға тиклем төрлө бал продукцияһы етештерергә йыйына. Республикала проектты башлау өсөн "Би Хэппи" ("Бәхетле бал ҡорто") компанияһы теркәлгән, эштең төп йүнәлештәрен һәм этаптарын билдәләргә тейешле юл картаһы әҙерләнгән. Тәүге умарталыҡтар Бөрйән, Ишембай, Күгәрсен һәм Көйөргәҙе райондарында урынлаштырыла. Производствола бөтәһе 160 яңы эш урыны булдырыла.

✓Салауат башҡорт драма театры коллективын Айбулат Ҡотошов етәкләйәсәк. Айбулат Миңлеғәли улы 1973 йылда Ишембай районында тыуған. Ул 1997 йылда "Актерлыҡ сәнғәте" һөнәре буйынса З. Исмәғилев исемендәге Өфө дәүләт сәнғәт институтын тамамлаған. Хеҙмәт юлын А. Мөбәрәков исемендәге Сибай дәүләт башҡорт драма театрында актер булараҡ башлай, һуңынан Ишембай ҡалаһы Мәҙәниәт йорто директоры, ҡаланың мәҙәниәт бүлеге етәксеһе була. 2015 йылдан ул Сибай концерт-театр берекмәһе директоры вазифаһын башҡара, Башҡортостандың атҡаҙанған артисы.

✓Пермь крайында Башҡорт мәҙәниәте һәм мәғарифы көндәре уҙғарылды. Башҡорт тарихы йылына арналған сарала оҫталыҡ дәрестәре, интерактив майҙансыҡтар, ата-әсәләр берләшмәһе өсөн онлайн-конференция ойошторолдо, фильмдар һәм концерттар күрһәтелде. 18 мартта Барҙа районы Төндөк ауылында ғәйнә башҡорттары конференцияһы ойошторолдо һәм Пермь районы Ҡуян ауылында Исмәғил Тасимовҡа мемориаль таҡта асылды.

✓ **"Диалогты тергеҙергә кәрәк. Ә "Управдом" - халыҡ менән диалог - урындағы кимәлдә халыҡ менән аралашыуҙың бик яҡшы формаһы, урында идара итеүҙең берҙән-бер ысулы" - тине Радий Хәбиров.**



ҠЫҪҠАСА

# ИСЕМЛЕККӘ ИНДЕК!

✓**"Торатау" геопаркы 2021 йылда ЮНЕСКО геопарктарының глобаль селтәренә дәғүә иткән 16 кандидат исемлегенә инде.** Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров социаль селтәрҙәге сәхифәһендә: "Беҙҙең "Торатау" буйынса ғаризабыҙ ЮНЕСКО-ға уҙған йылдың ноябрендә бирелде, ул Рәсәйҙән бирелгән ғаризалар араһында алдан һайлап алыуҙы үткән берҙән-бер геопарк. Һәҙәмтә Халыҡ-ара эксперттар беҙҙең мөғжизәле "Торатау"ҙы килеп күргәндән һуң ошо йыл аҙағында билдәле буласаҡ. ЮНЕСКО геопарктарының глобаль селтәренә инһә, ул республикала ғына түгел, ә тотош Рәсәйҙә халыҡ-ара статуска эйә икенсе биләмә буласаҡ. Иң мөһиме - республиканың көньяк биләмәләрен үҫтереүгә булышлыҡ итәсәк", - тине Радий Хәбиров. Иҫегеҙгә төшөрәбеҙ, 2020 йылдың 10 июлендә ЮНЕСКО башҡарма советының 209-сы сессияһында "Янғантау" геопаркы Рәсәйҙә тәүгеләрҙән булып ЮНЕСКО-ның Глобаль геопарктары исемлегенә индерелгәйне.

✓**Башҡортостан Башлығы Радий Хабиров Хөкүмәттә үткән оператив кәңәшмәлә дүртенсе сиректә шәмбе көндәрендә уҡытыуға күсергә тәҡдим итте.** "Беҙ быға тиклем шәмбе көнөн дәрестәрҙән баш тартҡайныҡ. Был ҡарарҙы хәл итеү енел булманы, шулай ҙа ул үҙен аҡланы. Әммә беҙ әле һаман "коронавирус тарихы" режимында йәшәйбеҙ. Шуға күрә ҡайһы бер шәмбене әүҙем әҙерләнеү өсөн файҙаланырға кәрәктер. Беҙ шулай уҡ балаларҙың тәнәфес ваҡытына туҡланыуына ҡағылышлы бер нисә ҡарар ҙа ҡабул иттек, - тип аңлатты Радий Хәбиров. - Быны ата-әсәләр берләшмәһе менән бергә хәл итеү мөһим". Республика етәксеһе шулай уҡ был ҡарар ковид тамамланғансы, ваҡытлыса булырға тейешлеген билдәләне.

✓**Башҡортостанда мәктәп туҡланыуын "швед өҫтәле" тибында ойоштороорға тәҡдим итәләр.** БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай рәйесе Константин Толкачев Роспотребнадзор, мәктәп туҡланыуы операторҙарын, ата-әсәләр йәмәғәтселеген һәм башҡа ҡыҙыҡһыныусы яҡтарҙы саҡырып, ошо проблема буйынса парламентта фекер алышыу үткәрергә ҡушты. "Йәмәғәт туҡланыуы өлкәһендә яңы СанПин нормалары ғәмәлгә индерелде, - тип аңлатты ул. - Унда балаларҙы буфеттағы продукция менән түгел, мотлаҡ ҡайнар аш менән туҡландырыу тураһында әйтелә. Туҡланыуға, шул иҫәптән һаулыҡ торошо буйынса айырым диетаға мохтаж булған балаларға ла, талаптар билдәләнә. Республикала мәктәп туҡланыу системаһын Роспотребнадзор талаптарына тура килтереү өсөн рекомендациялар булдырырға кәрәк. Мәктәп туҡланыуының сифаты тураһында ла мәсьәлә күтәрелә. Һорауға яуап алыуға ярашлы, ата-әсәләрҙең 70 проценты уның менән риза. Шулай булыуға ҡарамаҫтан, ялыуҙар ҙа күп. Уның сәбәптәре төрлө: балаларҙың фастфудка өҫтөнлөк биреүенән алып, хеҙмәтләндереүгә бәйле, йәғни аҙыҡтың һыуык булыуына тиклем. Һәҙәмтәлә күп балалар ашамай, ә бешерелгән ризыҡ ташлана. Шуға күрә "швед өҫтәле" принцибы буйынса ашатып ҡараған мәктәптәрҙең тәжрибәһенә йәки башҡа төрлө алымдарға мөрәжәғәт итергә мөмкин".

ТӨРЛӨҺӨНӘН

# ФОЛЬКЛОР МАЙҘАН ТОТА

**Башҡортостан Республикаһы Премьер-министры Андрей Назаров VI Бөтә донъя фольклориадаһын уҙғарыу буйынса ойоштороу комитеты ултырышын үткәрҙе.**

Был хаҡта ул социаль селтәрҙәрҙәге аккаунтында бына нимә тип яҙа: "Был - фольклор ижады өлкәһендәге үҙенсәлекле Олимпиада. Уның программаһында - милли бейеүҙәр, йырҙар, күргәҙмәләр һәм музыка ҡоралдарында уйнауҙар. Фестиваль былтыр үтергә тейеш ине, әммә коронавирус арҡаһында беҙ уны күсерҙек. Шуға күрә уны оҙаҡ көтөлгән сара тип әйтергә була. Шулай уҡ күҙгә-күҙ ҡарап аралашыуҙы, бигерәк тә халыҡ-ара аралашыуҙы ла һағындыҡ. Бөгөнгә 70 ил үҙенең ҡатнашыуын раҫланы.

Фольклориада 3-10 июлдә үтәсәк. Тантаналар республикаһың 35 муниципалитетында ойошторола. Бай һәм эшлекле программа әҙерләйбеҙ. Хедлайнерҙар сифатында исемдәре донъя кимәлендә билдәле Рәсәй коллективтарын саҡырҙыҡ. Улар араһында Пятницкий исемендәге хор, Кубань казак хоры һәм "Гжель" бейеү театры бар.

Һәм тағы. Өфөнөң үҙәк урамдары буйлап парад үтәсәк һәм донъяның 200 самаһы халыҡ вәкиле тарихтағы иң ҙур әйлән-бәйләндә әйләнәсәк. Был ваҡиғаны теркәп ҡуйыр өсөн Гиннесс рекордтар китабына ғариза бирҙек. Сараға тиклем дүрт айҙан кәмерәк ваҡыт ҡалды. Һәлкәүләнергә ваҡыт юҡ. Был беҙҙең өсөн мөһим сара. Ул Рәсәйҙә беренсе тапҡыр үтә һәм беҙ өмөттәрҙе аҡларға тейеш".

# ХАЛЫҠҠА СЫҠ!



**Сираттағы оператив кәңәшмәлә Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров муниципаль ҡалалар һәм районлар башлыҡтары алдына шундай бурыс ҡуйҙы. Быны ул БР торлаҡ-коммуналь хужалыҡ министры вазифаһын башҡарыусы Ирина Голованованың "Управдом" күп фатирлы йорттар советтарының муниципаль форумдары йомғаҡтары тураһындағы сығышынан һуң белдерҙе.**

- Былдай форумдар даими булырға тейеш, - тине Радий Фәрит улы. - Былтыр йыл ауыр булды, һәҙәмтәлә халыҡ менән осрашыуҙар үткәрелмәне, һорауҙар, аңлашылмаусылыҡтар тыуҙы. Беҙ ысын мәғәнәһендә халыҡ менән аралашмай башланыҡ. Диалогты тергеҙергә кәрәк. Ә "Управдом" - халыҡ менән диалог - урындағы кимәлдә халыҡ менән аралашыуҙың бик яҡшы формаһы, урында идара итеүҙең берҙән-бер ысулы. Красногорск ҡалаһы башлығы булғанда үткәргән үҙемдең беренсе "Управдом" сараһын иҫләйем. Дүрт сәғәт ярым эсендә үҙ адресыма нимәләр генә ишетмәнем, әммә шунһыҙ мөмкин түгел...

Радий Хәбиров БР Башлығы Хакимиәте етәксеһе Александр Сидякинга урындарҙа "Управдом" форумдарын үткәреү тәртибен раҫларға, халыҡты ҡабул итеү тәжрибәһенән анализларға, ә ошо тармаҡ министрлығына күп фатирлы йорттар советтарына ревизия яһарға ҡушты.

# ШАЯРТЫУҘЫ ҠАБУЛ ИТӘ...

**Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров Өфө КВН командалары менән осрашыуҙа "Республика йөҙҙәре" командаһына Сочиҙа үтәсәк "КиВиН" халыҡ-ара фестиваленә барырға ярҙам итәсәге хаҡында белдерҙе.**

КВН-сыларҙың һорауҙарына яуап биргәндә Радий Фәрит улы үҙенә ҡағылышлы шаяртыуҙарҙы ыңғай ҡабул итеүен билдәләне. Шулай уҡ Өфө ҡалаһының 450 йыллығын байрам итеү сиктәрендә "Шаттар һәм тапҡырҙар клубы" ның ҙур сараһын әҙерләү пландары тураһында һөйләне. Был эштә продюсер, КВН-дың Юғары лигаһы чемпионы Сангаджи Тарбаев ярҙам итәсәк. Уйынсылар юбилейға Өфөнө нисек матурлау тураһында фекерҙәре менән уртаҡлашты, Башҡортостан Башлығы призына студенттар араһында КВН кубогы үткәрергә тәҡдим итте.

Әйткәндәй, "Республика йөҙҙәре" КВН командаһы 2015 йылдың декабрендә барлыҡҡа килде. Төп составта: Дмитрий Хрисанов, Рөстәм Хәсәнов, Ришат Шәймиев, Айгизә Ғәлимова, Эрик Туҡаев. Команда өс тапҡыр Башҡортостан КВН-ы төбәк лигаһы чемпионы булды, "Һамар" КВН лигаһында финалға сыҡты (2018), "Өфө" рәсми лигаһы чемпионы , Мәскәү лигаһы ярымфиналисы (2019), Премьер-лигаһы ярымфиналисы (2020) һәм КВН-2021 беренсе лигаһы чемпионы. 2020 йылда ул Беренсе каналда Премьер-лигала ҡатнашыусылар составына инде.

# АЛДА - ИМТИХАНДАР

**Хөкүмәттә үткән оператив кәңәшмәлә Башҡортостан Мәғариф һәм фән министры Айбулат Хажин Берҙәм дәүләт имтиханын тапшырыу тәртибе тураһында һөйләне.**

Быйыл 11-се класты тамамлағандар өсөн имтихандарҙы ваҡытынан алда тапшырыу ғәмәлдән сығарылды. Берҙәм дәүләт имтиханды тик юғары уҡыу йортона уҡырға инергә теләгәндәр өсөн генә буласаҡ. Улар 31 майҙан 2 июлгә тиклем ойоштороласаҡ. Быйыл база кимәлендәге математиканан БДИ булмаясаҡ.

Юғары уҡыу йортона уҡырға барырға йыйынмаған сығарылыш уҡыусыһы дөйөм белем тураһындағы аттестат алған саҡта ике предмет буйынса ғына имтихан тапшырасаҡ. Улар - математика һәм урыҫ теле. Бынан тыш, йомғаҡлау иншаһы, изложение үткәреү ваҡыты 2 декабрҙән 15 апрелгә күсерелә. Өҫтәмә рәүештә тағы 2021 йылдың майында бер көн буласаҡ. Быйылғы тағы бер яңылыҡ - информатиканан Берҙәм дәүләт имтиханы тапшырған 11-се класс уҡыусыһы һыуҙы компьютерҙа үтәсәк. Быға тиклем был фән буйынса имтихан ҡағыҙҙа алына ине.

БДИ-ға әҙерләү өсөн февралдә уҡыусылар менән онлайн форматта осрашыуҙар ойошторолдо, 30 марттан онлайн-консультациялар башлана. Пандемияға ҡарамаҫтан, былтыр Берҙәм дәүләт имтиханы технологик тайпылыштарһыҙ үтте. Алты фән буйынса уртаса балл артты. Бынан тыш, һигеҙ предметтан уртаса балл Рәсәйҙәге уртаса күрһәткестәрҙән юғары булды. 127 йәш баллы имтихан эше теркәлде, шуның күбеһе химиянан, урыҫ теленән, информатиканан, физиканан. Дүртенсе сиректә дистанциянан уҡытыуға күсеү тырыш уҡыусыларға имтиханға уңышлы әҙерләнергә ҡамасауламаны.

## Б А Ш Ҡ А Л А Х Ә Б Ә Р Ҙ Ә Р Е

✓Өфө "Һаулыҡ һәм әүҙем ғүмер оҙайлығы" йылына арнап, 27-28 мартта уҙғарыласаҡ Төбәк-ара хәрби спорт сәнғәте форумы программаһын раҫлау һәм ярыштар уҙғарыуға әҙерлек эштәрен башланы. Унда Урал һәм Волга буйы төбәктәренән 2 меңгә яҡын ҡатнашыусы килеүе көтөлә. Сара "III Асыҡ Евразия хәрби спорт сәнғәте уйындары"на һайлап алыу этабы буласаҡ.

✓Баш ҡала хакимиәтенән хәбәр итеүҙәренсә, 24 марттан 22 апрелгә тиклем автомобиль юлдарында ауыр йөк машиналары хәрәкәтенә ваҡытлыса сикләүҙәр индерелә. Юл йөрөүгә рөхсәт алыу өсөн тәүҙә юл япмаһына килтереләсәк зыянды ҡапларға тура киләсәк. Был документтарҙы Өфө хакимиәтенең Коммуналь хужалыҡ һәм төҙөкләндереү идаралығы бирә. Төбәк һәм муниципаль әһәмиәттәге юлдарҙа 5 апрелдән 4 майға тиклем ауыр йөк машиналары хәрәкәте ваҡытлыса сикләнә.

✓Өфө ҡалаһы хакимиәте Армавир урамында 27 ҡатлы йорт төҙөүгә бирелгән рөхсәтте кире алды. Мәриянан хәбәр итеүҙәренсә, төҙөүсе "Стройтрест Девелопмент" яуаплылығы сикләнгән йәмғиәтенә, Госкомжилстройнадзор һәм Росреестрға тәғәйен белдереүҙәр ебәрелгән. Күптән түгел Хөкүмәттә уҙғарылған оператив кәңәшмәлә Башҡортостан Башлығы Радий Хәбиров алты ҡатҡа тиклем торлаҡ йорттар төҙөргә яраҡлы урындарҙа бейек йорттар һалыуҙы "бөтә законлы ысулдар менән" туҡтатырға ҡушҡайны.

✓Өфөнөң көньяғынан урап үткән тимер юлдары аша юл күпере төҙөй башлау өсөн Башҡортостан етәкселеге 2021 йылда 230 млн һумға яҡын аҡса бүләсәк. Төҙөлөш яҡынса 945 миллион һумға төшәсәк. Хәтерегеҙгә төшөрәбеҙ, быға тиклем Зинин, Нуғай һәм Аҡбирҙе ауылдары халҡы бер нисә тапҡыр тимер юл аша сыҡҡан урында күпер төҙөүҙе һорап мөрәжәғәт итте.

✓Өфөләге 39-сы гимназияла "Полилингваль мөхиттә уҡыусыларҙың тел белгәнлеген үҫтереү" инновацион майҙансыҡты асыла. Майҙансыҡты 39-сы гимназия нигеҙендә асыу тураһында килешеү Өфө дәүләт нефть техник университеты менән төҙөлдө.

**"БАШИНФОРМ" материалдары файҙаланылды.**

ИҪКӘ ТӨШӨРӘЙЕК!

# НИНДӘЙ ҠАНУНДАР ЭШЛӘЙ БАШЛАНЫ?




**Башҡортостан Республикаһы Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай былтырғы йылға йомғаҡ яһап, 2020 йылда республика парламенты тарафынан ҡабул ителгән иң мөһим закондарҙы билдәләне.**

● **Февралдә** "Башҡортостан Республикаһында байрам һәм иҫтәлекле көндәр тураһында" БР Законының 3-сө статьяһына үҙгәрештәр индереү тураһында" Закон ҡабул ителеп, унда 13 ноябрь 112-се Башҡорт кавалерия дивизияһы көнө тип нарыҡланды. "Был яңы иҫтәлекле дата тарихи ғәҙеллекте нығытып, Бөйөк Ватан һуғышы осоронда яҡташтарыбыҙҙың ҡаһарманлығын иҫкә төшөрөп торасаҡ һәм тарихи хәҡиҡәтте һаҡларға булышлыҡ итәсәк", - тине БР Дәүләт Йыйылышы - Ҡоролтай рәйесе Константин Толкачев.

● **Июнь.** "БР Ғаилә кодексының 54-се статьяһына үҙгәрештәр индереү тураһында"ғы Закон ҡабул ителде, шуға ярашлы ике һәм унан да күберәк балалы ғаиләләр, йәшәгән урындарына ҡарамайынса, кесе йәштәге балаларын мәктәпкә ҡабул итеүҙә өҫтөнлөклө хоҡуҡ менән файҙаланасаҡ. "Мәктәпкә ҡабул итеү теркәлгән адрес буйынса алып барыла, ләкин күп балалы ғаиләләрҙеге өлкән бала уҡып йөрөгәндә ғаилә икенсе урынға күсеп киткән осраҡтар була. Һөҙөмтәлә беренсе класҡа төшкән кесе бала менән уның өлкән туғаны бер-береһенән айырыла, ә уларҙың ата-әсәләре балаларҙы төрлө мәктәптәргә йөрөтөргә мәжбүр ине. Әлеге Закон был ошо мәсьәләне хәл итте", - тине К.Толкачев.

● **Июндә** шулай уҡ "Башҡортостан Республикаһында хайуандарға ҡарата яуаплы мөғәмәлә тураһында" Закон ҡабул ителде. Уға ярашлы, хайуандарға ҡарата кешелекле мөнәсәбәт булдырыу, эйәһеҙҙәрен мәжбүри үлтертеүгә юл ҡуймау, уларға вакцина яһатып, ирекҡә ебәреү йә махсус приютка тапшырыу ҡарала.

● **"Беҙҙә тәмәке тартмайҙар".** Шулай уҡ июндә ҡабул ителгән "Башҡортостан Республикаһында граждандар һаулығын тирә-йүндәге тәмәке төтөнөнән һәм тәмәке тартыу эҙемтәләренән һаҡлау тураһында"ғы Закон буйынса тәмәке тартыу тыйылған өҫтәмә урындар, шул иҫәптән парктар, скверҙар, майҙандар, яр буйҙары, йәмәғәт транспорты туҡталыштары, ер аҫты үткәүелдәре, гараждар, шулай уҡ ял, туризм, физкультура һәм спорт менән шөғөлләнеү өсөн биләмәләр, кеше күп йыйыла торған асыҡ һауала үткәрелеүсе театр-концерт, спорт, иҗтимағи-сәйәси тамаша майҙандары билдәләнде. Хәҙер был урындарҙа тәмәке тартҡан өсөн штраф күләме - 500 һум, ҡабат закон боҙған өсөн 1000 һум тәшкил итә.

● **Сентябрҙә** "Граждандарҙың шәхси һәм көнкүреш ҡулланыуында кәрәкле составында шыйыҡландырылған углеводородлы газ булған тауарҙарҙы ваҡлап һатыуҙы сикләү тураһында" ҡабул ителгән Закон шул уҡ ваҡытта балиғ булмаған үҫмерҙәрҙе һуңғы ваҡыт улар араһында киң тарала башлаған сниффинг, йәғни углеводород газын һулап ағыуланыу фажиғәләренән һаҡлап ҡалыу маҡсатын ҡуя, тип аңлатма бирә был закон хаҡында парламент рәйесе. Һуңғы ике йылда ғына ла ошо сниффинг һөҙөмтәһендә 12-15 йәштәге 360 үҫмер һәләк булған.

● **Сентябрҙәге** "Башҡортостан Республикаһында ҡайһы бер закон акттарына үҙгәрештәр индереү тураһында"ғы тағы бер Закон күп ҡатлы торлаҡ йорттарҙа, ятаҡ биналарында сәғәт көндөҙгө 1-ҙән 3-кә тиклем шаулы ремонт эштәрен тыйыу һәм йәш балалар, өлкән йәштәге граждандар тыныслығын һәм һаулығын ҡурсалау маҡсатында ҡабул ителде.

● **Октябрь.** "Башҡортостан Республикаһында ҡайһы бер закон акттарына үҙгәрештәр индереү тураһында"ғы Закон ер биреүҙең яңы тәртиптәрен нигеҙләй, дәүләт милке булараҡ сикләнмәгән ер участкаларын биреү буйынса вәкәләттәрҙе бүлә. Бындай участкалар менән идара итеү вәкәләттәре муниципалитеттарҙан Ер һәм милек мөнәсәбәттәре буйынса министрлыҡҡа күсерелде. Закон ҡабул ителгәндән һуң ошо тәртип буйынса ер биреү системаһы асыҡлана төштө һәм ошоға ҡағылышлы бөтөн эштәр бер урында тупланды. Хужалыҡ эштәре алып барыу, йорт һалыу, бизнес асыу өсөн ер алыу проблемаһы хәҙер еңеләштерелде. Иң мөһиме, коррупция ихтималлығы кәметелде. Закон 2021 йылдың ғинуарынан көсөнә инде.

● **Апрель-декабрь.** Был осорҙа парламент коронавирус пандемияһының зарарлы эҙемтәләре шарттарында граждандарға һәм бизнесҡа ярҙам итеүгә йүнәлтелгән бер нисә закон ҡабул итте. Константин Толкачев һөйләүенсә, ҡабул ителгән закондарға ярашлы, 50 тармаҡ милеккә һалымдан азат ителде. Ошондай уҡ саралар эре сауҙа үҙәктәре буйынса ла күрелде. Үҙмәшғүлдәргә бәләкәй һәм урта бизнесҡа ҡарата күрелгән ярҙам сараларына хоҡуҡ биреүсе закон барлыҡҡа килде. Бында һүҙ ташламалы кредиттар, субсидиялар хаҡында бара. Парламент шулай уҡ "Алға" айырым иҡтисади зона предприятиелары биш йылға килемдән һалым һәм транспорт һалымынан азат итеү буйынса һалым ташламалары билдәләне. Быныһ, әлбиттә, республика бюджетына һиҙелерлек көсөргәнеш килтереүенә ҡарамаҫтан, предприятиелар һаҡлап ҡалыу, эшһеҙлек проблемаһына юл ҡуймау йәһәтенән ауыр осорҙо сағыштырмаса еңелерәк үткәреүгә ярҙамы тейәсәк.

ҠАЛА ХАКИМИӘТЕНДӘ

# БАЛАЛАР ЯЛЫ ЛА...

## иғтибар үҙәгендә



**Ҡала хакимиәтенең сираттағы оператив кәңәшмәһендә көн тәртибенә сығарылған ташҡын, ташҡын ваҡытында эсәр һыу объекттарын контролдә тотоу, диспансеризация мәсьәләләре менән бер рәттән алда торған тағы бер мөһим тема - көндәр йылыта башлау менән юлдарҙы "ямау" булды. Был хаҡта Өфө ҡалаһының Коммуналь хужалыҡ һәм төҙөкләндереү идаралығы начальнигы Рөстәм Хәмитов сығыш яһаны.**

Бөгөн райондарҙың төҙөкләндереү буйынса барлыҡ хеҙмәттәре лә асфальт-бетон ҡатнашмаһын алыуға килешеү төҙөгән. Быйыл авария участкаларында соҡорҙарҙы "ямау" эштәре 15 февралдән башланған, әлегәсә барлығы 203 квадрат метр майҙан ремонтланған. Тәү сиратта эштәр "Өфө ҡалаһының соҡорҙарҙы ремонтлау буйынса интерактив картаһы"на килгән мәғлүмәттәр буйынса башҡарыла.

Шулай уҡ хакимиәттең Төҙөлөш, юлдарҙы һәм һалма ҡоролмаларҙы ремонтлау буйынса идаралыҡ начальнигы вазифаһын башҡарыусы Константин Паппе Нуғай ҡасабаһындағы тимер юлы аша юл сиселешен төҙөүгә әҙерлек барышы менән таныштырҙы. Төҙөлөштөң беренсе этабын тормошҡа ашырыу өсөн 2021-2023 йылдарға финанс ҡаралған. Тиҙҙән төҙөлөш-монтаж эштәрен башлау өсөн генераль подрядсыны асыҡлау һәм муниципаль контракт төҙөү этабы башланасаҡ.

Өлкәндәр мөһим мәсьәләләрҙе хәл иткән арала, балалар уҡыу йылын тамамлап, каникулға таралыр мәл дә етеп килә. Оператив кәңәшмәлә йәйге һауыҡтырыу кампанияһына балаларҙың ял учреждениелары-ның әҙерлеге тураһында ҡала хакимиәте башлығы урынбаҫары Алина Сөләймәнова бәйән итте. Быйыл 271 ял ойошмаһына 76 меңдән ашыу бала, үҫмер һәм йәш кешене, шул иҫәптән социаль категорияларға ҡараған 7660 баланы йәлеп итеү планлаштырыла. Яҙғы каникулда ике тапҡыр ашатыу шарты менән мәктәп яны лагерҙарын ойоштороу күҙаллана. 1 июндән 123 мәктәп һәм 8 өҫтәмә белем биреү учреждениеһы базаһындағы көндөҙгө үҙәктәрҙә 13 мең уҡыусы ял итәсәк. Балаларҙың ялын һәм сәләмәтлеген нығытыу хеҙмәтен ҡаланан ситтәге 15 лагерь күрһәтә, уларҙа 8,5 мең бала һаулығын нығытасаҡ. 7 муниципаль лагерҙа ауыр тормош шарттарында ҡалған ғаиләләрҙең балалары өсөн бюджетлы смена булдырыла. Шулай уҡ белем биреү учреждениеларында хеҙмәт бригадалары һәм берләшмәләре ойошторола, унда балалар беркетелгән территорияларҙы төҙөкләндереү һәм йәшелләндереү буйынса эштәр башҡарасаҡ. Аҙ тәмин ителгән һәм күп балалы ғаиләләрҙән булған 4200 бала хеҙмәт һәм ял лагерына йәлеп ителәсәк. Йәйге каникулдарҙа Өфөлә ҡалған балалар өсөн "Ҡалалағы йәй" социаль проекты эшләйәсәк, йәғни үҫмерҙәр клубтары базаһында, ихата майҙансыҡтарында, парктарҙа уйындар, күнекмәләр, оҫталыҡ дәрестәре, спорттың һәм ижадтың төрлө йүнәлеше вәкилдәре менән осрашыуҙар үткәреләсәк.

Зәйтүнә НИҒӘМӘТЙӘНОВА.

# ХАЛЫҠ ДАУАҺЫ



**Был рубрикала баҫылған кәңәштәрҙе ҡулланыр алдынан мотлаҡ табип менән һөйләшергә, аныҡ диагноз ҡуйырға, үләндәргә аллергия юҡлығын тикшерергә кәрәклеге онотмағыҙ.**

## Үпкә туберкулезы

❖ 200 грамм аҡ майға 200 грамм май балын ҡушып, яҡшы бутарға һәм парҙа тотоп иретергә. Ҡатышма бер төрлөгә әйләнгәс, 40 грамм ваҡланған ҡайын бөрөһөн ҡушып, төмле ыҫмала еҫе килгәнсе парҙа тоторға. Ҡатышма ҡаты сәй төҫөндә була. Әҙер булғас, уны алып һөҙөргә, һыуытырға һәм артабан һыуытҡыста һаҡларға. Үпкә туберкулезын дауалағанда был ҡатышманы көнөнә 3 тапҡыр ас ҡарынға 1-әр балғалаҡ ашарға, йылы һөт ҡушып эсергә. Был рәүешле 1 ай дауалангандан һуң 2 аҙнаға туктап торорға. Тулыһынса һауыҡҡанға тиклем ошо рәүешле ҡабаттан дауаланырға. Дауаханала тикшереүгә үтеп, үпкәләр хәлен белергә кәрәк.

## Депрессия

❖ Бөгөн был бик көнүҙәк мәсьәлә. Күптәр күңел төшөнкөлөгөнә бирелеп, ҡулына эш бармай диванда һуҙылып ята, йә киреһенсә ныҡ ҡыҙыуға әүерелә - ундайҙар менән аралашыуы еңел түгел. Был осраҡта 20-шәр грамм юл япрағы, гөлйемеш емеше, һары мәтрүшкә үләне, 10-ар грамм арыҫлан ҡойроғо үләне, кейәү үләне (чабрец), 5-әр грамм бесәй үләне (валериана) тамыры һәм юшан (вероника) үләнен алып, яҡшы бутарға. Килеп сыҡҡан йыйылманың 1 ҡалағына 2 стакан ҡайнар һыу ҡойорға, 1 сәғәт төнәтергә һәм һөҙөргә. 1 аҙна дауамында иртәнсәк ас ҡарынға һәм кискеһен йоҡларҙан 4 сәғәт алда эсергә. Был төнәтмә тынысландыра, тиҙ арыусанлыҡ һәм йоҡоһоҙлоҡтан ярҙам итә.

## Имән ҡайыры

❖ 1 балғалаҡ ваҡланған имән ҡайырына 1 стакан ҡайнар һыу ҡойоп, 15 минут ҡайнатырға һәм 1 сәғәт төнәтеп, һөҙөргә. Эс китеүҙе дауалағанда төнәтмәне 3-кә бүлеп, ашағандан һуң эсергә. Иҫкәрмә: имән ҡайыры 12 йәше тулмаған балаларға, йөклө ҡатындарға һәм эс ҡатыуҙан яфаланған кешеләргә ярамай. Уның төнәтмәһен сиктән күп эсеү ҡоҫтороуы бар.

Ғәлиә ШӘМСИЕВА әҙерләне.

***✓ Мин мәктәпкә бармаç борон "барғаннар", "килгәннәр", "атайлар", "әсәйләр" тип һөйләшә торғайным. Ә Әбйәлил районы сигендә йәшәгән хәләл ефетем "эштәй", "тештәй", "баштай", "көстө", тип, "башҡа төрҙөрәк һөйҙәшкән".***



*ЙОЛАНДАН ЙҮН ТАП!*



# БАШҠОРТ ТУҠЫМАҺЫ

Н.В. Бикбулатов башҡорт халҡын барлыҡҡа килтергән төрки телле малсылар Көньяҡ Уралға килеп төпләнгәнгә тиклем үк ҡулдан туҡыма һуғыуҙы белгән булған, тип фаразлай. Төркиҙәрҙең күпселек өлөшө (нигеҙҙә, төньяҡ-көнсығыш) һәм монгол телле халыҡтар туҡыусылыҡ менән шөғөлләнмәһә лә был фекер нигеҙле һымаҡ. Гипотезаны үҫтереп, Н.В. Бикбулатов боронғо башҡорт урынағасын ҡаҙаҡ-ҡырғыҙ-алтай тибындағы станок тип күрһәтә; башҡорттарҙа боронғо туҡыусылыҡ терминдары һаҡланып ҡалған (арҡау, ҡылыс һ.б.). Көрөç һәм табылдырыҡлы урынағасын ғалим хәҙерге осор территорияһы менән бәйләй. Уның фаразлауынса, төркиҙәр килеүгә урындағы фин-уғыр халҡында бындай урынағас булған, беренселәре уны үҙләштергән. Мәсьәләнең ҡатмарлығын аңлап, ғалим шундай өҫтәмә индерә: "фин-уғыр халыҡтарының башҡорт һәм татарҙарҙың ҡулдан һуғыу оҫталығы үҫешенә йоғонтоһон арттырып ебәрергә ярамай". Этнография китаптарында быға тиклем башҡасараҡ фекер яҙылған: фин ғалимы У.Д. Сирелиус Обь уғырҙары урынағасын Себер татарҙарынан үҙләштергән, тип фаразлай; Рәсәй тикшеренеүсеһе А.А. Попов та уның һүҙҙәрен ҡеүәтләй. Урал буйы халыҡтарының туҡыусылыҡ тарихы буйынса мәғлүмәттәр ҡаршылыҡлы. I меңъйыллыҡҡа ҡараған фин-уғыр ҡәберлектәренән алынған туҡымаларҙы өйрәнгән Л.Е. Ефимова был әйберҙәр аҫма станоктарҙа (вертикальный станок) һуғылған тип иҫәпләй. Әммә коми халҡы телендәге мәғлүмәттәргә нигеҙләнеп, Г.Н. Романова был халыҡтың ата-бабалары булғарҙарға тиклемге осорҙа уҡ арҡыры станоктарҙың иң боронғо өлгөләренең береһе менән таныш булыуы хаҡында һөйләй; уныңса, булғарҙар Урал буйына икенсе төрлө станокты - арҡау өсөн ҡылысы булғанын алып килә. Шуныһы мөһим: Кавказда кеүек үк, Урал-Волга буйында бик боронғо осорҙарҙа ҡулланылышта булһа ла, фин-уғырҙарҙа һәм Урал буйындағы башҡа халыҡтарҙағы табылдырыҡлы урынағас шулай уҡ үҙенсәлекле күренеш түгел, ул сығышы менән Көньяҡ-Көнбайыш Азиянан.

Беҙҙең эраға тиклем I меңъйыллыҡта Евразия далаларында һәм урманлы дала ерҙәрендә туҡыма һуғыу сармат күсмәндәрендә әүҙем үҫеш алған. Урал буйындағы сармат ҡатын-ҡыҙҙары ҡәберлектәрендә ҡул орсоғоноң осона ҡуйылған ауырайтҡыстар йыш табыла.

I меңъйыллыҡта Азиялағы төрки биләмәләрҙән күсмәндәр Көньяҡ Уралға килеү менән бында ҡылысҡа оҡшаш күтәреү таҡталы урынағас барлыҡҡа килә. Һуңғы осор күсмәндәрҙә туҡыусылыҡ процесы ҡасан һәм ҡайҙа үҙгәрештәр кисереүе тураһында әйтеүе ауыр. Иҙәндән өҫкә күтәреп ҡуйылған стан ағас йорт шарттарында барлыҡҡа килеүен асыҡ билдәләргә була; уны рам-урын ағасына йәки урындыҡҡа беркетеп ҡорғандар. Эш барышында буйғау ептәр сиратланышын көрөçтәр һәм тәбәлдерек ярҙамында аяҡ менән көйләп булған. Ҡайһы бер осраҡта күтәреү таҡтаһы ҡулланылған, ә тараҡ (бердо) урынына ҡылыс (мечевидная дощечка) ҡулланылған.

**Светлана ШИТОВА.**

**"Халыҡ сәнғәте: көньяҡ башҡорттарында кейеҙ, балаç һәм туҡымалар. Этнографик очерктар" китабынан.**

*ТЕЛ ТӨБӨ - ХАЗИНА*

# ДИАЛЕКТ ҺҮҘҘӘРЕ...

## һөйләшебеҙҙе байыта ғына



**Ни өсөн ауылдаштарыбыҙҙың ҡайһылары Ғайса ағайымды Айса тип атай икән, тип йыш уйлай торғайным бала саҡта. Бер аҙ һуңғараҡ аңлауымса, ғәрәп теленән күскән ғәйәт күп һүҙҙәр шулай төрлөгә төрләндерелгән икән. Мәçәлән, Абдуллин, Ибәтуллин тигән фамилиялар кемдәрҙәлер Ғабдуллин, Ғибәҙуллин йә Һибәтуллин тип йөрөтөлә. Ғәлиә тигән исемдең дә һуңғы осорҙа Әлиә тигән варианты беҙҙә күберәк яңғырай башланы.**

Беҙҙең бер киленебеҙҙең атаәсәһе оҙаҡ йылдар Үзбәкстанда йәшәгән. Атаһының фамилияһы - Ғүмәров. Ҡыҙҙары (хәҙерге беҙҙең килен) донъяға килгәс, тыуыу тураһындағы таныҡлығында үзбәктәр уға Умарова тип яҙып биргән. Киленебеҙ һаман да шул фамилия менән йөрөй. Башҡортта ла "Үмәр" тигән исемде ишеткәнем, "Аҡыл" һүҙенең дә "ғаҡыл" тигән вариантын уҡығаным бар.

Һүҙҙәребеҙҙәге был өндәр халҡыбыҙ ғәрәптән урыç алфавитына күскән осорҙа ана шулай төрлөләнгән булһа кәрәк. Ғәрәп алфавитында ике оҡшаш хәреф бар. Яҙылышта береһенең өҫтөндә нөктәһе булыу менән генә айырыла улар. Ғәрәпсә уҡырға өйрәткән әсбапта был хәрефтәрҙең ҡатыраҡ әйтеп уҡылғанын "ғайн", ә йомшағырағын "ғәйн" тип яҙалар. Ғәмәлдә иһә, йомшағырағы (нөктәһеҙе) "ғ" менән "а" өнө араһында, әлеге "Ғайса"ға ла, "Айса"ға ла оҡшашыраҡ итеп, тамаҡ төбөнән әйтелеп, уларҙың уртансы варианты һымағыраҡ яңғырай. Шуға күрә лә берәүҙәргә "Ғайса", икенселәргә "Айса" тиеү ҡулайлыраҡ килеп сыҡҡан да инде. Ғайса бәйғәмбәр ғәләйһис-сәләм хаҡында һүҙ барғанда ҡайһы бер урыç телле кешеләр уны "Иса" тип тә әйтә (Ҡөрьән-Кәримдә, тәүге ижеккә баçым яһалып, "Ғиса" тип яҙылған). Рус хәрефе менән ана шуларҙың береһен генә яҙырға тура килә, уртансыһы - юҡ.

Бынан тыш та, ғәрәп алфавитын ғәмәлдән сығарыу сәбәпле, халҡыбыҙҙа әллә күпме һүҙҙәребеҙ икеләнеп киткәнлеген аҙым һайын осратабыҙ. "Азамат" тигән исемде генә алып ҡараһаҡ, әлеге "ғәйн" хәрефенән башланған "ғәҙим" һүҙе уның тамыры булып тора ("бөйөк" тигәнде аңлата). Ә "ғаҙамат" - бөйөклөк, урыç телендәге транскрипцияла уны "азамат" тип яҙалар. Йырҙар китабындағы "Байыҡ" йырында был һүҙ "аҙамат" ("Һай, аҙамат, ир-арыçлан...") тип яҙылһа, "Азамат" йырында "з" менән бирелгән. Исемдәребеҙ бөтә ерҙә лә Азамат булып йөрөй. Ә "Ғәҙим" - "Ғәзим" булып киткән.

Яңы алфавитты ғәмәлгә ашырыу, рус хәрефтәре ярҙамында яңы һүҙлек төҙөү эше менән, әлбиттә, яҙыусы халҡы - тел белгестәре шөғөлләнгән. Бына шундай күп кенә һүҙҙәребеҙҙең сығанағына иғтибар итһәк, уларҙы төҙөүҙә башҡорт һәм татар телле яҙыусыларҙың берҙәй ҡатнашлығы ла һиҙелә. Ҡайһы бер "ғаҙаб", "çауаб", "ҙолом", "ҙаң" һәм башҡа күп кенә ғәрәп һүҙҙәре башҡортҡа ла, татарға ла "ғазап", "сауап", "золом", "заң" булып үҙгәртелеп ингән. Был һүҙҙәр татар телле яҙыусылар тарафынан һүҙлеккә индерелгән булһа кәрәк. Сөнки татар телендә "ҙ", "ç" хәрефтәре һәм өнө юҡ. Татарса сыҡҡан "Ҡөрьән-Кәримде уҡыу өсөн ярҙамлыҡ" китабында был хәрефтәргә "саҡау з" һәм "саҡау с" (һаҡау) тигән аңлатма бирелгән. Ә татар теленә "әсәр", "мисал", "мәсәлән" булып үҙгәреп ингән бәғзе бер һүҙҙәр башҡорт телендә "әçәр", "миçал", "мәçәлән" көйө үҙгәртелмәй һаҡланып ҡалған. Быларын, әлбиттә, һүҙлеккә башҡорт телле яҙыусыларыбыҙ индергән, тип уйларға ҡала.

Шул уҡ ваҡытта ғәрәп һүҙҙәренең ҡайһылары, киреһенсә, татар телендә шул килеш һаҡланған. Мәçәлән, Жәмил, Жәннәт, Жәһәннәм, сурәт, жәмәғәт, һ.б. Беҙҙең телгә, үҙгәртелеп, улар Йәмил, Йәннәт, Йәһәннәм, һүрәт, йәмәғәт булып килеп ингәндәр. Әйткәндәй, "йәмле" һүҙенең тамырын белмәгәндәр ҙә күп. "Матур" тигәнде аңлатҡан "жәмил" һүҙенән килеп сыҡҡан да инде ул. "Моратҡа ирешеү" һүҙбәйләнешен йыш ҡына ҡулланабыҙ. Морат исеме шунан килеп сыҡҡан инде (мурад - ғәрәпсәнән урыçсаға "хотение", йәғни "теләк" тип тәржемәләнә). "Мораҙым" да "минең теләгәнем" тип атаһы яратып ҡушҡан исем булһа кәрәк.

Ғәрәп телендә булмаған "в", "п", "о", "ө" хәрефтәре һәм өндәренә бәйләнешле айырмалар ҙа күп кенә. Бындай хәрефле һүҙҙәрҙе урыç алфавитына күсереү әҙиптәребеҙҙең алдында ярайһы ғына сетерекле мәсьәлә булып та торғандыр, тип уйлайым. Ғәрәпсә лә, башҡортса ла "уатан", "уаҡыт", "уаҡиға", "үәкил" тип яңғыраған был һүҙҙәр нишләптер "ватан", "ваҡыт", "ваҡиға", "вәкил" тип һүҙлеккә индерелгән. "Китаб" - китап, "кәсиб" - "кәсеп", "хисаб" - "хисап", "дунъя" - "донъя" булып киткән һымаҡ миçалдар ҙа байтаҡ ҡына. Боронғо мәҙрәсәлә уҡыған Фазылйән олатайым башҡортса яҙғанда "китаб", "яуаб", "хисаб" тип яҙғанына ғәжәпләнә торғайным, бына ҡайҙа булған уның әтнәкәһе!

Тағы бер миçал. Ҡөрьән-Кәримдә һәм башҡа бөтә дини китаптарҙа "Аллаһ" һүҙенән бер урында ла аҙаҡҡы "һ" хәрефе төшөрөп ҡалдырылмай. Ана шул йомоҡ өндө күрһәтеүсе хәреф бөгөнгө көндә лә туған телебеҙҙә сығарылған ҡайһы бер баçмаларҙа һаҡланып килә, ә икенселәрендә (хатта күптәрендә), һүҙлектәрҙә лә "Алла" тип кенә яҙалар. Был да, ихтимал, әлеге егерменсе-утыҙынсы йылдарҙағы үҙгәртеп ҡороу заманының нәтижәһелер. Әлбиттә, шулай, сөнки ғәрәп хәрефтәре менән был һүҙҙе бер нисек тә "һ"һыҙ яҙыу мөмкин түгеллегенә иманым камил! Инде оҙаҡ ҡына дин ғилемен өйрәнеп йөрөүсе, үҙе лә дин юлында булған тарих фәндәре кандидаты Фуат Сөләймәнов минең "Алла" тип яҙғанымды күргәс, ошолай тип әйткәйне: "Аллаһ" һүҙенән аҙаҡҡы (йомоҡ) "һ"ны төшөрөп ҡалдырһаң, "башҡорт" һүҙен "башҡор" тип яҙған һымаҡ була бит..." Ысынлап та, хатта "һ" хәрефе бөтөнләйгә булмаған русса транскрипцияла ла "Аллах", тип аҙаҡҡы ана шул хәрефте һаҡлап маташалар. Әйткәндәй, Ҡөрьән-Кәримдең 1993 йылғы башҡорт теленә тәржемәһендә лә был һүҙ "һ" хәрефеһеҙ сығарылған. Мине башҡа һүҙҙәр әллә ни борсомай. Халҡыбыҙ лөғәтендә әллә ҡасан уҡ нығынып бөткән бихисап һүҙҙәрҙең ғәрәпсә яҙылышын да ҡабаттан аяҡҡа баçтырыу яҡлы түгелмен (бының кәрәге лә юҡ), әммә ошо ифрат мөһим, хатта иң тәү кәрәк булған бер генә һүҙҙе - Аллаһтың исемен нисек яҙыу мәсьәләһен, диниә наҙараты менән берлектә хәл итеү һәм дөрөç кенә итеп фәтүә сығарыу ҙа яҡшы булыр ине, тип һанайым.

Әйе, туған телдең төрлө үҙенсәлектәренең һәм нескәлектәренең формалашыуында, уларҙың һаҡланыуында тел белгестәренең - яҙыусыларҙың, шулай уҡ улар яҙғанды балаларға еткереүсе мәктәп уҡытыусыларының роле әйтеп бөткөһөҙ ҙурҙыр. Уҡытыусы нисек өйрәтһә, бала тап ана шулай итеп яҙырға һәм һөйләшергә өйрәнә инде ул. Республикабыҙ райондарындағы һөйләшеү диалекттарын ғына алып ҡарайыҡ. Мин Баймаҡ районының Йылайырға яҡыныраҡ яртыһында тыуып үçкән кеше булараҡ, мәктәпкә бармаç борон "барғаннар", "килгәннәр", "атайлар", "әсәйләр" , тип һөйләшә торғайным. Ә Әбйәлил районы сигендә йәшәгән хәләл ефетем бала сағында "эштәй", "тештәй", "баштай", "көстө", тип, "башҡа төрҙөрәк һөйҙәшкән". Һуңғараҡ, мәктәпкә йөрөп, дөйөм программа буйынса уҡый башлағас, уҡытыусыларыбыҙ шулай ҙа икебеҙҙе лә әҙәби телдә һөйләшергә өйрәткән.

Һуңғы йылдарҙа ошо "дөрөç һөйләшеү-һөйләшмәү" мәсьәләһенә башҡараҡ төрлө, "йомшағыраҡ" ҡараш һиҙелә: киң мәғлүмәт сараларында, бүтән баçмаларҙа урындағы диалектты ҡулланып яҙыусыларҙы ла әрләй һалып бармайҙар. Миңә, тел ғилемен махсус өйрәнмәгән яҙыусыға, дөрөçөн әйткәндә, был оҡшай. Бындай иреклелек телебеҙҙе һис кенә лә боҙмай, ә, киреһенсә, уны байыта ғына, тигән инаныуҙамын. Ә һеҙ нисек уйлайһығыҙ?

**Хәлил ҺӨЙӨНДӨКОВ.**

ЫРЫУЫҢ КЕМ?

# ЫРЫУЫБЫҘ ИРӘКТЕ - ЯУГИР БАШҠОРТ ЙӨРӘКЛЕ



Береһе артынан икенсеһе тоҡанып торған XVII-XVIII быуаттарҙағы башҡорт ихтилалдарының барыһында ла элек-электән һуғышсан рухтары менән дан ҡаҙанған ирәкте башҡорттары ла бик әүҙем ҡатнаша. Күп юғалтыуҙарға ҡарамаҫтан, бик күп тиҫтә йылдар буйына башҡорттар үҙҙәренең төп хоҡуҡтарын - аҫабалыҡты, дини инаныстарын, үҙ ҡанундарына һәм йолаларына ярашлы идара итә алыу мөмкинлеген һаҡлап алып ҡала. Иң ҡан ҡойошло, күп ҡорбандар килтерелгән 1735-1740 йылдарҙағы күтәрелеш башҡорт илен нык ҡаҡшата. 1737-1738 йылдарҙа танып, ирәкте, уран, балыҡсы һәм ғәйнә башҡорттары, батша властарының төрлөсә өгөтләүҙәренә лә, янауҙарына ла ҡарамайынса, баш һалырға ашыҡмай. Башҡорт эштәре комиссияһы экстрактында Себер һәм Уса даруғаларында хәрәкәт иткән баш күтәреүселәр отрядтары хаҡында ошондай мәғлүмәт теркәлгән: "... на речке Богазе 300 человек, при них главный Балахчинской волости деревни Бердаш Тамак Мустуев; в деревне Усиндрусе 300, у них главные деревни Мин Муслюм да Мустай, чьи дети неизвестно; в вершинах по реке Таныпу 300, у них главный Таныпской волости Ракай Кутлин; в Кунгурском уезде в деревне Сулмаш 400, у них главный деревни Куюковой Дюмаш Сингаев, из того числа на 150 человеках по 2 панциря, а у прочих ружья; в Гайнинской волости в Чюминском лесу 450 человек, главный у них Иректинской волости деревни Чюкуровой Муртаза Халимов, Картапской (т. е. Кыр-Таныпской. - **Ред.**) волости Алмет Илкин; на реке Багазе 250, у них главный Уранской волости деревни Кустяй Халил Абдусалимов, да брат ево Искандер-Мустафа Тумянеев, все оружейные; в Балакчинской волости в деревне Усейдюсень 480, главный у них Иректинской волости деревни Кудашевой Мусала Чапаров".

Әказак Пугачёв етәкселегендәге ихтилал башланғас, Салауат Юлаев, Кинйә Арыҫлановтар кеүек халыҡ батырҙары менән бергә йөҙәрләгән башҡорт уҙамандары ла яуға күтәрелә. Әммә башҡорттар араһында батша власына тоғролоҡ һаҡлағандар ҙа була. Улар иҫәбендә Ҡыр-Танып олоҫо старшинаһы (бәғзе бер мәғлүмәттәр буйынса Ҡара-Табын олоҫонан) Ҡолой Балтасов һәм Ирәкте олоҫо тарханы Шәриф Кейеков була. Улар каратель, батша полковнигы Михельсон ғәскәре составында баш күтәреүселәргә ҡаршы сыға. Ихтилалсылар Шәриф Кейековтың өйөн яндыра, Йософ исемле улын аҫып үлтерә. Ул 1774 йылдың апрелендә ихтилалсылар ҡулына эләгә, әммә уны язаға тарттырып өлгөрмәйҙәр. Батшабикә Екатерина II Шәриф Кейековты алтын миҙал һәм исемле ҡылыс менән бүләкләй, уға офицер чины бирелә. Уның бүләсәре Ғарифулла Кейеков "Шәриф бабамдың ҡылысына" тигән шиғыр яҙып, ошо ваҡиғаларҙы бөткөһөҙ үкенес менән иҫкә ала:

*"Эй, мөбәрәк ҡылыс!*
*Нисә баштарҙы ҡыйҙың?*
*Атланып, айғырҙар аҡыртып,*
*Нисә башҡортто һуйҙың?*
*Ҡайҙа, бармы йәнең*
*Йәки сығыр телең?*
*"Отличие" алам, тиеп,*
*Ҡалдымы бер-бер динең?*
*Йәки ҡалдымы балаңа*
*Бер сөйөм бармаҡ ерең?*
*Мәртәбәләр алам, тиеп,*
*Һуйлып бөттө тиреӊ.*
*Йә, ҡылыс, ник өндәшмәйһең?*
*Ҡайҙа ҡуйҙың дуҫыңды?*
*Россияны һаҡлайым, тиеп,*
*Балаларың нитте һуңыны?"*

Ирәкте ырыуының иң арҙаҡлы улдарынан шағир, дин эшмәкәре, тарихсы Мөхәммәт-Ғәли Соҡорой, уның талантлы улы Ғарифулла Кейеков - Тарихи Башҡорт иленең билдәле шәхестәре. Башҡортостандың халыҡ шағиры Әнғәм Атнабаев та сығышы менән ирәкте ырыуынан. Ирәктеләрҙең һуғышсан рухын Советтар Союзы Геройҙары, 112-се Башҡорт атлы дивизияһы яугиры Әмир Сөләймән улы Хәйҙәров, Бәҙретдинов Миңнулла Бәҙретдин улы, Сәйетов Ғәбделхәй Сәйет улы үҙҙәренең героик ғәмәлдәре менән раҫланы.

Генетик тикшеренеүҙәр ирәкте башҡорттарының, табын, балыҡсы, танып, унлар, күҙәй, ҡошсо ырыуҙарына хас булғанса, R1a-M198 (R1a1-Z93 субклады) гаплотөркөмөнә ҡарауын асыҡланы.

**Арыҫлан ТАЙМАСОВ әҙерләне.**
**(Аҙағы).**

БӨЙӨК ЕҢЕҮГӘ - 75



# ҠАҺАРМАНЛЫҠ ТАРИХЫ

## Ватан өсөн йән ҡыҙғанмай һинең улдарың, Урал

1942 йылдың октябрь айы баштарында дивизияға талантлы артист, балетмейстер Фәйзи Ғәскәров килгәс, политбүлек инициативаһы менән дивизияла ҡурайсылар һәм бейеүселәрҙән торған үҙешмәкәр сәнғәт төркөмө ойошторола. Улар марш барышында, ял итер өсөн бирелгән көндәрҙә, йыш ҡына һалдаттар алдында сығыш яһап, уларҙың күңелдәрен күтәреп ебәрә. Шулай уҡ маршта саҡта дивизияның разведка дивизионы ойошторолоп, майор Шәрәф Ғайсин уның командиры, капитан Абдулла Әхмәҙиев командир урынбаҫары вазифаларына тәғәйенләнә. Дивизион составына иң ҡыйыу, физик яҡтан көслө, йылғыр боецтар һайлап алына.

Марш ваҡытында командирҙар һәм рядовой атлылар өсөн тағы ла бер иҫтәлекле ваҡиға була: дивизия штабынан барыһы өсөн дә ҡыуанныслы хәбәр алына - 29 октябрҙә Воронеж өлкәһенең Калач ҡалаһында Башҡортостандан махсус эшелон менән ебәрелгән хөкүмәт делегацияһы менән осрашыу буласағы хаҡында әйтелә унда. Башҡортостандың халыҡ шағиры Сәйфи Ҡудаш 1943 йылда Өфө ҡалаһында нәшер ителгән "Башҡорт атлылары" китабында үҙенең ошо осрашыу хаҡындағы яҡты хәтирәләрен баҫтыра. Гәзитебеҙ биттәрендә шағирҙың "Дон далаһында" тип аталған күләмле мәҡәләһен яңынан халҡыбыҙ иғтибарына тәҡдим итеү урынлы үә сауаплы булыр, тибеҙ.

Әлегә ошо осрашыу ваҡиғаһы хаҡында дивизия политбүлеге начальнигы урынбаҫары Сабир Ҡадировтың үҙенең командиры Миңлеғәли Шайморатовҡа арналған "Урал бөркөтө" китабынан алынған хәтирәләрен урынлаштырабыҙ.

"Башҡорт АССР-ының Халыҡ Комиссарҙары Советы Рәйесе урынбаҫары М. Вәльшин иптәш етәкселегендәге халыҡ вәкилдәрен тиҙҙән күреү бәхетенә лә ирештек. Улар беҙгә, башҡорт халҡының фронттағы улдарына һәм ҡыҙҙарына, ҡәҙерле бүләктәрен, күренекле һүҙ оҫталары, йырсы-бейеүселәре аша халҡыбыҙҙың сихриәтле йыр-моңдарын һәм изгеләрҙән-изге халҡыбыҙҙың яугирҙарға төбәп әйткән йөрәк һүҙен, еңеү теләктәрен килтереп еткерҙеләр. Һуғышсыларға бүләктәр әҙерләү республикабыҙҙа үҙе бер ҙур ҡыуаныс, байрам булһа, ул бүләктәҙе һәм сәләмдәрҙе таратыу дивизияла ла оло туйға әүерелде.

Ваҡ ҡыуаҡлыҡтар уратып алған бәләкәй генә аҡланда, ҡырмыҫҡа иләүе кеүек, күҙгә ташланып бармай торған ныҡлы бер эске тәртипкә буйһонған хәрби тормош ҡайнай. Ҡоласын киң йәйеп үҫкән ҡарт груша ағасы төбөндә ергә түшәлгән плащ-палаткалар өҫтөндә башҡорт йолаһы буйынса ҡәҙерле ҡунаҡтар өсөн, йомшаҡ мендәрҙәр ҡуйып, түр-табын әҙерләнгән. Был урын ап-аҡ ҡайын ағастары менән кәртәләп алынған.

Эскадрондар һуғышсан тиҙлек һәм ҡаты хәрби тәртип менән ҡунаҡтар урынлашҡан аҡланды дәррәү әйләндереп алдылар, ҡулдарына автоматтарын тотҡан килеш, изге тынлыҡ һаҡлап торҙолар. Дивизия командирының һаулыҡ һорап сәләмләүенә яуап ауазы, бер күкрәктән урғылғандай, гөрөлдәп, тәрән тынлыҡты боҙҙо.

**Вәли ИҘРИСОВ әҙерләне.**
**(Дауамы бар).**

ТАРИХ ЯРСЫҠТАРЫ

# ӘЛМИСАҠТАН...



➔ **1842-1851 йылдар -** Ырымбурҙың хәрби губернаторы Владимир Афанасьевич Обручев идара иткән йылдар. Күсмә тормош рәүештәрен үҙгәртеүҙе кәрәк табып, ул башҡорттарға айырым иғтибар менән ҡарай, ләкин был ниәте уңышһыҙ тамамлана. Обручев юллауы буйынса ҡыҙҙар училищеһы - Тәрбиәле ҡыҙҙар институты, Неплюев хәрби училищеһы Ырымбур кадет корпусы итеп үҙгәртелә. Обручев Ҡаҙан университетының ветеринария бүлегендә 10 стипендия булдырыуға рөхсәт ала. Рус география йәмғиәтенең ҡырғыҙ урҙаһына ҡағылышлы баҫылып сыҡҡан материалдары менән ҡыҙыҡһына. Сиркәүҙәр төҙөлөшөнә, фельдшер мәктәптәрен ҡарауға һәм Ырымбурҙа ҡыҙҙар училищеһын төҙөп бөтөрөүгә аҡса бирә.

➔ **1845-1921 йылдар -** шағир Сафуан Рәхмәтуллиндың ғүмер йылдары.

➔ **1846 йылдың август айы -** Каруанһарай мәсете яҡтыртыла. Был ҡоролманың шул замандың күренекле архитекторы Александр Павлович Брюллов Ырымбур генерал-губернаторы В.А.Перовскийҙың яҡын дуҫы була.

➔ **1847-1857 йылдар -** Ырымбур губернаһында бөйөк украин шағиры Т.Г. Шевченко булған.

➔ **1848 -** Камала судно хәрәкәте асылып, уларҙың билдәле бер йөрөү тәртибе булдырыла.

➔ **1848-1918 йылдар -** Ырымбур, Пермь губерналарындағы халыҡ училищеларының инспекторы, Рус география йәмғиәте ағзаһы, башҡорт фольклоры өлгөләрен йыйыусы А.Г. Бессоновтың ғүмер йылдары.

➔ **1848 йылдың 17 декабре -** Ҡаҙан университеты Советында Әлмөхәмәт Ҡыуатов көнсығыш филологияһы фәндәре кандидаты дәрәжәһенә лайыҡ була.

➔ **1851 -** Рәсми мәғлүмәттәр буйынса, Ырымбур губернаһында 1645716 кеше йәшәгән. Ете йылда крайҙағы кеше һаны 314342-гә артып, йәмғеһе 1960058 кеше тәшкил иткән.

➔ **1853-1856 йылдар -** В.А.Перовский башҡорт ғәскәре менән Урта Азияға икенсе походын ойоштора. Ул Аҡмәсет (хәҙер Перовск) ҡалаһын алыу менән тамамлана.

➔ **1853-1856 йылдар -** Башҡорттар Ҡырым һуғышында ҡатнаша.

➔ **1855-1915 йылдар -** Талантлы публицист һәм ғалим Николай Владимирович Ремезовтың ғүмер йылдары. Уның "Ҡырағай Башҡорт иле тормошонан очерктар" тигән китабы иҡтисад һәм тарихты өйрәнеүҙә ҙур әһәмиәткә эйә.

➔ **1855 йылдың 13 октябре -** Ырымбурҙағы Неплюев училищеһы ҡыҙҙар тәрбиәләү институты тип үҙгәртелә.

➔ **1856-1921 йылдар -** Йырсы һәм ҡурайсы Ғәбит Сәсәнденң ғүмер йылдары.

**Дәүләт МӘҺӘҘИЕВ төҙөгән.**
**(Дауамы бар).**

*✓ Әлеге мәлдә тел үҫһен, эштәр алға барһын өсөн экосистема кәрәк. Бына ошо системала һәр береһе үҙенең эшен башҡарып һәм шул уҡ ваҡытта бер-береһенә ярҙам итеп, бергәләшеп эшләп китмәйенсә, эш алға бармаясаҡ.*



# ИНТЕРНЕТТА, ЦИФРЛЫ

## башҡорт теленең

**Был тормошта һәр саҡ башҡаларҙан бер аҙым алдараҡ йөрөгән кешеләр була. Улар йәмғиәттә үҙ идеяларын, фекерҙәрен әйтеп, ҡайһы ваҡыт аңлау тапмай һәм бер ни тиклем тынып торғандан һуң, ҡабат үҙ асылына әйләнеп ҡайтып, тағы ла аңлатыу эштәре алып бара башлай. Әммә улар бер ваҡытта ла үҙҙәре һайлаған юлдан тайпылмай, сөнки ваҡыт уларҙың хаҡлы булыуын раҫлай. Әле генә үҙебеҙҙе: "Ике башҡорт башҡорт телендә һөйләшә икән, тимәк, тел йәшәйәсәк", "Башҡорт телендә ғаиләлә һөйләшәләр икән - тел үлмәй", - тип тынысландырһаҡ, хәҙерге яңы технологиялар заманында: "Әгәр һинең телең интернетта, цифрлы технологияларҙа бар икән, тимәк ул йәшәй", - тигән юлдар төп әйтемгә әйләнә шикелле. Был, ысынлап та, шулаймы? Теманы нығыраҡ асыҡлау өсөн һүҙҙе социология фәндәре кандидаты Тимур МӨХТӘРОВ менән "Башҡорт проекттары" проекты ирекмәндәре координаторы Илдар КИНЙӘБУЛАТОВҡа бирәйек.**

**Тимур Мөхтәров: Былтыр 14 декабрҙә икенсе тапҡыр рәсми рәүештә Башҡорт теле көнөн билдәләнек. Ошо йәһәттән, йыл да тамамланғас, башҡорт теленең хәленә, башҡарылған эштәргә ниндәй йомғаҡ яһарға, ниндәй баһа бирергә була? Белеүебеҙсә, башҡорт теле 2009 йылдан ЮНЕСКО тарафынан юғалып барған телдәр атласына индерелгән һәм, минеңсә, уның хәле ауыр, сөнки башҡорт телен һаҡлап ҡалыу, үҫтереү өсөн мотлаҡ эшләнергә тейешле бик күп эштәр атҡарылмай ҡала. Бигерәк тә онлайн, цифрлы йә интернеттағы башҡорт теле өлкәһендә тейешле эштәр башҡарыламы, улар маҡсатҡа ярашлы алып барыламы, ниндәй проблемалар бар һәм әгәр булһа, уларҙан сығыу юлы буйынса ниндәй кәңәштәр бирер инең?**

**Илдар Кинйәбулатов:** Ниндәйҙер проекттар эшләнә, үҙенсә ниндәйҙер хәрәкәт бара. Ләкин хәрәкәт төрлөсә. Мәҫәлән, цифрлаштырыу темаһын дөйөм алғанда ул бер нисә йүнәлештән тора. Беренсенән, телде цифрлы донъяға индереү өсөн дөйөм йәки лингвистик технологиялар бар. Улар инглиз телендә NLP (Natural Language Processing - тәбиғи телде эшкәртеү технологиялары) тип атала, ана шул процестар беҙҙә яйыраҡ үҫешә. Ә улар ни өсөн кәрәк? Улар онлайн тәржемә, телде аңлау һәм телде синтезлау системалары. Ошолар - бер йүнәлеш. Икенсенән, мәғариф өлкәһендә телде уҡытыу, телде өйрәнеүҙә ҡулланылған продукттар һәм технологиялар. Элек бит уҡытыу өсөн китаптар, әсбаптар булған, хәҙерге заманда ҡушымталар, медиа материалдар, төрлө ярҙамсы технологиялар кәрәк. Был өлкәлә ниндәйҙер үҙгәрештәр бара, яңы продукттар барлыҡҡа килгән һымаҡ. Өсөнсөнән - медиа. Был өлкәлә, дөрөҫөн әйткәндә, күп нәмә яйыраҡ бара, әйтәйек, яңы форматта булған киң мәғлүмәт саралары башҡорт телендә әле үҫешмәгән.

**Тимур Мөхтәров: Һуңғы йылдар эсендә интернетта ниндәйерәк процестар бара: башҡорт телен ҡулланыу күләме, сайттар, контенттар артамы, әллә, киреһенсә, кәмейме?**

**Илдар Кинйәбулатов:** Дөйөм алғанда, әлбиттә, башҡорт телендә сыҡҡан контент күләме арта һәм иң элек был социаль селтәрҙәрҙә күренә: телде белгән кешеләр башҡортса аралаша, сәхифәләрендә йәки төркөмдәрендә төрлө тематикалар буйынса контент эшләй. Икенсе яҡтан, киреһенсә, башҡортса алып барылған сайттарҙың һаны кәмей бара. Беренсе шундай тикшеренеүҙәрҙе 2009 йылда Борис Орехов һәм БДУ-ның компьютер филологияһы буйынса лабораторияһы башлағайны. Шунан бирле сайттарҙың иҫәбен тикшереп торалар, әле Борис Орехов Мәскәүҙә Юғары иҡтисад мәктәбендә гуманитар тикшеренеүҙәр буйынса лабораторияла эшләй һәм улар Рәсәйҙә төрлө телдәрҙә сыҡҡан сайттарҙы өйрәнә. Беҙ ҙә 2016 йылда шундай тикшеренеү үткәргәйнек. Ул ваҡытта башҡортса сайттарҙың һаны 126 булһа, әлеге мәлдә, Борис Ореховтың тикшеренеүҙәре буйынса - 74.

**Тимур Мөхтәров: Был сайттарҙың һаны кәмеүе беҙҙең өсөн бик ҡурҡынысмы, әллә ул объектив процесмы?**

**Илдар Кинйәбулатов:** Уны объектив процесс тип ҡарарға һәм сәбәптәрен дә әйтеп китергә була. Беренсенән, әгәр 2016 йылда киң мәғлүмәт саралары, һәр гәзит-журнал үҙенең сайтын асып, уны параллель рәүештә алып барырға тырышһа, хәҙер сайттар һаны кәмене. Икенсенән, хөкүмәт сайттары. Элегерәк, әйтәйек, Мортаза Рәхимов заманында күпселек мәғлүмәт системалары ике телдә эшләнде, ә әле, киреһенсә, яңы сыҡҡан сайттар, мәғлүмәт системаларының күпселеге урыҫ телендә генә алып барыла. Мәҫәлән, Госуслуги - ул федераль талаптар буйынса эшләнгән һәм унда башҡорт теле лә, шул иҫәптән Рәсәй халыҡтарының башҡа телдәре лә ҡулланылмай. Йәғни, яңы сығарылған сайттар Рәсәй халыҡтары телдәрен ҡабул итмәй.



**Тимур Мөхтәров: Башҡорт телендә киң мәғлүмәт сараһы - электрон гәзитме, яңылыҡтар порталымы булырға тейеш. Мин башҡортса ундай порталды белмәйем. BashNews порталында телевидение, радио хәбәрҙәре яҙма рәүештә лә ҡуйыла. Ул әйтеп киткән порталға тап киләме, юҡмы?**

**Илдар Кинйәбулатов:** Башҡорт телендә мәғлүмәттәр сығыуын сыға ул. Мәҫәлән, BashNews, Башинформ, башҡа гәзит-журналдар - уларҙың дөйөм порталы RB.SMI тип атала, башҡортса сыҡҡан порталдар ҙа бар. Тик уларҙың элекке форматтамы, яңы форматтамы икәнен айырырға кәрәк. Әйтәйек, Башҡортостан телевидениеһының порталы - ул яңыраҡ контент, шул уҡ ваҡытта Рәсәй мәғлүмәт саралары һымаҡ порталдар етешмәй. Беҙҙә порталдарға күберәк редакцияға ҡағылышлы мәғлүмәт сыға. Әгәр редакция яңы медиа талаптары буйынса эшләй икән, тимәк, уны яңы медиа тип атап була. Әйтәйек, Татарстанда ошондай форматта эшләгән порталдар бар ул, тик, үкенескә күрә, улары ла рус телендә.

**Тимур Мөхтәров: Беҙҙең башҡорт теле технологик йәһәттән әҙерәк артта ҡалған, башҡортса телмәр синтезы, телмәр анализы юҡ. Яңы портал булһа, уны яңы контент менән тултырырға ярҙам итер инеңме?**

**Илдар Кинйәбулатов:** Әлбиттә, бында шундай дөйөм генераль технологиялар ҡулланыла һәм улар башҡа проекттарға ныҡ йоғонто яһай. Мәҫәлән, урамдарҙа, магазиндарҙа, иғландарҙа хаталар йыш осрай һәм уны активистар, ябай граждандар күҙәтеп, күреп йөрөй. Ни өсөн алтаҡталарҙа хаталар килеп сыға? Сөнки уларҙы эшләгән дизайнерҙар Яндекс-тәржемәсе системаһын ҡуллана, улар, әлбиттә, тәржемәнең сифаты яҡшымы, насармы икәнен белмәй. Башҡа телдәрҙә, мәҫәлән, ҡаҙаҡ, ҡырғыҙ телдәрендә шул системаны ҡулланғанда хаталар ул тиклем күп булмай. Телде белмәүселәр исемлектә башҡорт телен күрә лә, уны ла хатаһыҙ, камил икән тип ҡуллана бирә.

> ***Минеңсә, шул уҡ онлайн-тәржемәсе, телмәр синтезы менән анализы киң мәғлүмәт сараларын да, милли мәғарифты үҫтереүҙә лә иң кәрәклеһе булырға тейеш, сөнки беҙ аңламай, һиҙмәй ҡалһаҡ та, ҡағыҙ дәүере артта ҡалып бара. Быға тиклем иң ҡурҡыныс нәмә глобалләшеү булһа, хатта телебеҙ ассимиляцияға түгел, ә глобалләшеүгә дусар ителһә, хәҙер иһә цифрлаштырыу хәүеф менән янай. Глобаль кимәлдә башҡорт теле ошо цифрлаштырыу процесы эсендә юғалып ҡалмаһын өсөн алдыбыҙҙа ниндәй бурыстар тора? Был мәсьәләне ни өсөн күтәрәм, сөнки урбанизация хатта башҡорт халҡының йәшәү рәүешен юҡҡа сығарҙы, башҡорттар ҡалаға күсеп, күбеһе башҡортлоғон, телен юғалта һәм ниндәйҙер бер һоро массаға әйләнә.***

Әлбиттә, әгәр ошондай тәржемә системаһы яҡшырһа, күпселек уның менән ҡулланып, контент тулыландырыр, аралашыу ҙа артыр ине.

**Тимур Мөхтәров: Минеңсә, шул уҡ онлайн-тәржемәсе, телмәр синтезы менән анализы киң мәғлүмәт сараларын да, милли мәғарифты үҫтереүҙә лә иң кәрәклеһе булырға тейеш, сөнки беҙ аңламай, һиҙмәй ҡалһаҡ та, ҡағыҙ дәүере артта ҡалып бара. Быға тиклем иң ҡурҡыныс нәмә глобалләшеү булһа, хатта телебеҙ ассимиляцияға түгел, ә глобалләшеүгә дусар ителһә, хәҙер иһә цифрлаштырыу хәүеф менән янай. Глобаль кимәлдә башҡорт теле ошо цифрлаштырыу процесы эсендә юғалып ҡалмаһын өсөн алдыбыҙҙа ниндәй бурыстар тора? Был мәсьәләне ни өсөн күтәрәм, сөнки урбанизация хатта башҡорт халҡының йәшәү рәүешен юҡҡа сығарҙы, башҡорттар ҡалаға күсеп, күбеһе башҡортлоғон, телен юғалта һәм ниндәйҙер бер һоро массаға әйләнә. Цифрлаштырыуҙы ла глобаль рәүештә ҡараһаҡ, ул яҡшымы, насармы?**

**Илдар Кинйәбулатов:** Телдәрҙең цифрлаштырылыуы - ул ике яҡлы. Бер яҡтан, әлбиттә, һәр телдең яңы мөмкинлектәре арта. Мәҫәлән, бәләкәй тел цифрлаштырылһа, ошо технологияны үҙләштереп алға китһә, ул юғалып ҡалмай. Икенсе яҡтан, цифрлаштырыу хатта күп кеше ҡулланған телдәр араһында ла үҙенсәлекле ярыш башланы. Мәҫәлән, инглиз теле ошо яңы технологияларҙы бик яҡшы үҙләштерә һәм башҡа телдәргә ҡарағанда күпкә тиҙерәк үҫешә. Ә урыҫ теле саҡ ҡына артта ҡалып бара. Һәм был шулай уҡ ниндәйҙер дискриминация тыуҙыра: кем цифрлы технологияларҙы тиҙерәк үҙләштерә, шулар тиҙерәк алға китә, ә артта ҡалып барғандар цифрлы донъяла ла әллә ни ҡаҙаныштар яулай алмай. Башҡорт теленең хәле тураһында әйткәндә, минеңсә, әле өмөт бар. Әммә башҡорт теле һаҡланып ҡаламы йәки алға китәме - уныһы үҙебеҙҙән тора.

**Тимур Мөхтәров: Цифрлаштырыу өсөн ниндәйҙер фәнни ойошмаларҙың йәки ирекмәндәрҙең ҙур күләмле эштәре кәрәк. Башҡортостанда ундай үҙәктәр, фәнни ойошмалар һәм ирекмәндәр бар. Кемдәр аныҡ шул эштәрҙе башҡара йә башҡармай?**

**Илдар Кинйәбулатов:** Әйтәйек, әлеге мәлдә тел үҫһен, эштәр алға барһын өсөн экосистема кәрәк. Ул бер нисә өлөштән тора: фәнни үҙәктәр, разработчиктар/программа эшләүселәр, ирекмәндәр, төрлө проекттар, ошо проекттарҙы финанслау, финанс ярҙамы күрһәтеү системаһы, шулай уҡ Хөкүмәттең төрлө институциялары, йәмәғәт ойошмалары һәм шәхси кешеләр. Бына ошо системала һәр береһе үҙенең эшен башҡарып һәм шул уҡ ваҡытта бер-береһенә ярҙам итеп, бергәләшеп эшләп китмәйенсә, эш алға бармаясаҡ. Әйтәйек, фәнни ойошмаларҙы алһаҡ, бер яҡтан, башҡ-

***✓ Ошо өлкәлә менеджментты артабан да яҡшыртырға кәрәк. Айырым проекттарҙы эшләү генә кәрәкле һөҙөмтә бирмәйәсәк, бөтә нәмә комплекста эшләнергә тейеш. Проблеманы әлегә Хөкүмәттән башҡа берәү ҙә хәл итә алмаясаҡ.***



орт теле, лингвистика буйынса тикшеренеүҙәр яҡшы алып барыла. Икенсе яҡтан, компьютер филологияһы һаман башланғыс хәлдә генә тора. Ирекмәндәргә килгәндә, Рәсәй халыҡтары менән сағыштырғанда беҙҙә тел өлкәһендә иң көслө ирекмәндәр хәрәкәте бар. Үкенескә күрә, был хәрәкәт тейешле ярҙам күрмәне. Әлеге ваҡытта айырым активистар һаман үҙ эшен алып бара, ләкин быға саҡлы булған хәрәкәт һүнеп ҡалды. Хәҙер удмурт, татар телендә әүҙем эшләгәндәр һаны, бәлки, күберәктер. Ә бер нисә йыл элек, киреһенсә, беҙ алда бара инек.

Финанс ярҙамына килгәндә, әлбиттә, яҡшы үҙгәрештәр бар. Мәҫәлән, әле йыл һайын ойошмаларға гранттар бирелә. Ләкин был финанс ярҙамын профессиональ разработчиктар түгел, йышыраҡ бюджет ойошмалары, йә Хөкүмәт менән яҡын аралашҡан йәмәғәт ойошмалары ала. Әммә грант алған һәр ойошма ла уңышлы эшләй тип әйтеп булмай, сөнки күптәргә тәжрибә етешмәй.

теленең параллель корпусын сығарырға маташа. Шуға ҡарамаҫтан, ул бер кемгә лә кәрәкмәй. Әлбиттә, Фонд яғынан да, Ҡоролтай яғынан да, Хөкүмәт яғынан да был ҡарашты үҙгәртеү зарур. Белеүемсә, был активистар менән Фонд ҡына аралаша, башҡалар ҡолаҡҡа ла элмәй, бәлки, белмәйҙәрҙер ҙә. Башҡортостанда ирекмәндәр был өлкәлә күп кенә тәжрибә туплаған һәм уларҙың белеме юғалып ҡалырға тейеш түгел.

**▸ Тимур Мөхтәров: Килешәм, ирекмәндәрҙең дә шундай проблемалары бар, ләкин, фәнни ойошмаларҙың да йә ойоштороу йәһәтенән, йә Хөкүмәт менән мөнәсәбәт булдырыуҙа барыһы ла ал да гөл түгел, тип беләм. Мәҫәлән, Дәүләт программаһында башҡорт телен анализлау һәм синтез, башҡорт теленең милли корпусын төҙөү буйынса айырым эштәр планлаштырылған һәм уларға финанслау ҡаралған. Ләкин, белеүемсә, башҡорт теле өсөн бик тә кәрәкле саралар тураһында, йәғни үҙе талаптар ҡуйып,**

ға, йәғни үҙе талаптар ҡуйып, был эште тиҙләтергә тейеш. Икенсе яҡтан, бында разработчиктар һәм шәхси компанияларҙы йәлеп итмәйенсә эш урынынан ҡуҙғалмаясаҡ. Мәскәүҙә урыҫ теленә ҡағылышлы күпселек нигеҙле технологиялар Яндекс һәм ABBYY компаниялары менән партнерлыҡта булдырылған. Параллель корпус та, тәржемә системалары, эҙләү системаларына нисек кенә ҡарама, барыбер һин йә береһенә сығаһың, йә икенсеһенә. Шулай уҡ Питерҙа Телмәр технологиялары үҙәге бар - хәҙер ул Сбербанктың экосистемаһына инә. Ентекләп тикшерә башлаһаң, ошо өс компанияның береһенә барып сығаһың.

Беҙҙә ни өсөн проекттар яртылаш ҡына тормошҡа ашырылған? Сөнки ошо разработчиктарҙың өлөшө эшләнмәгән. Әлбиттә, бындай проекттарҙы, телдең нигеҙле технологияларын фән өлкәһе белгестәре һәм разработчиктар бергә генә эшләй ала. Мәҫәлән, Ҡаҙанда яңыраҡ тәржемә

һәм кире яҡтары бар. Кеше, ысынлап та, ошо технологияларға һыуһаған. Онлайн тәржемәсе, Алиса һымаҡ эҙләү системалары күптән кәрәк. Шуның өсөн дә әлеге мәлдә иң яҡшыһы - был өлкәлә тәжрибәһе булған разработчиктарға заказ биреп, тиҙерәк эшләтеп алыу. Икенсе яҡтан, Башҡортостанда ошо хисаплау лингвистикаһы өлкәһендә тикшеренеүҙәр алып барған фәнни үҙәк кәрәк, сөнки NLP технологиялар алдынғы инновацион технологияларҙың мөһим өлөшө. Әйтәйек, Яндекс һәм Гугл һымаҡ компаниялар ошондай технологияларға таянып эшләнгән. Әгәр һин тел менән эш итә белмәйһең икән, башҡа технологияларың да алға барамясаҡ. Мәҫәлән, интерфейстарың кеше менән аралаша белмәй икән, һата ла, хеҙмәтләндерә лә алмайһың. Йәғни, эҙләү системаһы - ул тел, тел менән эш итеү, тәржемә системалары - шулай уҡ тел, һәм башҡа эштәрҙе лә NLP технологияларһыҙ атҡарып булмай. Тимәк, әгәр Баш-

**үҫә, улар башҡортса өйрәнә, әммә башҡортса контент күрмәй. Мәктәп программаһына башҡортса уҡытыу кермәй, сөнки контент юҡ, яңы дәреслектәр сығарылмай һ.б. Миненсә, был бик түбән баһа. ЮНЕСКО критерийҙары буйынса йә башҡа халыҡ-ара стандарттарға таянып, ошо процестарға ниндәй баһа бирер инең?**

**Илдар Кинйәбулатов:** Тренд, әлбиттә, аңлашыла, әгәр ҙә уны үҙгәртмәһәк, башҡорт теле икенсе, түбәнерәк статуста ҡаласаҡ. Мәҫәлән, әлеге мәлдә Рәсәйҙә ундай телдәр араһында мари теле, эрзән теле бар. Башҡорт теле менән сағыштырғанда, уларҙың хәле насарыраҡ, һөйләшкән кешеләрҙең һаны ла кәмерәк, телде белеүселәр ҙә аҙ, белем биреү ҙә шәптән түгел. Әлеге тренд осоронда был башҡорт теленең киләһе стадияһы ошондай булырына ишара. Мин оптимист, һәм уэльс телен алһаҡ, ул ҡасандыр ошондай деградацияны үткән, әлеге мәлдә уны тергеҙәләр. Иврит теле

# ТЕХНОЛОГИЯЛАРҘА...

## үҙ урыны бармы?

Әлбиттә, проекттары яҡшы ла булырға мөмкин, ләкин эште башлап ебәреп, артабан дауам итергә тәжрибәләре етмәй ҙә ҡуя. Финанс мәсьәләһе - ул проекттың бер яғы ғына бит, иң мөһиме - белем, тәжрибә, технологиялар.

**▸ Тимур Мөхтәров: Милли һәм тел сәйәсәтен алып барыуҙы финанслау, ул сәйәсәтте берҙәм рәүештә үткәреү, ошо ирекмәндәрҙе, дәүләт структураларын берләштереү өсөн кемгә, ниндәй органға йәки дәүләт кешеһенә өмөт бағлай алабыҙ?**

**Илдар Кинйәбулатов:** Миненсә, ундай структуралар бар ул. Әйтәйек, Башҡорт телен һаҡлау һәм үҫтереү фонды, Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы, ошо эштәр буйынса хәҙер айырым министрлыҡ, комитеттар бар. Эштәр алып барыла, ләкин ирекмәндәр, активистар менән тығыҙыраҡ бәйләнештә эшләргә кәрәк. Төрлө проекттар башҡарыла һәм Хөкүмәт өсөн интерфейс - ул ойошма. Ә талаптарға яуап бирерҙәй эштәрҙе барыбер айырым кешеләр алып бара. Уларҙы бер кем дә күрмәй, ойоштороу ярҙамы күрһәтелмәй, уларҙы бер-береһе менән таныштырыу, аралаштырыу эше атҡарылмай тиерлек. Шуға, айырым активистарға, әүҙем эшләгән кешеләргә шулай уҡ ярҙам кәрәк, тип әйтмәксемен. Мәҫәлән, Искәндәр Шакиров нисәмә йылдар буйы ошо цифрлаштырыу менән шөғөлләнә: үҙе китаптар сканлай, шәхси китапханаһын булдырҙы, хәҙер ул башҡорт

**да нишләптер бик ишетелмәй, фәнни ойошмаларға башҡарырға бирелмәй. Мәҫәлән, БР Тарих, тел һәм әҙәбиәт институты ошо сараларҙы бойомға ашырырға тейеш булған, әммә Хөкүмәт тарафынан заказ, ошо эштәрҙе башҡарыу буйынса мәғлүмәт килмәгән. Хөкүмәт, министрлыҡтар яғынан ниндәйҙер инициатива күрмәйбеҙ, шуға, ирекһеҙҙән, шундай фекер**

**тыуа: был эштәр исем өсөн генә башҡарыламы? Был осраҡта кем инициатор булырға тейеш: Хөкүмәтме, фәнни ойошмалармы, ирекмәндәрме? Кем яуаплы?**

**Илдар Кинйәбулатов:** Ҡатмарлы технологиялар тураһында әйткәндә, ысынлап та, был эште ойоштороуға аҡса бүленгән, әммә нисәмә йылдар инде эш бер нисек тә алға бармай. Элек был өлкәлә Зиннур Сиражетдинов - берҙәнбер фән кешеһе - булды. Ул һаман да был проекттарҙы алып бара. Миненсә, был осраҡта Хөкүмәт заказсы булыр-

системаһы тәҡдим ителде, миненсә, унда Иннополис менән Семиотика институты бергә эшләгән һәм һөҙөмтәһе ысынлап та яҡшы. Миненсә, ошо модель беҙгә лә тура килә. Әгәр ҙә беҙ прогресс теләйбеҙ икән, тимәк, был эшкә шәхси компанияларҙы ла йәлеп итергә кәрәк.

**▸ Тимур Мөхтәров: Тап Татарстандың Семиотика институты хатта башҡортса-русса онлайн тәржемәсе эшләне. Ирекһеҙҙән шундай фекер тыуа: беҙҙең фәнни, дәүләт һәм коммерция структуралары быны башҡара алмаймы, үҙебеҙҙә шуны башҡарырлыҡ кадрҙар юҡмы? Ярай, онлайн тәржемәсе - ул ябайыраҡ проект, ә шул уҡ башҡорт теленең синтезын һәм анализын башҡарыр өсөн дә кадрҙар кәрәк. Әллә, ысынлап та, хәҙер был кадрҙар юҡҡа сыға һәм беҙгә башҡорт теленә ҡағылышлы эштәрҙе йә Мәскәүгә, йә Ҡаҙанға заказ биреп кенә башҡарырға тура киләсәкме?**

**Илдар Кинйәбулатов:** Һәр бер ысулдың үҙенең ыңғай



***Тренд, әлбиттә, аңлашыла, әгәр ҙә уны үҙгәртмәһәк, башҡорт теле икенсе, түбәнерәк статуста ҡаласаҡ. Мәҫәлән, әлеге мәлдә Рәсәйҙә ундай телдәр араһында мари теле, эрзән теле бар. Башҡорт теле менән сағыштырғанда, уларҙың хәле насарыраҡ, һөйләшкән кешеләрҙең һаны ла кәмерәк, телде белеүселәр ҙә аҙ, белем биреү ҙә шәптән түгел. Әлеге тренд осоронда был башҡорт теленең киләһе стадияһы ошондай булырына ишара. Мин оптимист, әгәр ҙә башҡорт теле бөтөнләй юғалып ҡалмаһа, тейешле саралар күрелһә, тейешле технологиялар эшләнһә, Хөкүмәт үҙенең сәйәсәтен, кешеләр телгә ҡарашын, мөнәсәбәтен үҙгәртһә, ысын әүҙем эштәр ошо мәлдән башланһа, иврит һәм уэльс теленең уңышын ҡабатлап булыр ине.***

ҡортостанда ошо технологияларҙы үҙләштерерлек, алға этәрерлек фәнни үҙәк булмай икән, беҙҙең башҡа технологиялар ҙа артта тороп ҡаласаҡ.

**▸ Тимур Мөхтәров: Цифрлаштырыу һәм башҡа темалар буйынса фекерҙәреңде уҡып, үҙемә шундай һығымта яһаным: беҙҙең был өлкәлә баһабыҙ ике менән өс билдәһе араһында тора, сөнки, миненсә, беҙҙә фәнни мәсьәләләр генә түгел, башҡорт телен өйрәнеү ысулдары, ҡушымталар, төрлө программалар, сайттар, медиа бик үҫешмәгән, юл башында ғына тора. Балалар**

шундай юл үтте. Әгәр ҙә башҡорт теле бөтөнләй юғалып ҡалмаһа, тейешле саралар күрелһә, тейешле технологиялар эшләнһә, Хөкүмәт үҙенең сәйәсәтен, кешеләр телгә ҡарашын, мөнәсәбәтен үҙгәртһә, ысын әүҙем эштәр ошо мәлдән башланһа, иврит һәм уэльс теленең уңышын ҡабатлап булыр ине.

**ШУЛАЙ ИТЕП...**

**Тимур Мөхтәров менән Илдар Кинйәбулатовтың был диалогы "Ашҡаҙар" радиоһындағы "Ике йондоҙ" тапшырыуында яңғырағайны. Авторы З. Шәймәрҙәнованың рөхсәте менән был һөйләшеүҙең стенограммаһын ҡағыҙға төшөрөп, үҙебеҙҙең уҡыусыларға ла тәҡдим итергә булдыҡ. Һөйләшеүҙә атап үтелгән проблемаларҙы хәл итеү өсөн Илдар Кинйәбулатовтың тағы бер фекеренә ҡолаҡ һалыу зарур: "Ошо проекттар өҫтөндә Бөтөн донъя башҡорттары ҡоролтайы Башҡарма комитетында ла, бер нисә йыл ирекмән булып та эшләнем, гранттар конкурсында ла ҡатнаштым. Хөкүмәт системаһының нисегерәк эшләгәнен аңлап, нимә әйтер инем: әлбиттә, хәл-торошто яҡшыртыу өсөн потенциал бар һәм ул юғары, бары тик ошо өлкәлә менеджментты артабан да яҡшыртырға кәрәк. Айырым проекттарҙы сығарыу, эшләү генә кәрәкле һөҙөмтә бирмәйәсәк, бөтә нәмә комплекста эшләнергә тейеш. Һәм ошо бөгөн телгә алған ойошмалар, кешеләрҙең барыһы бергә тығыҙ аралашып эшләүе фарыз. Проблеманы әлегә Хөкүмәттән башҡа берәү ҙә хәл итә алмаясаҡ".**

**Әңгәмәне ҡағыҙға З. ӘЙЛЕ төшөрҙө.**

✓ *Телефонының көсө автобуста килгәндә үк бөткәйне. Өйөндә белә-күрә зарядкаға ҡуймағайны. Өйҙә ятҡанда етәксеһе лә, башҡаһы ла теңкәгә тейеп шылтыратмаһын өсөн, сығып киткәс бисәһе теңкәгә теймәһен, тип.*




Бер аҙ өҫкә ҡарап тын ултырҙы. Үҙенсә шулай тынысланырға тырышты.

- Әйҙә, әйҙә, һикер, һикер, әле, Зөбәйер! - тип үҙен дәртләндерергә тырышты. - Ҡара, ҡара, әллә менеп булмаймы шул, инәңдең ҡара сәйе. Эһе-һей. - Сәмләнеп маташты. Тағы, тағы ынтылып ҡараны. Һикереп нимәгәләр йәбешергә маташты. Тирләп сыҡты, еңе менән генә маңлайын, күҙ-ҡашын һөртөп, тағы өҫкә ынтылды. - Ҡара әле, ысынлап та менеп булмай, эт талағыр нәмә. Эһе-һей!

Шашып һикерергә тотонды, күҙен алартып өҫкә ҡараны.

- Ҡотҡарығыҙ! - әсе итеп ҡысҡырҙы. Аяғын тотоп яңынан ултырҙы. - Әллә быныһы ҡаймыҡҡан, ней менеп булмай.

"Ҡара, ысынлап та менеп булмай. Тә-әк. Был ваҡытта кеше ни эшләргә тейеш әле? Иң тәүҙә... паникаға бирелергә ярамай. - күҙҙәрен йомоп, ҡулдарын алға һуҙҙы. - Мин тыныс, мин үҙ өйөмдә, мин тыныс.

Шул рәүешле әҙерәк ултыра бирҙе лә ҡапыл һикереп торҙо.

- Ниндәй өйөмдә булайым. Мин - йәһәннәм соҡоронда, эһе-һей, кем бар бында, ҡотҡарығыҙ! Ҡотҡарығыҙ, тим. - Тырнаҡ аҫтарында ауыртыуҙы ла тоймай, стенаны тырнаны, шулай өҫкә тартылырға уйланы, шикелле. Бер нисә тапҡыр һикергәс, һул аяғын тотоп, яңынан ултырҙы.

- Уф, әллә ҡаймыҡҡан быныһы, ой, һыҙлай. Тынысланырға кәрәк. - Был юлы аяҡтарын сәнсеп ултырып ҡараны, тик һыҙлаған аяҡ ыҡҡа килмәне, уларҙы һуҙып стенаға терәлде. Шунан үҙенә хас булмаған ягымлы, нәҙек тауыш менән:

- Ҡотҡары-ғыҙ, мин бында, мин бик һәйбәт кеше, - тине лә тынып ҡалды. Шылт иткән тауыш та юҡ. Йәне көйөп китте. Ҡалын тауышы соҡор эсен генә түгел, бар тирә-яҡты яңғыратты. - Шайтан алғыры нәмәкәйҙәр, ҡотҡарығыҙ тим, сыҡһам, барығыҙҙы ла ҡырам, ишеттегеҙме, хөрәм тигәс хөрәм...

Тик уны ишетеүсе булманы. Бер кем дә соҡор янына килмәне, ҡотҡарырға ла, хөрәләргә лә.

- Тыныслан, тим. Үҙеңде ҡулға ал әҙерәк. Му-ужи-ик! - биштәрен ҡулына алғас ҡына бар тәненең ҡалтыранғанын тойҙо. Ҡапыл йөҙөнә йылмайыу хасил булды. Тик ҡурҡыу аша тыуған йылмайыу күҙендә лә, йөҙөндә лә нур уята алманы шикелле. - Һуң телефон бар ҙаһа, нимәгә шул тиклем бәргеләнергә!

Һаҡ ҡына кеҫәһенән телефонын сығарҙы. Ҡулы уның юҡҡа ҡалтырамай ине. Насар, юҡ, дөрөҫөрәге, ысынбарлыҡтағы уйын бахыр йылмайыу аша юҡҡа сығарырға тырышҡанын ул үҙе генә белә ине. Эйе, эйе, телефонының көсө автобуста килгәндә үк бөткәйне. Өйөндә белә-күрә зарядкаға ҡуймағайны. Өйҙә ятҡанда етәксеһе лә, башҡаһы ла теңкәгә тейеп шылтыратмаһын өсөн, сығып киткәс бисәһе теңкәгә теймәһен, тип. Ул бөгөн ирекле... булырға тейеш ине бит. Баҡса ҡарау һылтауы менән ер күрергә, көҙгө япраҡ өҫтөнән ҡыштыр-ҡыштыр килеп йөрөргә тип сыҡты. Һәм телефонһыҙ. Бер кем дә борсомаһын, Әминә лә, эштәгеләр ҙә... Диуана. Кеше үҙенсә уйлай, Хоҙай үҙенсә йүнләй, тигәндәре ошолор. Ул ҡалтыранған ҡулдары менән телефонын тоҡандырырға тырышты, үҙе диуана кеүек бер туҡтауһыҙ йылмайҙы. Ошо ҡыҫыр һәм сәйер йылмайыуы аша үҙендә өмөт уятырға тырыша ул.

- Был донъяның ике килмәгәнен диуаналар ғына белмәйҙер, - телефонында яҡтылыҡ пәйҙә булғас, йырлап та маташты. Тауышы ҡалтырап-ҡалтырап сыҡты. - Әһә-һә, әҙерәк көсө бармы әллә? Ба-ар, ур-ра!

Кемгә шылтыратырға, тип уйлап торманы, тәүҙә үк әллә өйрәнеш буйынса, әллә... ҡыҫҡаһы, тиҙ генә бисәһенең телефон номерына баҫты. "Вне зоны действия", - татлы ғына тауышлы ҡатындың хәбәрен ишеткәс, телефонын күтәреп бәрергәй булды. "Тиҙерәк, тиҙерәк нимәләр эшләргә кәрәк", - тип уйланы.

- Тотмай, нисек? - аяғына баҫты. Һул аяғының һыҙлағанын да тойманы. "Тә-әк, иң мөһиме - тыныслыҡ, паникаға бирелмәҫкә. Батарея бөтмәҫ борон хәбәр яҙып, күккә ырғытырға кәрәк, бәлки, тотор".

Ҡалтыранған ҡулдары тыңлашмай бер булды. "Шулай ҙа ҡул ҡалтырай. Нимә тип яҙырға? Тиҙ генә, тиҙ... Батарея ултырмаҫ борон".

"Ҡотҡар, бисәкәй. Мин соҡорҙа, 37 участок", - тип яҙҙы ла телефонды өҫкә ырғытты һәм төшөп килгән ыңғай тотоп алды. Экранға күҙ һалды.

- Б... китмәгән. - Был юлы көсәнеберәк һелтәне. Тағы ла тотоп алды. - Батарея бөтә, тиҙерәк кит! - тип бойорҙо. Телефонына күҙ һалып өлгөрҙө, уныһы "пип-пип" тине лә һүнде. Тик ир унда "Сообщение отправлено" тигән яҙыуҙы күреп ҡалды, шикелле. Әллә күҙенә шулай күренгәнме? Былай ҙа алйып барған күҙҙәргә нимә генә күренмәҫ.

- Китте, шикелле. Фу-у, - тынысланып ултырҙы. Һул аяғын ышҡып алды. - Булды, табыр әле. Кәрәк булһам, табы-ыр, - тип һуҙҙы.

Ҙур эш эшләгән кешеләй йәйләп ултырып биштәрен асты. Унан свитерын сығарып, штормовка эсенән кейеп алды. Өшөүҙән ҡурҡты. Эйе, бер өшөһәң, йылынып булмаясаҡ. Касан эҙләп таба әле? Шешә төбөндә ҡалған һыуға ҡарап торҙо ла ғолт-ғолт килеп эсеп бөтөп ҡуйҙы. Һыуһаған икән. Нисектер күңеленә рәхәт булып китте. Саңлы зәңгәр төтөн араһынан күккә бағып ултырҙы. Һәм... ҡапыл һикереп торғанын да һиҙмәй ҡалды.

- Фу-у, шайтан алғыры! 37-се участок, имеш, минең ҡайҙа киткәнде белмәй зәһә. Ер ҡараштырып ҡына киләм, тинем дә. Күҙгә салынған беренсе автобусҡа ултырҙым, үәт, шайта-ан, - тип һөйләнә-һөйләнә тағы кеҫәһенән телефонын сығарҙы ла тоҡандырыу төймәһенә баҫа башланы. Тегеһе башҡа тоҡанманы. Аптырап һелкетеп-һелкетеп алды. Тик ул йәнһеҙ ине.

- Дә, диуана һин, Зөбәйер. Минең тыуған көн 27 март, имеш, был юҡҡа түгел, тип, 273-сө автобусҡа ултыр ҙа кит инде. Бисә белде ти һинең Иглин тарафтарына олаҡҡаныңды.

Элек ер алыу тураһында һөйләшкәндә Әминәһе, Өфөгә яҡыныраҡ районларҙы ҡарарға кәрәк, Ҡырмыҫҡалы тирәһен, унда ер уңдырышлы, тип әйткәйне. Ир бөтөнләй икенсе яҡҡа ыңғайланы.

- Хәҙер ул тауыҡ баштың уйына ла инеп сыҡмай бит инде. Иглин уның төшөнә лә кергәне юҡ. Ҡырмыҫҡалы тирәһенә 37-се участокты эҙләп йөрөйәсәк. Һәмәйттем мин уны. Әйҙә, эҙләһен, ә мин бында шым ғына соҡорҙа тик ултырам. - Ир ни эшләргә белмәй, бер ҡалҡынды, бер ултырҙы. "Һәмәйттем, һәмәйттем!" тип йәмһеҙ итеп көлгән булды.

- Телефон ял итеп алһын да тағы бер тоҡандырып ҡарарбыҙ. Ял ит, өмөтөм, бар ышанысым минең, - телефонын иплап кенә кеҫәһенә һалып ҡуйҙы ир.

Ваҡыт бик әкрен үтһә лә, барыбер Ер шары артабан тәгәрләүен дауам итте. Йәйләп ҡына эңер төшкәне һиҙелде. Соҡор эсе ҡараңғыланғандан-ҡараңғылана барҙы.

- Эһе-һей, бармы берәйһе? Ҡарауыл, эһе-һей, - тип ҡысҡырып-ҡысҡырып алды ир. Яңғыҙы ҡалғыһы килгәйне, бына ултыра яңғыҙы. Үҙен бар донъянан йәшенеп ултырған кеүек хис итте. Ҡапыл ҡыҙы иҫенә төштө. Ярата ул Сәриһен, берҙән-берен. Шыбыр-шыбыр килеп һанашмаҡ әйтергә тотонды.

*- Бер бабай юлға сыҡҡан,*
*Тәгәрмәсе боҙолған.*
*Уны йүнәтер өсөн*
*Нисә сей кәрәк булған?*

*Аладан- баладан,*
*Бесәй йөрөй йылғанан.*
*Сәүкә, сыпсыҡ,*
*Һин ҡал, был сыҡ!*

Ҡайҙан иҫенә килгәндәр. Бала саҡта шулай уйнай торғайнылар инде. Ниндәй уйынға тотонһалар ҙа, "Аҡ тирәк, күк тирәк" булһынмы, һуғыш уйыны тиһеңме, тәүҙә һанашмаҡ әйтеп командаларға бүленә, йә көтөүсе яллайҙар ине. Һуңынан ҡыҙы балалар баҡсаһында йөрөгәндә ошо һанашмаҡты уға ла ятлатҡайны. Бына хәҙер ҡайҙа кәрәк булып китте.

- Мин йәшендем, ҡыҙым, тап мине, тап, - тип бөгәрләнеп ятты. Әкрен генә күҙҙәренән йәштәр тамды. Кипкән ирендәре ниҙер шыбырланы:

*- Аҡ сыҡ,*
*Ҡара сыҡ,*
*Бында торма,*
*Бар, сыҡ!*

Сығырһың, сыҡмай ни - йөҙтүбән күккә ҡарап ятты. Ашҡаҙаны, был донъяла мин дә бар әле, тип шағыр-шоғор килеп тауыш бирҙе. Асыҡҡанын тойҙо ир. Биштәрен, кеҫәләрен тотҡолап ҡараны. Көнөндә әйләнәм, тип ашарға ла алмаған, исмаһам. Ҡапыл өс көндән ҡыҙының тыуған көнө икәне иҫенә төштө. Тағы торҙо, әйтерһең, хәҙер сығып ҡайта ла китә.

- Нисек тә ҡайтып өлгөрөргә ине ул, - тине ҡарлыға барған тауышы менән. - Эһе-һей, товарищи, господа, йәмәғәт, әфәнделәр, мин бында! Эҙләйһегеҙме мине?

"Бына һиңә мә, бүреләр олой башланы... ҡорһаҡта. Өҫтә ысын бүреләр тешен ыржайтып олоһа ла ҡурҡмаҫ инем, - ашҡаҙан тирәһен тотҡоланы, - бында олоһа, ҡыйыныраҡ. Түҙеп булмаҫҡа мөмкин", - тип уйланы.

- Берәйегеҙ ашарға алып килегеҙ әле. Эй, официант, 150 грамм "зәм-зәмский" һыу, бутерброд с колбасой, юҡ, юҡ, ыуылдырыҡ менән, зинһар. - Ир, биштәрен әйләндереп, төбөндәге икмәк ваҡтарын устарына ҡойоп-һыпырып алды ла, ҡулын күтәреп, ауыҙына ҡойоп ебәрҙе. - Ана шулай!.. Фу, араһында егерме бишле ҡаҙаҡ та килеп сыҡты. - Ауыҙынан ҡаҙаҡ тартып сығарҙы. - Саҡ йотоп ебәрмәнем. Берҙе кикереп ебәргәндә лә була. Иртәнге манный бутҡаһы эргәһенә был бер ус "икра" матур ғына барып ятты ул. Минең кеүек талымһыҙ әҙәмгә был да тамам, - көсәнеп кикереп ебәргән булды. Шунан бер ауыҙ тын торғас, ҡапыл һикереп торҙо ла, аяғын тотоп, яңынан ултырҙы. Асырғанып ҡысҡырҙы. - Тамам түгел, мин асыҡтым! Эһ-һе-һей, кешеләр, ҡотҡарығыҙ мине! Мин асыҡтым, өшөйөм, сыҡҡым килә минең!.. Әминәм табыр әле, ул мине ете ҡат ер аҫтынан да табасаҡ. Кәрәк бит мин уға...

...Әкрен генә ҡараңғы төштө. Ҡаҡ ергә биштәрен түшәп, бөгәрләнеп ятты Ир.

## Беренсе төн

Оҙаҡ ҡына ятты. Ойоп киткеләне, шикелле. Шулай ҙа һаҡ ятты. Бәлки, берәйһе килеп сығыр йә тауыш бирер, тип көттө. Ҡаҡ ерҙә ятып, тәндәре ҡатты, тороп баҫып та алды. Оҙаҡ йондоҙҙарға ҡарап торҙо.

- Ниндәй сихри төн. Ҡара әле, ер аҫтынан да йондоҙҙар күренә икән, - тип ҡуйҙы. - Ә ҡалала, ер өҫтөндә йөрөһәк тә, ерҙән нисә ҡат өҫтә йәшәһәк тә, йондоҙҙар күҙгә лә салынмай. Күрмәйбеҙ ҙә. Ә мин күрәм. Бәхетле, тимәк.

Бында нисә көн ятырын белмәй әле ул. Хәҙер, хәҙер булмаһа, иртәгә килеп табырҙар, тип уйланы. Шуға үҙен тыныс тотто. Ҡыҙының тыуған көнөнә лә ҡайтып өлгөрөр. Кем дә булһа килеп сығыр әле. Тайгала аҙашмаған даһа. Шуларҙы уйлап, шаярғыһы килде. Ярай ҙа төн йылы, һөйөнөп ултыра алыр ине лә, тик... Барыбер ҙә комфортлы түгел. Соҡор фатир түгел инде. Элек кешеләр ер аҫтында, землянкала нисек йәшәгәндәр тиң?

"Көн аяҙ була икән, йондоҙҙар күп, - тип фаразланы. - Эх, күбәләк аулай торған селтәрле ҡулайламаны тотоп, күккә мен дә бынау йондоҙҙарҙы рәхәтләнеп йыйып ал икән ул. Шунан ергә төшөп, һәр кемдең маңлайына йондоҙ сәпәп сыҡ ине. - Шуларҙы күҙ алдына баҫтырып, йылмайып ҡуйҙы. - Шаяртам, маңлайға сәпәргә түгел, һәр йөрәккә һал ине. Ни өсөн йөрәккәме? Сөнки йөрәгендә йыһандағы йондоҙҙо йөрөткән кеше ерҙәге бысраҡҡа иғтибар ҙа итмәй", - тынлыҡта башына шундай илаһи уй килгәненә һөйөнөп, ҡулдарын өҫкә һуҙып, устарын күк йөҙөнә һалып, йыһандың энергетикаһын һәм йондоҙҙарҙан килгән моңдо тойоп торҙо.

- Аладан-баладан, бесәй йөрөй йылғанан.

Сәүкә, сыпсыҡ, һин ҡал, был сыҡ...

*Гөр-гөр килеп гөрләйем,*
*Ваҡыт күбен белмәйем,*
*Ваҡыт күбен белергә,*
*Мин бит һеҙҙе күрмәйем.*
*Бик тә оҙаҡ гөрләйем,*
*Бынан ары түҙмәйем.*
*Түҙемлегем бөткәс тә,*
*Йөрөп һеҙҙе эҙләйем!* - эстән һанашмаҡты уҡыны ла, аҡайып, соҡор эсендәге ҡараңғылыҡҡа ҡарап торҙо. Ҡурҡып китте:

- Сәүкә, сыпсыҡ, һин ҡал, был сыҡ... - тип мығырҙаны. Тауышы ҡалтыранып сыҡты. "Балалар баҡсаһына йөрөгәндә ҡыҙым шулай тип һөйләй торғайны. Үҙем өйрәттем", - тип уйланы. Һаҡ ҡына тауыш сығара биреп өндәште:

- Мине берәйһе табамы бөгөн, әйт әле, эй, Ай? Йондоҙҙар, мине берәйһе юҡһынамы, эҙләйме икән?

Моңайып ҡына башын баҫып ултырҙы:

*- Аҡ сыҡ,*
*Ҡара сыҡ,*
*Бында торма,*
*Бар, сыҡ!*

Төшөндә ул өҫтөнә бер нисә арҡан килеп төшкәнен күрҙе. Тик береһен дә тота алмай хитланды, инде тоттом, тиһә, уларға ҡунған күбәләктәр осоп китә лә арҡандар бәүелә-бәүелә өҫкә менә лә китә.

**(Дауамы бар).**

*✓ Тормоштағы бер нәмәгә лә битараф ҡала белмәйем, үтә хислемен: ярышҡанда еңеү өсөн, сәхнәлә уйнағанда бөтә булмышымды биреп, илағанда һығылып, шатланғанда түбәм күккә тейеп, хәстәрләгәндә бөтә йәнемде бирәм.*



ЯҘЫУСЫҒА ӨС ҺОРАУ

**Әҙәбиәт күгендә әленән-әле яңы исемдәр балҡып-күренеп ҡала. Ҡайһылары бер арауыҡ ҡына баҙлай ҙа юғалып ҡуя, ҡайһылары баштан уҡ был йыһанды биҙәр өсөн килгәнлеген аңғарта. Бына, мәҫәлән, Әлиә САМАТОВА кеүектәр. Беҙ уның ҡыҙыҡлы хикәйәләрен төрлө баҫмаларҙа әленән-әле уҡып ҡына торабыҙ. Бөгөн ул Белорет районы Инйәр ауылы мәктәбендә башҡорт теле һәм әҙәбиәте уҡытыусыһы һәм тәрбиә эштәре буйынса директор урынбаҫары булып эшләй. Тынғыһыҙ хеҙмәте араһында уҡыусыларын ҡыуандырырға ла онотмай. Әлиә Саматова менән әңгәмәбеҙ ижад хаҡында.**

# МИҢӘ ИЖАДЫМ ДА ҠӘҘЕРЛЕ...



**➔ Башҡорт әҙәбиәтенең проза жанрында күрендең. Шулай тип ҡыйыу әйтергә булалыр. Ошо тәңгәлдә ҡанат нығытыу, ҡәләмеңде шымартыу, тағы ла үткерләү, йәғни ижади үҫеш өсөн һиңә ниндәй ярҙам кәрәк, нимәләр етмәй? Башлап яҙыусыға ниндәй мөхит йәки мөнәсәбәт булырға тейеш тип иҫәпләйһең?**

- Бәләкәйҙән китап уҡып, билдәле яҙыусыларҙың ижадында үҫтем. Проза жанрына Рәшит Солтангәрәев, Зәйнәп Биишева, Ноғман Мусин әҫәрҙәре аша һөйөү уянды. Уларҙа һүрәтләнгән донъя, геройҙар, образдар, хәл-ваҡиғалар ағышы мине арбап, хатта ысынбарлыҡтан да айырып алып китә ине. Артабан дәрестәрҙә уҡыусыларым менән әҫәрҙәр анализлап, энәһенән ебенә тиклем тикшереп, бөтә нескәлектәрен өйрәнгәндә лә мин был жанрға ҡыҙыҡһыныуымды кәметә алманым. Миндә уҡыусы булыу ғына түгел, ә үҙемә лә әҫәр ижад итеп ҡарау теләге тыуҙы. Нисек итеп айырым бер тормош һүрәтләнешен ҡағыҙ битендә генә һүрәтләп-яһап була икән, тигән уй тынғы бирмәне. Һәм шул ынтылыш шауҡымында ҡәләм тирбәтә башланым.

Кластан тыш уҡыу дәрестәрендә замандаш прозаиктарыбыҙҙың яңы әҫәрҙәрен уҡыйбыҙ. Уларҙа күп осраҡта бөгөнгө көн, бөгөнгө геройҙар сағылыш таба. Һин уларҙы үткән быуын кешеләре һәм үткән быуын әҙәбиәте итеп түгел, ә һин күргәнде-белгәнде яҙған һәм һинең менән бер мәлдә йәшәгән шәхестәр итеп күрәһең. Һәм һин дә шулай булдыра алаһың икәненә ышаныс та ҙурыраҡ. Яңы яҙыша башлаған ижадсыларға тап бына шундай үрнәк алырҙай остаздарҙың оҫталыҡ дәрестәре булһа, шәп булыр ине, минеңсә. Мөнир Ҡунафин, Салауат Әбүзәр, Миләүшә Ҡаһарманова, Әхмәр Үтәбай кеүек әҙиптәр беҙгә шундай дәрестәр үткәрһә ине, тип уйлайым. Әйтәйек, "Бер хикәйәнең яҙылыу тарихы" тигән дәрес (видеодәрес, онлайн -дәрес һ.б.). Башлап яҙыша башлағандарға ла, мәктәп уҡыусыларына ла яҙыусылар менән аралашыу, уларҙы күреп-белеү, осрашыуҙар етмәй.

**➔ Бөгөнгө йәш яҙыусылар араһында, шулай уҡ интернет киңлектәрендәге ижадсыларҙа ла, әҫәр төҙөү проблемаһы бар. Әйтәйек, прозаға килеүсе кеше иң беренсе хикәйәнән башлайым тип уйлай. Ә был прозалағы иң ауыр жанрҙарҙың береһе. Бына һин хикәйә яҙыуҙы нисек күҙ алдына килтерәһең һәм нисек башҡараһың? Һәм уның тап хикәйә жанрында икәнлеген нисек билдәләйһең?**

- Күләме яғынан ҙур булмауға ҡарамаҫтан, хикәйә башы, хәл ителеше һәм аҙағы булған бөтөн бер ваҡиғаны һүрәтләй. Жанрҙың мөмкинлектәре шаҡтай сикләнгән булғанлыҡтан, сюжеттағы айырым эпизодтарҙы ентекләп, бөтә ваҡлыҡтарға иғтибар итеп һүрәтләү хикәйәгә хас түгел. Шул уҡ сәбәптәр һөҙөмтәһендә хикәйәләрҙең образдар системаһы ла ҡатмарлы түгел. Ғәҙәттә, уларҙа ике-өс кенә персонаж ҡатнаша, һәм яҙыусы уларҙың характерындағы бөтә ҡатмарлылыҡты түгел, ә әҫәрҙең төп идеяһын асыуға ярҙам итерҙәй эш-хәрәкәттәрен генә хикәйәләй, һүрәтләнә торған ваҡиғаның башҡарылыу оҙайлығы мәсьәләһендә лә был жанр повесть һәм романдар менән ярыша алмай: хикәйәлә күбеһенсә бер йәки бер нисә көн эсендә булып уҙған ваҡиға һүрәтләнә. Бына ошо ҡағиҙәнең теорияһын аңлайһың ул. Ә яҙыша башлағанда, әгәр алдан хикәйә системаһын, һөйләйәсәк хәл-ваҡиғалар ағымын тулайым ғына уйламағанһың икән, был жанр эсенә инеп ултырыуы ауыр. Хикәйә яҙыу өсөн бик йыйнаҡ уйлай, фекерләй һәм шуны һүрәтләй белергә кәрәк.

Кеше тормошонда шатлыҡлы йә ҡайғылы, иҫтәлекле һәм тетрәндергес ваҡиғалар була. Тап шул ваҡиғалар хикәйәлә сағылыш таба ла. Шул уҡ ваҡытта яҙғаның нимәнелер бәйән итеүгә генә ҡоролһа, уҡыусыны уйландырмаясаҡ, әйтеп бөтөлмәгән һүҙҙәр, бәйән ителмәгән уйҙар, асып бирелмәгән фекерҙәр уҡыусының фантазияһын үҫтереүгә булышлыҡ итә, минеңсә. Әлбиттә, тәрбиәүи яҡтарын да күҙ уңынан сығармайынса, йөмлө генә хикәйә яҙырға ынтылырға кәрәктер ул. Бер геройҙың яҙмышына бәйле хәл-ваҡиғаларҙы бер хикәйәлә асып биреү - ошо жанрҙың үҙенсәлеге инде. Минең ҡайһы бер хикәйәләрем бер нисә өлөштән, йәғни дауамлы килә лә сыға. Мәҫәлән, "Тел аҫҡысы "ның дауамдары "Тел биҫтәһе " һәм "Тел оҫтаһы". Һәм һуңғы "Уйын" хикәйәм дә өс өлөшлө килеп сыҡты. Бына ошо тәңгәлдә лә тәжрибәле яҙыусылар менән кәңәшләшә алыу форсаты кәрәк ул. Уҡып, ҡарап ҡына өйрәнеү - бер, ә берәй хикәйә оҫтаһы хикәйә ҡороу үҙенсәлектәрен, серҙәрен аңлатһа ине...

Дәрестәремдә уҡыусыларыма проблемалы һорау ҡуйған кеүек, хикәйәләремдә лә шул алым ҡулланам. Параллель образдар эҙләргә яратам. Әҙәбиәт дәрестәрендә лә шундай образдарҙы табыуға күп ваҡыт бүләм. Геройҙарҙың исемдәренә иғтибар итәм, мәғәнәһенә ҡарап ("Исемдәр китабы "нан алам) ҡушам. Мәҫәлән, повесымдағы Моталлап - эҙләүсе, көтөүсе тигәнде аңлата. Геройым ғүмере буйы әсәһен эҙләй бит...

**➔ Һине ижад итеүгә ниндәй сәбәптәр этәрә? Ижад итеү тормошоңа берәй төрлө йоғонто яһаймы? Яҙышыуҙы эш араһындағы хобби итеп кенә күрәһеңме, әллә уға төплө ҡарарға, яҙмышыңды башҡорт әҙәбиәтенә бәйләргә тигән иҫәп бармы?**

- Бөтә ижадсыларҙы ла мин тулып, ташып ултырған бер көршәк кеүек күҙ алдына килтерәм. Шул иҫәптә мин дә. Тормоштағы бер нәмәгә лә битараф ҡала белмәйем, үтә хислемен: ярышҡанда еңеү өсөн, сәхнәлә уйнағанда бөтә булмышымды биреп, илағанда һығылып, шатланғанда түбәм күккә тейеп, хәстәрләгәндә бөтә йәнемде бирәм. Ҡайҙа яҙайым әле, тип түгел, түгелгән уй -фекерҙәремде унан алда тыуған идеяма төрөп,ҡағыҙға төшөрәм. Һәр яҙғаным - ҡәҙерле хазинам кеүек. Хобби түгел хәҙер, ә тормошомдоң бер мөһим өлөшөнә әйләнде. Яҙғандарымдың иң тәүге баһалаусылары - уҡытҡан уҡыусыларым. Улар алдай белмәй, әҫәрҙең авторын атамайынса уҡыйым. Шулай булғанда тәнҡит тә ғәҙел була. Уларҙың күҙҙәрендә барлыҡҡа килгән ҡараш сағылышы, әйтелгән фекерҙәре, килеп тыуған һорауҙары, ҡыҙыҡһыныуҙары йәки, киреһенсә, битараф ҡалыуҙары ла миңә күп мәғлүмәт бирә. Һуңынан инде өйрәтеүсе остаздарымдан баһа алам эштәремә һәм иң һуңында китап уҡыусыларға тәҡдим итәм. Ыңғай фекерҙәр илһам өҫтәй, ҡанатландыра, артабан эҙләнеүгә дәрт бирә. Һәр кешенең кешелеккә әйтер һүҙе бар бит, мин дә уйымдағын яҙғандарымды уҡыусыларыма алып барып еткергем килә. Әҫәрҙәремде яратып уҡыусылар булһа, ҡәләмемде ташламам, тим. Иң мөһиме, миңә әҙәбиәтебеҙ ҡәҙерле, яҙышыу оҡшай һәм бәләкәс кенә өлөшөмдө индерә алам икән, ижадтан айырылмам.

**Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА**
**яҙып алды.**

ЯҘМЫШТАР



# БАЛДАҠ ҠЫНА БУЛДЫМЫ СӘБӘП?

**Ике туған һеңлем менән ул республиканың теге осонда, мин иһә был башында йәшәгәнлектән, әллә ни бәйләнеш булдыра алмай инек. Телефон заманы булһа ла, бар һөйләшеү хәл-әхүәл белешеүҙән, йорт-ҡура хәбәренән ары китмәне. Йылына бер генә осрашҡанда ла, бер-беребеҙҙең эс-бауырына инерлек форсат сыҡмағандыр. Уның тәүге ире менән уңышмауын, ҡыҙы тыуғансы уҡ мөнәсәбәттәре бөтөүен дә кеше аша, яҙа-йоҙа ғына ишетеп ҡалғайным. Яңыраҡ ул үҙе миңә яҙмышын тулыһынса үҙгәрткән осраҡ хаҡында бәйән итте.**

- Минең тормошом кинолағы кеүек бит ул, апай. Һин белмәйһең генә, - тип башлап китте һүҙен һылыуым. - Беренсе ирем менән никах уҡытып, өйләнешергә йөрөй инек. Туй көнө лә билдәләнгән ине инде. Улай ғына ла түгел, өйҙә әсәйҙәр зыҡ ҡубып әҙерләнеп ята, сәк-сәк, бауырһаҡ бешерешергә таныш апайҙар килде. Беҙ буласаҡ ирем менән район үҙәгенә балдаҡ һайларға киттек. Янybыҙҙа уның апаһы ла бар. Һатыусы миңә әле бер, әле икенсе балдаҡ бирә, һәр береһен кейеп ҡарайым. Иҫләмәйем, нисәүҙе кейгәнмендер, 10-15-ләп кенә булғандыр. Күҙҙең яуын алып торған балдаҡтарҙың бөтәһе лә матур, бөтәһе лә оҡшай, ярағандары ла бар. Ирем менән апаһы ғына уларҙың хаҡын оҡшатмай, кейгән береһен ҡыйбат тип кире ҡағалар. Шул ваҡытта күңелемә әллә ниндәй бығаса таныш булмаған тойғо инеп ояланы ла ҡуйҙы. Ғәрләнеү, түбәнһенеү булғандыр ул. Үҙ ғүмеремдә башҡаса бер ҡасан да ундай тойғоно кисергәнем булманы минең. Магазиндан сығып киткәнемдә лә, өйгә нисек ҡайтып еткәнемдә лә иҫләмәйем. Бер балдаҡ хаҡы ла тормайыммы икән ни, тип ғәрләндем. Ишек алдындағы эскәмйәгә ултырып, бер туйғансы иланым әле башта, шунан ныҡлы бер ҡарарға килдем. Бәпәй көтһәм дә (никахыбыҙҙы яҙ уҡ үткәргән инек), тәүәккәлләнем дә, үҙемә биргән һүҙемдән кире ҡайтманым. Ир буласаҡ кешемә уның менән яҙмышымды бәйләмәйәсәгемде белдерҙем. Артабан нисек йәшәремде лә, баламды нисек үҫтереремде лә уйламаным...

Туйға әйберҙәр алынған, ҡунаҡтар саҡырылған ине инде. Беҙҙеке урынына атай менән әсәйҙең көмөш туйын үткәрҙек тә ҡуйҙыҡ.

- Нисек һин шулай тиҙ генә яҙмышыңды үҙгәртерлек ҡарарға килә алдың? - Уйҙарымдан арынып, һеңлемә ошо һорауҙы бирәм дә, уның да, кейәүҙең дә ул саҡтағы уй-кисерештәрен аңларға тырышып маташам. - Бәлки, уның балдаҡҡа аҡсаһы еткелекле булмағандыр, туй бит үҙе үк байтаҡ сығымдар талап итә?

- Апай, балдаҡ, моғайын да, беҙҙең араны өҙөр өсөн бер сәбәп кенә булғандыр ул. Әлеге йәшем бейеклегенән ҡарап, шулай тип уйлайым. Яратмағанмындыр мин ул кешене. Һөйөүем көслө булһа, үҙ аҡсамды ҡушып булһа ла алған булыр инем туй балдағын...

- Һуңынан нисә йыл яңғыҙ йәшәнең әле һин?

- Ҡыҙыма 3 йәш ине, әлеге иремде осраттым. Үкенмәйем. Уныһы ла кинолағы кеүек килеп сыҡты ул. Техникумда бергә уҡыған әхирәтемә ҡунаҡҡа барған инем. Альбом ҡарап ултырғанда уның ағаһының фотоһы килеп сыҡты. Ағайың сибәр икән, тип кенә әйткәнем хәтерҙә, һуңынан әллә ни иғтибар бирмәнем, уның хаҡында һүҙ ҡуҙғатманыҡ. Яңғыҙлыҡ үҙәгемә үткән саҡ, ҡулымда кескәй бала, күңелем яралы ине, кем менәндер танышыу тураһында уйлай ҙа алманым.

Күпмелер ваҡыттан һуң ул үҙе әхирәтемдән адресымды алып, эҙләп килде. Көҙ айы ине. Баҡсабыҙҙа шул йылда һары слива ишелеп уңды. Ер ябып ятҡан емештәрҙе йыйырға икәүләп индек тә, ике биҙрә слива йыйғансы, бер-беребеҙгә күңелебеҙҙе бушаттыҡ. Аңлаштыҡ. Ике район араһындағы юлға туҙан төшөрмәне ул, бик йыш килеп йөрөнө. Баламды ла үҙ итте. Бына шулай, апай, минең тормош. Әйтәм бит, кинолағы кеүек тип...

Һеңлемдең һүҙҙәре, уның ҡыйыулығы, тәүәккәллеге мине уйға һалды. Тотҡан ерҙән һындырып, һуңынан ул ҡарары өсөн үкенмәй йәшәрен, үҙенә тәғәйен бәхетен табырын алдан белгәнме ул? Юҡ, әлбиттә. Бары тик күңелен тыңлап, яҙмышын үҙгәртә алған...

Һеңлемдең тарихын тыңлағандан һуң ошондай һығымтаға килдем: был тормошта күп нәмә кинолағы кеүектер ул. Улар ҙа, моғайын, тормоштан алып төшөрөлә торғандыр... Ә һеҙҙең арала бармы ошо һылыу кеүек бер ҡарар менән яҙмышын үҙгәрткәндәр? Үҙ тормош - киноһының режиссеры булғандар?

**Лена ХӘЙРУЛЛИНА.**

✓ *Башҡорт киндер таҫтамалдарын этнографтар айырым бер билдәһенә ҡарап таный: уларҙа симметрияһыҙ-ниһеҙ кинәт кенә бер ҡара биҙәк ҡуйыла. Ошо биҙәктәр ниҙер аңғарта, яманлыҡты алдан иҫкәртә, күҙ тейеүҙән һаҡлай.*



ИНТЕРНЕТТАН



# АНАР ЕМЕШЕ АША

■ Ғалимдар фекеренсә, анар емеше йөрәк-ҡан тамырҙары сирҙәрен булдырмай. Яңыраҡ ғалимдар уның тағы бер ыңғай яғын асыҡлаған: ул ДНК-ның ҡартайыу процесын яйлата. Тикшеренеүҙәр 60 кешенән торған төркөмдә үтә. Улар ай дауамында анар экстракты капсулаларын ҡабул итә. Һөҙөмтәлә, баш мейеһе, мускулдар, бауыр, бөйөр эшмәкәрлеге, тире ҡартайыуы менән маркерҙың ярайһы уҡ түбәнәйеүе асыҡланған. Белгестәр был күҙәнәктәрҙә ДНК-ның әселәнеүе кәмеүе менән аңлата. Бынан тыш, А, С, Е витаминдары, тимер һәм ирекле радикалдар эшен нейтралләштереүсе антиоксиданттарға бай.

■ Американың Йәмәғәт сәләмәтлеге ассоциацияһы мәғлүмәттәренә ярашлы, мәктәп йәшендәге балаларҙың яҡынса 11,5 проценты көнөнә өс сәғәт тирәһе ваҡытын социаль селтәрҙә аралашып үткәрә. Ғалимдар туплаған статистик мәғлүмәттәр күрһәтеүенсә, был үҫмерҙәр насар ғәҙәттәргә тиҙерәк бирелә. Улар араһында стресс, депрессия, йоҡоһоҙлоҡ менән яфаланыусылар, суицид осраҡтары күберәк осрай. Ғәҙәттә, улар насарыраҡ өлгәшә, ата-әсәләре менән йыш конфликтҡа инә.

■ Социаль селтәрҙәр ҙә күптән бәхәс сығанағына әүерелгән, кемдер уларҙы зыянлы, тип иҫәпләй, кемдер уларҙы яҡлап сығыш яһай. Флорида университеты ғалимдары асыҡлауынса, социаль селтәрҙәрҙе әүҙем ҡулланыу психикаға зарар килтермәй. Шулай ҙа социаль селтәрҙәр кешенең ниндәй хис-торошта икәнен белгертә ала. Мәҫәлән, яңғыҙлыҡ тойғоһон кисергән, хатта үҙенә ҡул һалыр хәлгә етеүселәрҙең профилендә ниндәйҙер конкрет мәғлүмәт һалынмаған, шулай ҙа башҡаларҙың иғтибарын йәлеп иткән һәм уларҙа хәүеф тыуҙырған яҙмалар күберәк булған. Был үҙенә күрә ниндәйҙер ярҙам һорау булыуы ихтимал, ти белгестәр. Быға тиклем Калифорния университеты ғалимдары виртуаль дуҫлыҡтың да үҫмерҙәр өсөн ысын дуҫлыҡ кеүек үк мөһим булыуын белдергәйне. Интернет аша аралашыу улар өсөн ысынбарлыҡтағы кеүек үк. Ғалимдар шуға ла үҫмер өсөн интернетта аралашыуҙың мөһимлеген билдәләй һәм уларҙы бынан тыйыу ярамай, ти.

■ Көндөҙ йоҡлап алһаң, йөрәк сирҙәре булмай, ти белгестәр. Бигерәк тә юғары ҡан баҫымы менән яфаланыусыларға был файҙалы. Греция ғалимдары үткәргән һынауҙарҙа 61 йәштәге 400 ир-ат һәм ҡатын-ҡыҙ ҡатнашҡан. Көндөҙ йоҡлап алғандарҙың ҡан баҫымы яҡынса 5 процентҡа түбәнәйгән. Ошо проценттар ғына ла йөрәк өйәнәге һанына йоғонто яһай ала. Икенсе күрһәткестәр, аныҡыраҡ әйткәндә, пульс йышлығы ла башҡаларҙыҡына ҡарағанда яҡшыраҡ булған. Көндөҙгө йоҡо 1 сәғәт тирәһе булғанда һөҙөмтәләр ҙә юғары, ти белгестәр.

■ Нигеҙҙә, емеш-еләк, йәшелсә менән туҡланыу, тәмәке тартмау, спиртлы эсемлектәр менән мауыҡмау һәм даими физик әүҙемлек - кешене сәләмәтлеккә илтеүсе дүрт юл, дүрт ҡанун. Ошо тормош ҡанунын тотоп йәшәүселәр араһында мейегә ҡан һауыу осраҡтары 50 проценттан ашыуға кәмерәк, тип раҫлай Бөйөк Британияның Норфолк графлығы университеты ғалимдары. Улар 11 йыл буйына 40 йәштән өлкәнерәк 20 мең кешенең сәләмәтлек торошон күҙәтеү аҫтында тотҡандан һуң, ошондай фекергә килгән.

АҒИНӘЙ МӘКТӘБЕ

# БЕҘ АҒАРТМАҺАҠ, КЕМ АҒАРТЫР ДОНЪЯНЫ!



**"Үәт беҙ буранды күрҙек, исмаһам! Ирәндек өс көн алдан олоно! Иллә мәгәр был хәтле булыр тимәгәйнек! Хәтәр шәп буран булды. Мал ҡararға ла сыға алманыҡ. Баймаҡ менән Сибай араһында Ирәндек юлын яптылар, бер машина ла үтә алмаған шикелле. Әүәлгесә март бураны булды. Был әле башы ғына. Аҡман-тоҡманы менән Бишҡунағы килер тағы. Ул Бишҡунаҡ шул уҡ Аҡман-тоҡман да инде. Төрлө ерҙә төрлөсә әйтәләр..."**

Баймаҡ еренә килеп еткәс тә иң ҡыҙыҡлы һәм ләззәтле әңгәмә гел буран тураһында барҙы. Тәбиғәт балаһы шул беҙҙең башҡорт, уға күркәм тауҙар, кәпәс осорғос ҡаялар, йәйрәп аҡҡан һыуҙар һәм башҡа тәбиғәт хозурлығын һөйләй башлаһаң, йәне ирей ҙә, теле сиселә лә китә. Баймаҡтағы буранлы көндөң иртәһенә сағыу ҡояш нурға ҡойондорҙо: "Бәрәкәллаһ, Ҡояш апай! Шул хәтле рәхәт буран булды. Беҙ шундай ысын тәбиғәт бүләген һағынғайныҡ. Тик берике көнгә ял иттер инде был бурандарҙы, Икенсе Этҡол ауылында ағинәйҙәребеҙ йыйыла. "Түңәрәк ҡор" уратып ниҙер һөйләшмәк булалар. Сатлама һыуығыңды ебәр, Ҡояш апай, был ауылдың утыҙ миллионлыҡ өр-яңы ремонт яһалған клубында бик тә йылы, тиҙәр..."

Эйе, бурандың хәтәрен беҙ Архангел-Сәрмән юлында - Елмерҙәк үркәсе менән Ҡырҡтытау араһында күрҙек. Ярай әле, юл таҙартыусылар эше яҡшы ойошторолған: ҡар көртө ҡамаған урындарҙы киңәйтеп, текәрәк һырттарға ҡомташ түшәп торалар... Ә шулай ҙа буран беҙ бара торған ауылға юлды бикләне. Юл ситендә ятҡан Түбә ауылында, бындағы Ағинәйҙәр ҡоро етәксеһе Рәйлә Мәксүтова йортонда туҡтаныҡ. Ауыл биләмәһе етәксеһе Әлфирә һылыу үҙе ҡаршы алып, килтереп ҡуйҙы. Ул мәғлүмәтле, ҡыҙыҡһыныусан, ауыл һәм төбәк тарихын яҡшы белгән кеше булып сыҡты һәм белгәндәре менән ихлас уртаҡлашты: "Түбә ауылы халҡы төрлө яҡтан йыйылған, башлыса башҡорттар йәшәһә лә, мәктәптә тик русса уҡыттылар. Беҙҙә йөҙ йыл элек үк алтын йыуыусылар артеле эшләгән, Бөйөк Ватан һуғышына хәтле үк Башҡортостан исеменән йылына ҡырҡ тонналап алтын оҙатылып торған, тимәк, фашистарҙы еңер өсөн бөтә көсөн биргән был ер. Лизингтың яртыһын тиерлек беҙҙең алтынды түләп һатып алғандар: хәрби катерҙар, самолеттар дошманды еңергә ярҙам иткән. Түбә ҡасабаһына аҙаҡ торф сығарыусылар килтерелә - 14-16 йәшлек ҡыҙ балалар яҡындағы торф ятҡылығынан кәҫләп ҡырҡып, заводты эшләтергә яғыулыҡ етештереп тора. Ҡыҙҙар насар ғына шарттарҙа, оҙон баракта йәшәй, һуғыш бөткәс, күптәре ошо яҡ егеттәренә тормошҡа сығып тороп ҡала, Ниғәмәт ауылында урам-урам булып ултыралар. Түбә тимер эш ҡорамалдары заводы бик яҡшы эшләй, беҙҙең фрезеровщиктар һәм токарҙар яһаған йоҙаҡтар хатта сит илдәрҙә киң билдәле була. Ҡатындар Түбә эш кейемдәре фабрикаһында һәр төрлө эш кейемдәре тегә. Бөгөн оло йәштәгеләр ҡалманы тиерлек, һаулыҡ яғынан барыһы ла ҡаҡшаған, оҙон ғүмерлеләр юҡ тиерлек. Пандемиянан йәшенеп, өлкән йәштәгеләре өйҙә ултыра, йәшерәктәре донъя көтә. Ир-егеттәребеҙҙең күбеһе Мәскәүҙә һәм Себер яғында ялланып эшләй. Яңы йорттар арта, тик балалар һаны кәмегәндән-кәмей. Халыҡ кәсептәре менән көн иткәндәр ҙә осрай. Юлай Үлйәбаев тигән оҫтабыҙ талдан кәрзиндәр, тауыҡ оялары үрә, уның күргәҙмәләрен Сибайҙа, Баймаҡта көтөп алалар. Кәрзин талы үҙебеҙҙең яҡындағы уйпат һаҙымат ерҙә үҫә, шуны сабып йыйып ҡуя..." Әлфирә һылыуҙың ауыл биләмәһендә күптән эшләгәне, эшен яратып башҡарғаны күренеп тора, бөтә кешене исемләп белә, хәлдәре тураһында ла хәбәрҙар.

...Икенсе Этҡол ауылында беҙҙе бер төркөм ағинәйҙәр көтә ине. Бығәләш тауын биләп, ысынлап та ныҡ көрт һалған кисәге ҡар батшаһы, ләкин ауыл урамдарын үтек кеүек тигеҙләп таҙартып тракторҙар йөрөй. Ҡыш көнө бигерәк матур икән был яҡтар. Ана, Сәсән ташы ҡуйылған Хәмит утары төбәге, ошонда 1910 йылдың йәйендә мәшһүр "Урал батыр" эпосы тәүбашлап сәсән Хәмит Әлмөхәмәтов менән Ғәбит Арғынбаевтарҙан яҙып алынған. Ни бары йөҙ ҙә ун йыл үткән, ә данлы ҡобайыр әллә нисә мең йылдар элек булған ваҡиғаларҙы бәйән итә һәм уның беҙгә тапшырған аҡылы тағы нисә мең йылдарға етерлек - "Яҡшылыҡ булһын атығыҙ..." Ана, ҡурайсы Зыя Хәлиловтың тыуған урамы, уның ҡустыһы тарихсы Мораҙым Хәлиловтың тауышы яңғырай һымаҡ: "Ҡурайсы - ул мәңгелек миссия!.." Уларға ҡурайсы Ришат Рәхимов, Ильяс Хәлилов, Зиннур Шәрәфетдинов тауышы ҡушыла. Ана, арҙаҡлы ғалим, академик Мазһар Иҫәнбаевтың урамы, архитектор Динар Хәлитов менән яҙыусы Борис Хәйретдинов, Төркиә менән Башҡортостан араһында фольклор күперен һалыусы Ғәйнислам Ибраһимовтың йорто. Ана, тыуған яғына ысын эш менән, төплө ярҙам менән фиҙаҡәр хеҙмәт иткән Азамат Тажетдинов уландары Нур һәм Илшаттарҙың урамы... Тауҙан-тауға тигәндәй һуҙылып ятҡан Икенсе Этҡолға ҡарап һоҡланабыҙ: бына тигән яңы мәктәп, ил яҡлап изге яуҙа баш һалған ҡорбандарға мәрмәр мемориаль һәйкәл, мәҙәниәт йорто һәм уның алдында яңыраҡ ҡына ҡалҡып сыҡҡан Алдар батыр һәйкәле! Барыһына ла Илшат Тажетдинов юл асҡан. Ниһайәт, бөрйәндәр үҙҙәренең иң бөйөк батырының һынын Ирәндек үрҙәренә ҡаратып баҫтырып ҡуйҙы. Алдар батырҙың ҡаһарман яҙмышы бөтә башҡорт халҡының тормошона һәм булмышына ишара кеүек. Петр батшаға тоғро һалдат, үҙ тыуған халҡына тоғро яугир!.. Скульпторыбыҙ Өлфәт Ҡобағошов бәхетлелер инде, сөнки уның хыялы тормошҡа ашҡан бит: башҡорт батырҙарының һын-шәүләһе Уралтау буйында ҡалҡып сыҡҡан.

Икенсе Этҡол мәҙәниәт йортоноң фойеһында береһенән-береһе алсаҡ ҡатындар һәм уҡыусы ҡыҙҙар ҡаршылай. Ысынлап та, ейәнсәрһеҙ ниндәй өләсәй булһын? Һәм аҡыҡтай аҡыллы Ағинәйҙең алдында аҫыл балалы алтындай килене йә ҡыҙы булыр. Быуындар күсәгилешлеге бик тәрән мәғәнәле һәм тәьҫирле күренеш. Барыһы ла ағинәйҙәр эше бит былар, тигән уй килә. Сөнки улар ил һәм халыҡҡа хеҙмәт итеүгә ынтыла, шунан йәм таба.

Күргәҙмәләр беренсе булып күҙгә ташлана. Ниғәмәт ауылы ағинәйҙәренең етәксеһе Фәрҙәнә Йәүҙәт ҡыҙы Мөхәмәтшина ҡуйған әйберҙәр араһында боронғо һуҡҡан ике киндер таҫтамал менән шулай уҡ барсалап һәм оялап һуғылған боронғо ҡыҙыл шаршау айырылып тора. Улар - милли хазинаның өлгөләре. Был монаятты һандығы төбөндә һаҡлаусы Рәхимова Рәйсә Тәхи ҡыҙы (1948 йылғы) Ниғәмәттә йәшәй. Ул уҡытыусы, мәғариф ветераны, шаршау менән таҫтамалдар уның әсәһенән - Беренсе Этҡол ауылынан килен булып төшкән Әсмә ханымдан ҡалған иҫтәлек. Сүпләм ысулы менән геометрик сатрашлы биҙәкләп һуғылған таҫтамалдар - элекке ырыу тамғалары ҡуйылған бирнә таҫтамалдары. Башҡорт киндер таҫтамалдарын этнографтар айырым бер билдәһенә ҡарап таный: уларҙа симметрияһыҙ-ниһеҙ кинәт кенә бер ҡара биҙәк ҡуйыла. Ошо биҙәктәр ниҙер аңғарта, яманлыҡты алдан иҫкәртә, күҙ тейеүҙән һаҡлай, уйландыра һәм һаҡ булырға өндәй. Ике башлы ике һуғылған киндер таҫтамал килен төшкән йортта тәҙрә башына йә урҙаға эленә, улар менән туй көрәгәһе ябыла, улар һабантуй батырының иңбашына һалына йә бәйгелә еңгән толпарҙың муйынына эленә. Ырыу таҫтамалы ҡатын-ҡыҙҙың ҡайҙан һәм кем араһынан төшкәнен аңғарта, уның шәжәрәһен һәм ырыу тарихын да һөйләй ала. Ырыу таҫтамалына төрөп ил инәһен һуңғы юлға оҙаталар...

Йәнә бер күргәҙмәлә һәр төрлө дарыу үләндәре теҙелгән. Баймаҡ далаһының ҡояшлы һәм алтынлы ерендә үҫкән мөғжизәле шифалы үләндәр кеүек тойола улар. Үләндәрҙе белеп кенә йыйыусы - Вәлиева Миңлегөл Дәүләтбай ҡыҙы, ул

✓ *Һүҙҙәр ғәҙәттән тыш көскә эйә. Һүҙҙәр һинең тормошоңдо төҙөй йәки емерә ала. Һин көнөнә егерме меңгә яҡын һүҙ әйтәһең. Нимәләр һөйләүең һинең тойғоларыңа, һиҙемләүеңә һәм ҡылыҡтарыңа тәрән йоғонто яһай.*



1960 йылғы. Танышҡан саҡта беҙгә һөйөнсөләп, шатланып тора: "Мин инде пенсионермын!" Иншаллаһ, мәнфәғәтен күр хаҡлы ялыңдың, тип әйтәһе килә беҙҙең бөтә ҡатын-ҡыҙҙарға. Улар барыһы ла лайыҡлы хеҙмәт юлы үтеп, ошо йәшкә еткән. Сәләмәтлектәре йәнә оҙон ғүмергә етһен ине, сөнки уларҙың эшләйһе эше, һөйләйһе һүҙҙәре һаман да халыҡҡа бик кәрәк. Миңлегөл Дәүләтбай ҡыҙы ла һәр үлән усламын алып, бәйнә-бәйнә уның сихри көсө хаҡында һүҙ башлай, барыһы ла халыҡсан, барыһы ла ерлекле һәм тәғәйен уның белгәндәре. Ағинәйҙәр ошо ғилемде лә балаларына тапшырып, бер заман халҡыбыҙҙы ағыулы химик препараттарҙан арындырыр микән? Килер бер көн, Башҡортостан далаһының шифалы үләндәре буйынса фәнни-тикшеренеү институты асылыр һәм унда эшләгән йәш ғалимдар йәшлек һәм һаулыҡ эликсиры булған башҡорт сәйҙәрен тәҡдим итер. Ни өсөн тигәндә, беҙҙең Көньяҡ Уралдағы ирәүән, ҡылған, ут үләне, андыҙ, мәтрүшкә, ҡан үләне кеүек затлы дарыу үләндәре иҫ киткес тәбиғи көскә эйә.

Йәнә бер күргәҙмә "Һыйлы көнөң һыйырҙа" тип атала. Бында малсылыҡ менән быуаттар буйы шөғөлләнгән башҡорт ҡатын-ҡыҙҙарының ҡулында һыйыр ағының ниндәй татлы һәм файҙалы ризыҡҡа әйләнеүе күренә. Дилара Динислам ҡыҙы Түләбаева ҡороттоң өс төрөн тәҡдим итә. Ҡыҙҙар буҙа эшләй, һары май иретеп һата. "Май майын яратып алалар, Аллаһы бойоорһа, малдар имен ҡышлаһа, үҙебеҙ һау булһаҡ, яҙ көнө кем май һораһа, шуға инселәп әҙерләрбеҙ", - тип ҡуя Миңлегөл. Һай, ауыҙыңа һары май! Әйткәнең килһен, һылыу, тигән булайыҡ.

Икенсе Этҡол мәҙәниәт йортоноң тамаша залында халыҡ күбәйә, улар араһында бер ҡарт та бар. Ул минең күптәнге танышым Сөнәғәт ағай. Сәсән ташы хаҡында фильм төшөргәндә лә ул ҡыҙыҡлы мәғлүмәттәр өҫтәп йөрөгәйне. Әле лә беҙҙе күреү менән ниҙер һамаҡлай ҙа башланы:

*- Нахаҡ бәләләр тағып, сәсәндәрҙе сәсәткән,*
*Туған телде рәнйетеп, халыҡ рухын имгәткән*
*Иблес затлы бәндәләр баҫып бара донъяны.*
*Ана шулар бит инде ҡотороп золом ҡылалар,*
*Тәбиғәткә ҡанығып, оноталар саманы,*
*Тырнаҡ осо тиклем дә юҡ уларҙың иманы...*
*Иманһыҙҙар үрсеһә, илдә тәртип буламы?*
*Ата-баба йортона ап-аҡ бәхет ҡунамы?*
*Шуға борсолам бөгөн: һәр милләттең выжданын*
*Үҙебеҙ ағартмаһаҡ, кем ағартһын донъяны?*
*Кем ағартыр донъяны?..*

Йәйгә, Аллаһы бирһә, план бар - шәжәрә байрамы үткәрергә ниәтләйбеҙ, - тип ҡуя шунан Сөнәғәт ағай...

Артабан яҡты иркен бүлмәлә түңәрәк ҡорға йыйылдылар. Икенсе Этҡол, Нигәмәт, Мерәҫ, Түбә, тағы бер нисә ауыл ағинәйҙәре, район мәҙәниәт идараһынан әйҙәүсе белгес Илнара Үлмәҫбаева менән танышабыҙ. Икенсе Этҡол ағинәйҙәр ҡоро етәксеһе Көнһылыу Хәмзә ҡыҙы Сөләймәнова һәр ҡунағын матур һүҙҙәр менән ҡаршылай: "Ағинәй ул аҡ күлдәкле генә түгел, аҡ уйлы, аҡ ниәтле..."

Баймаҡ районының 99 ауыл ҡатын-ҡыҙҙарын бергә туплаусы "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһы етәксеһе Гүзәл Монасипова башта ҡайһы бер эштәр тураһында бәйән итте. Пандемия менән бәйле үҙҡурсаланыу осоронда ла ойошма ағзалары әүҙемлектәрен һүрелтмәгән, уларҙың эше онлайн дауам иткән: һәр кем үҙ өйөнән эшләнгән эштәрен интернеттағы социаль селтәрҙәрҙә, вацап чатында яҡтыртып барған. Милли күлдәк тегеү, биҙәүестәр эшләү, төрлө ҡул эштәрен атҡарыу менән генә шөғөлләнмәгән ағинәйҙәр, ә төрлө темаға флешмобтар, фекер алышыуҙар ойошторған, балаларға әкиәттәр һөйләгән, йомаҡтар ҡойҙорған, төрлө уйындар өйрәткән.

Артабан Гүзәл Миҙхәт ҡыҙы күрше райондарҙың ағинәйҙәр йыйынына барып, ниҙәр күреүе хаҡындағы бәйәнгә күсте: "Үҙҡурсаланыу тәртибен боҙмай ғына Әбйәлилгә, Байым ауылына "Ашъяулыҡ" байрамына барҙыҡ. Сибай ҡалаһы ағинәйҙәренең "Тәмле" конкурс-фестиваленә лә барып, һушыбыҙ китеп ҡайттыҡ. Ҡаланың "Ағинәй" йәмәғәт ойошмаһы етәксеһе Венера Йәнбәкова конкурста биш метрлыҡ тултырмаһы менән ҡатнашты. Рима Ғәзимова исемле ағинәй "Тыжыҡ" тигән милли ризыҡ әҙерләгән. "Тыжыҡ" - ваҡ йәки эре малдың ҡарынына йә йоморо эсәгенә, йәки ҡартаға, йәки күҙләүеккә төрлө эсәк, май, ит киҫәге турап тултырып, тегеп бешерелгән ризыҡ икән. Ошондай бик шәп ризыҡтар бар икән беҙҙең, уны нишләп онотҡанбыҙҙыр? Рима Ғәзимова әҙерләгән йәнә бер милли ризыҡ - "Ҡойолтмаҡ". Ул бик ябай эшләнә: ҡатыҡҡа аҙ ғына ҡаймаҡ, еләк, сейә йәки слива ҡайнатмаһы ҡушып һалына ла, нығытып туҡыла йәки блендер аша үткәрелә, тәмле йогурт барлыҡҡа килә. Инде ҡыуанып, ғорурланып ҡайттыҡ Сибайҙан. Телгә, мәҙәниәткә, халыҡҡа һөйөүҙе ошо йолалар аша тәрбиәләй ҙә инде ағинәйҙәребеҙ..."

Ағинәй ауыҙынан бер йола-ырым тураһында ла ишеттек. Баҡтиһәң, борон башҡортта яңы тыуған сабыйҙы атаһының күлдәгенә төргәндәр икән. Ни өсөн? Баланы атаһы үҙ итһен, яратһын, яҡлаһын өсөн. Атайҙың күлдәгенән яһалған тәүге йүргәкте өй өрлөгө аҫтына ҡыҫтырып ҡуйғандар...

Бына шулай баш ағинәй үҙе белгән-күргәнде фекерҙәштәре менән уртаҡлашты, киләсәккә эш пландарын аңлатты: "Инде милли кейемле, биҙәүесле булдыҡ, былтырҙан башлап хаталар өҫтөндә эшләйбеҙ. Быйыл учалыларҙан күрмәксе, милли аяҡ кейеме - сарыҡ тегергә өйрәнәбеҙ", - тип, Гүзәл Миҙхәт ҡыҙы яҡын арала сарыҡ тегеү буйынса оҫталыҡ дәрестәре үткәрәсәге тураһында белдерҙе.

Ағинәйҙәр бер-береһен уңыштары менән дә ҡотлап үтте. Көнһылыу Сөләймәнова Айрат Сирбаев исемендәге шиғри бәйгелә еңеүселәр исемлегендә, Мөнирә Мәүлетҡолова шашка буйынса районда билдәле спортсы булып ҡайтҡан һәм башҡалар. Уларҙың шулай әүҙем һәм сәләмәт тормошта донъя көтөүе бөтә халыҡҡа үрнәк. Артабан оло сәхнәлә "Яулыҡ байрамы" менән танышабыҙ. Уны Көнһылыу Хәмзә ҡыҙы Сөләймәнованың сценарийы буйынса ойошторғандар булып сыҡты...

Артабан беҙ Ишмырҙа-Юкәләр ауылына юлландыҡ. Унда ла беҙҙе районның бер нисә ауылы ағинәйҙәре йыйылып көтә ине...

**Сәрүәр СУРИНА.**
**(Дауамы бар).**

## УҢЫШ ҠАҘАН



# ҺӘЛӘТЕҢДЕ ФАЙҘАЛАНА БЕЛ

Аладдин лампаһы тураһындағы риүәйәттә хужаның һәр теләгеН үтәүсе ен хаҡында һөйләнелә. Аладдин лампаһын ышҡыуы була, ен уның алдына килеп тә баҫа. Һиндә лә һәр бойороғоңдо кисекмәҫтән үтәй алырлыҡ ҡеүәтле ен бар. Уны уятыу мәле етте.

Кеше зиһене сикһеҙ күп һәләттәргә эйә булһа ла, ул хеҙмәтсе генә ролендә, шуға күрә уға бойорорға кәрәк. Ул үҙенән-үҙе ғәмәл ҡыла алмай. Ысынында ул ҡушҡаныңды теүәл үтәүсе шәхесһеҙ механизм. Был мөһим, компетентлы һәм ышаныслы партнер һине ыңғай ижади тормош өсөн кәрәкле бөтә мәғлүмәт менән тәьмин итергә һәләтле.

**Үҙ зиһенеңде нисек программалаштырырға һуң?**

**1. Телдән белдереү**

Һүҙҙәр ғәҙәттән тыш көскә эйә. Һүҙҙәр һинең тормошоңдо төҙөй йәки емерә ала. Телмәр - ул вербаль, йәғни әйтеп фекерләү. Һин көнөнә егерме меңгә яҡын һүҙ әйтәһең. Нимәләр һөйләүең һинең тойғоларыңа, һиҙемләүеңә һәм ҡылыҡтарыңа тәрән йоғонто яһай.

Мәҫәлән, һүҙҙәр һинең ҡан баҫымыңды, йөрәк тибешеңде һәм теләктәреңде үҙгәртә ала. Зиһен һүҙҙәрҙең барыһын да - ыңғайын да, киреһен дә - ҡабул итә. Ыңғайҙары һинең тормошоңдо нығыта, киреләре емерә генә. Әйтәйек, һин түбәндәге кире раҫлауҙарҙы ҡулланаһыңмы?

Миңә эшем оҡшамай.

Мин ныҡ борсолам.

Минең бер ваҡытта ла аҡсам булмаясаҡ.

Миңә теләгәнемде эшләү өсөн түҙемлелек етмәй.

Минең бер ниндәй ҙә һәләтем юҡ.

Мин камил түгел.

Хәтерем насар.

Үҙемде насар тоям һ.б.

Был исемлекте әллә күпме дауам итергә мөмкин, ләкин үҙеңде нисек программалаштырыуҙы күрһәтеү өсөн быныһы ла етерлек. Һуңынан зиһендән ошо кире бойороҡтарҙы үтәүҙе талап итәләр, һөҙөмтәлә беҙ ауырыйбыҙ, юғалтабыҙ, уңышһыҙлыҡҡа осрайбыҙ.

Шуға күрә лә һин телмәреңде күҙәтергә тейешһең. Ыңғай раҫлауҙарҙы зиһенең ысынбарлыҡ итеп ҡабул иткәнсегә тиклем ҡабатларға кәрәк. Психологияла был өҫтөнлөклө психик импрессия законы тип атала. Даими рәүештә, ауырыйым, тип ҡабатлаһаң, зиһенең һине ауырыуға әйләндерә. Сәләмәтмен, тип раҫлаһаң, үҙеңде сәләмәтлеккә көйләйһең.

**2. Тойғо һәм хистәр**

Хистәр - ул ижад үткәргесе. Бер ижади акт та унһыҙ барлыҡҡа килмәй. Зиһен тойғоларға һиҙгер тәьҫир итә. Ҡурҡыу, борсолоу, үпкә, көнсөллөк йәки нәфрәт кеүек кире эмоциялар, уларҙың ыңғай антагонизмдары кеүек үк, көс менән тәьҫир итәсәк.

**Роберт ЭНТОНИ.**
**(Дауамы бар).**

## ФӘҺЕМЛЕ ХИКӘЙӘТТӘР

# НӘУАДИР ТӘРЖЕМӘҺЕ

**XIX-XX быуат саттарында милли мәҙәниәт өлкәһендә тәрән эҙ ҡалдырыусыларҙың береһе, билдәле башҡорт уҡымышлыһы Хәбибназар Үтәки ғәрәп әл-Ҡолйубиҙың "Нәуадир" йыйынтығын төрки теленә ирекле тәржемәлә баҫтырып сығара. Уның "Нәуадир тәржемәһе" китабы XIX-XX быуат башҡорт мәғрифәтселек әҙәбиәтенең айырылғыһыҙ биттәрен тәшкил иткән әһәмиәтле ҡомартҡы булып тора. Ошо китаптан ҡайһы бер фәһемле хикәйәттәрҙе "Киске Өфө" гәзитен уҡыусыларға тәҡдим итәбеҙ.**

### Ирҙәргә итәғәтлек итеү тураһында

Христиан динендә булған бер йәш егет бик ҡаты ауырый башлағас, уның әсәһе: "Әгәр ҙә улым сәләмәтләнһә, донъянан ете көн сығып торор инем", - тип нәҙер әйтә. Аллаһы Тәғәлә хәҙрәттәре был егетте сәләмәтләндерә, әммә ҡарсыҡ нәҙерен һаман үтәмәй йөрөй икән. Бер көн төшөндә: "Әй, фәләнә, нәҙереңде үтә, юҡһа Аллаһы Тәғәләнең ғазабына дусар булырһың", - тигән тауыш ишетә. Ҡарсыҡ йоҡоһонан торғас, улына был хәлде һөйләп бирә һәм: "Миңә зыяратҡа барып ҡәбер ҡаҙы", - тип әмер бирә. Улы зыяратта ҡәбер ҡаҙый, әсәһен илтеп ҡәбергә һала, ҡарсыҡ Аллаһы Тәғәләгә ялбарып һәм һыйынып, соҡорға инеп ята. Улы иһә ҡәберҙе тупраҡ менән күмеп китә. Ҡарсыҡ Аллаһы Тәғәләне уйлап ятҡанында башы тарафында бер тишек күреп ҡала. Әлеге тишектән үрелеп ҡараһа, бик йәмле баҡса һәм унда йөрөгән ике ҡатынды күреп ҡала. Был ҡатындар: "Бында сыҡ!" - тип ҡарсыҡты үҙҙәренең янына саҡыралар. Аллаһы Тәғәләнең ҡөҙрәте менән тишек ҙурайып, ҡарсыҡ тышҡа сыға. Шул ҡәҙәре матур баҡса уртаһында бер күл булып, ҡатындар шуның тирәһендә ултыралар икән. Ҡарсыҡ килеп сәләм бирә лә, быларҙың яндарына ултыра, ләкин улары бының сәләмен алмай. Ҡарсыҡ: "Ни өсөн минең сәләмемде алманығыҙ?" - тип һорағас, улар: "Сәләм - бер ғибәҙәттер, беҙҙә үлгән кешеләр өсөн ғибәҙәт юҡ, шуның өсөн алманыҡ", - тип яуап бирә. Ҡарсыҡ быларҙың хәл-әхүәлдәре хаҡында һораша башлай. Ҡатындарҙың береһенең баш өҫтөндә матур ҡош ҡанаттарын елпеп тора. Икенсеһенең баш осонда ла бер ҡош булып, суҡышы менән ҡатындың башын суҡып яфалай икән. Ҡарсыҡ беренсе ҡатындан: "Әй, фәләнә, һин был хөрмәтте нисек таптың?" - тип һорағас, уныһы: "Был донъяла ваҡытымда Аллаһы Тәғәләгә ғибәҙәт ҡылдым һәм иремә итәғәтлек ҡылдым, үлгән сағымда ирем минән риза булып ҡалды. Шулар арҡаһында был дәрәжә һәм хөрмәтте таптым", - ти. Икенсеһенән тағы: "Ни өсөн был ҡош һине ғазаплай?" - тип һорағас, был ҡатын: "Мин донъяла ваҡытымда Аллаһы Тәғәләгә ғибәҙәт ҡылдым, ләкин иремә итәғәт ҡылманым, һүҙҙәрен тыңламаным, үлгән ваҡытымда ла ул минән риза булып ҡалманы. Аллаһы Тәғәләгә ғибәҙәт ҡылыуым сәбәпле - ошо баҡса, ләкин иремде рәнйетеүем өсөн миңә был ғазап бирелде. Әй, фәләнә, ҡәбереңдән сыҡҡас, минең өсөн иремдең ризалығын үтенсе, зинһар", - тигән. Ҡарсыҡ: "Ярай, һин теләгәнсә булыр", - тип вәғәҙәләй. Шул арала ете көн үтеп тә китә, ҡарсыҡҡа: "Бар, ҡәбереңә кире ин, улың алырға килде", - тиҙәр. Ҡарсыҡ ҡәберенә ингәс, улы ҡәберҙе асып ҡарсыҡты яҡты донъяға сығара.

Ете көн ятып, ҡәберҙән сыҡҡан икән, тип, халыҡ ҡарсыҡты күрергә һәм хәлен белергә килә. Ғазап сиккән теге ҡатындың ире лә килгән була. Ҡарсыҡ уға үҙенең күргәндәрен һөйләп, ирҙең ҡатыны өсөн ризалығын ала. Шул кистә үк ҡарсыҡ әлеге ҡатынды төшөндә күрә: уның баш осона ҡош ҡунып, рәхәтлек биреп, ҡанаттарын елпеп тора икән. Был ҡатын ҡарсыҡҡа: "Һинең ярҙамың менән ғазаптан ҡотолдом, Аллаһ риза булһын", - тигән ти.

**Илшат ЯНБАЕВ әҙерләне.**
**(Дауамы бар).**

✔ *Аҡсағыҙҙы һанап бөтә алаһығыҙ икән, тимәк, һеҙҙең миллиард доллар аҡсағыҙ юҡ.*

*(Пол Гетти).*



*БАШ ЭШЛӘТМӘК*

# 27 МАРТ - БӨТӘ ДОНЪЯ ТЕАТР КӨНӨ




*М. Ғафури ис. Башҡорт дәүләт академия драма театры директоры.*

*М. Кәрим ис. Милли йәштәр театры директоры.*

*Салауат дәүләт башҡорт драма театры директоры.*

*А. Мөбәрәков ис. Сибай дәүләт башҡорт драма театры директоры.*

**Йәмилә ШӘРӘФЕТДИНОВА төҙөнө.**

**11-се һандағы сканворд яуаптары.**

**Горизонталь буйынса:** Ҡарға. Ҡаҙылыҡ. Уйһыу. Башаҡ. Бүләк. Алабуға. Сержант. Лапаҫ. Ышаныс. Ымлыҡ. Тау. Ҡаҙна. Рота. Ысыҡ. Йоҙаҡ. Ҡаҙ. Алты. Ай. Йәйә. Нағыш. Брифинг. Ливан.

**Вертикаль буйынса:** Сыйырсыҡ. Барҡылдаҡ. Аҙыҡ. Ыҙа. Ҡала. Йәмбил. Ҡатын. Ҡаҙау. Туҡай. Әлифба. Һабантурғай. Ләгән. Арҡау. Гөл. Бал. Ҡайын. Алҡа. Аҙан. Кәҫ. Аҡҡош.

## НАМАҘ ВАҠЫТТАРЫ

*1442 һижри йыл.*

| Март (Шәғбан) | Иртәнге намаҙ | Ҡояш ҡалҡа | Өйлә намаҙы | Икенде намаҙы | Аҡшам намаҙы | Йәстү намаҙы |
|---|---|---|---|---|---|---|
| 22 (9) дүшәмбе | 5:45 | 7:15 | 13:30 | 18:01 | 19:31 | 21:01 |
| 23 (10) шишәмбе | 5:43 | 7:13 | 13:30 | 18:03 | 19:33 | 21:03 |
| 24 (11) шаршамбы | 5:40 | 7:10 | 13:30 | 18:05 | 19:35 | 21:05 |
| 25 (12) кесе йома | 5:37 | 7:07 | 13:30 | 18:07 | 19:37 | 21:07 |
| 26 (13) йома | 5:35 | 7:05 | 13:30 | 18:09 | 19:39 | 21:09 |
| 27 (14) шәмбе | 5:32 | 7:02 | 13:30 | 18:11 | 19:41 | 21:11 |
| 28 (15) йәкшәмбе | 5:30 | 7:00 | 13:30 | 18:13 | 19:43 | 21:13 |

*"Башҡортса дини календарь"ҙан алынды.*

## ҠОТЛАЙБЫҘ!

Март айында тыуған көндәрен билдәләүсе - **Өфө районы** Шамонино ауылынан Гөлниса Сафина, Гөлназ Шәүәлиева, **Ишембай районы** Эткол ауылынан Рәфҡәт Шәрәфетдинов, **Учалы районы** Мулдаш ауылынан Лилиә Нафиҡова, **Әбйәлил районы** Байым ауылынан Зәйнәп Яҡупова, **Мәләүез районы** Әбет ауылынан Ғүмәр Иҫәнов, **Өфө ҡалаһынан** Гөлгөнә Ниғмәтова, **Мәләүез ҡалаһынан** Гүзәл Заһиҙуллина, Рәсимә Сәғитова, **Сибай ҡалаһынан** Мөрит Алтынбаев, Зөлфиә Ғаббасова, Бикә Исламғолова, Регина Көмөшҡолова, Рәшиҙә Ҡудашева, Фәриҙә Ҡудашева, Юлдаш Килмөхәмәтов, Фиүзә Сафина, Илнур Сәфәров, Таңһылыу Йәндәүләтова, Юлдаш Юлдыбаев, Илсур Юламанов һәм башҡа уҡыусыларыбыҙҙы ихлас күңелдән ҡотлайбыҙ! Ике донъя рәхәтен татып, бәхеткә төрөнөп йәшәгеҙ, ныҡлы һаулыҡ, күңел тынысылығы, һәр эшегеҙҙә уңыштар насип итһен!

**Иң изге теләктәр менән, "Киске Өфө"ләр.**

## СӘНҒӘТ КӨНДӘЛЕГЕ



### М. Ғафури исемендәге Башҡорт дәүләт академия драма театры

**25 март "...Ат уйнатып алдан бара..."** (З. Бураҡаева). 12+

**27 март Премьера! "Йәш ғаилә фатир эҙләй"** (М. Рощин), мөхәббәт тарихы. 18.00 16+

**28 март "Һауанан ергә тиклем"** (А. Саҙрыев), бәпәй-театр. 12.00 0+

**"Зөләйха күҙҙәрен аса"** (Г. Яхина, Я. Пулинович). 16+

### М. Кәрим исемендәге Милли йәштәр театры

**22 март** А. Мөбәрәков исемендәге Сибай дәүләт башҡорт драма театры гастролдә **"Шайморатов генерал"** (Ф. Бүләков), драма-реквием. 12+

**24 март "Уйҙарымдан ғына юғалма..."** (Р. Гюнтекин), музыкаль драма. 12+

**25 март "Аҡ мөғжизә"** (М. Башкиров, М. Кәрим әҫәрҙәре буйынса), бала саҡ төштәре. 12+

**27 март "Айболит и Бармалей"** (К. Чуковский), мюзикл. 12.00 0+

**28 март "Чиполлино"** (Дж. Родари), мажара. 11.00, 14.00, 16.00 0+

**Кем алыҡ?**

"Аҡ мөғжизә" спектакле Мостай Кәримдең ниндәй әҫәрҙәре буйынса ҡуйылған һәм ҡайһы китабынан алынған? Спектаклдең режиссеры кем? **Телефон: 8-937-347-53-48**

### Башҡорт дәүләт ҡурсаҡ театры

**27 март Премьера! "Три поросенка"** (С. Михалков). 12.00, 14.00, 16.00 0+

**28 март Премьера! "Три поросенка"** (С. Михалков). 12.00, 14.00 0+

**"Етем төлкө"** (О. Штырляева). 16.00 0+

### Х. Әхмәтов исемендәге Башҡорт дәүләт филармонияһы

**23 март "Маленький принц"** (А. де Сент-Экзюпери), #Аралашайыҡ проекты. 6+

**24 март "Арғымаҡ"** төркөмө концерты. 6+

**27 март "Музыку слушаем вместе"** 11.00 0+

**Эльмира Юлдашеваның** концерты. 18.00 6+

### Стәрлетамаҡ дәүләт театр-концерт берләшмәһе

**25 март "Минең ҡатынымдың исеме Морис"** (Р.Шарт), комедия. 16+

**26 март "Ләсәй..."** (Ю. Тупикина), комедия. 12+

**27 март "Әлепле артистары"** (Аманулла), комедия. 12+

**28 март "СуперЗаяц"** (И. Чернышев), әкиәт-комедия. 12.00 0+

### Сибай театр-концерт берекмәһе

**"Сулпан" балалар театры 22 март** 11.30, 14.00 - Милли йәштәр театрында, **23 март** - "Нур" театры сәхнәһендә **"Тылсымлы ҡурай"** (Д. Йосопов), әкиәт. 6+

**"Донъя матур, донъя шундай матур"** концерт программаһы менән Ырымбур өлкәһе буйлап **23 март -** Медногорск, **24 март -** Ҡыуандыҡ, **25 март -** Нововоронеж, **26 март -** Орск ҡалалары сәхнәләрендә. 6+

### Салауат дәүләт башҡорт драма театры

**24 март** М.Ғафури исемендәге БАДТ сәхнәһендә **"Ғүмерҙең бер мәле"** (Н. Мусин), фантастик төш. 16+

**26 март "Абау, димсе килә!"** (С. Сурина), музыкаль комедия. 16+

**27 март "Өс суҫҡа"** (З. Сөләймәнов), әкиәт. 13.00 0+

**Кем алыҡ?**

Ноғман Мусиндың "Ғүмерҙең бер мәле" спектакле ниндәй повесть буйынса ҡуйылған? Быйыл авторға нисә йәш тула? Спектакль ниндәй проект сиктәрендә ҡуйылған?

**Телефон: 8-917-796-20-10**

ҠЫҪҠА ӘҢГӘМӘ

# "ҠАРМАҠ"ҠА КЕМДӘР ЭЛӘГЕР?




**Көнкүрешебеҙгә инеп, ныҡлы урын алған сит байрамдар, иҫтәлекле көндәр, йолалар байтаҡ ҡына. Улар башҡорт кешеһенә ҡасанырак үҙ булып китеүен дә белмәйбеҙ ҡай саҡ. Шундай байрамдарҙың береһе - Көлкө көнө. Һәр йыл һайын 1 апрелдә үҙендә төп башына ултыртмаһындар өсөн һаҡ булырға күнегеп бөткәнбеҙ, иллә-мәгәр. Шулай ҙа "бер туғандай" булып киткән байрамды үҙебеҫсә, саф башҡортса үткәргеһе килгән халыҡ өсөн "Курай" телеканалы БР Мәғариф министрлығы менән берлектә "Башҡортостан" Дәүләт концерт залында махсус рәүештә "Кармаҡ" музыкаль-юмористик шоу ойоштора. Был сара тураһында телеканалдың директоры Рита Өмөтбаева менән әңгәмәләштек.**

**Көлкө көнөндә баш ҡала халҡын яңы тамаша көтә, тигән хәбәр килеп етте...**

- Беҙҙең тамаша юҡҡа ғына "Кармаҡ" тип аталмай. Белеүегеҙсә, революцияға тиклем ошондай атамалы журнал сыҡҡан һәм унда беҙҙең билдәле башҡорт шағирҙары Шәйехзада Бабич, Мәжит Ғафури, Сәйфи Ҡудаш, Булат Камал кеүек тос фекерле, үткер телле әҙиптәрҙең ижад емештәре даими баҫылып торған. Әйтергә кәрәк, ул заманда ла "кармаҡҡа" кем генә ҡапмаған. Бөгөн дә беҙ "электерер" ҙур һәм ваҡ "балыҡтар" етерлек, шуға ошо исемдең отошло булыуын күреп, тамашабыҙҙы шулай атаныҡ та инде. Баш ҡала тамашасыһына башҡорт халҡының кинәйәле юморын, кемделер "кармаҡҡа эләктергәндә" лә уның йөҙөнән алмай, ишаралап шаяртыуҙы күрһәткебеҙ килә. Беҙ был тамашала клоун һымаҡ хыялый көлөп, йә кейем үҙгәртеп, түш үҫтереп түгел, ә йор һүҙле, тос фекерле, төртмә телле, кинәйәлә әйтә белеү оло оҫталыҡ булыуын сағылдырырға тырыштыҡ. Әлбиттә, "Кармаҡ"та Шәһит Хамматов, Иҙел Аралбаев, Илсур Тайсин, Илнур Юламанов кеүек юмор оҫталарынан тыш, монло ял минуттарын башҡорт эстрадаһы йондоҙҙары, "Мираҫ" йыр һәм бейеү ансамбле лә биҙәйәсәк. Көндәлек тормош мәшәҡәттәренән бер аҙ арынып, йөнләнеп, кәйефтәрҙе күтәреп, рәхәтләнеп күңел асырға саҡырабыҙ.

**Бөгөн беҙҙең башҡорт сәхнәһендә юмор бармы һәм ул тамашасыны ҡәнәғәтләндерерҙәйме?**

- Бөгөнгөбөҙҙә күҙ уңынан үткәрһәк, башҡорт халҡының тос фекерле, мәрәкәсел булыуын тулыһынса асып күрһәтә белмәүебеҙ күренә. Нишләптер, юмор бөтөнләй икенсе йүнәлеш ала ла китә, кешене мыҫҡыл итеүгә, үҙ-үҙҙәренә пародияға әүерелә хатта. Быуа ошо һис кенә лә күңелемә ятмай, сөнки был беҙгә мәҙәни юмор етенҡерәмәүен сағылдыра. Сит миләттәргә эйәреп, башҡорт халҡына хас булмағанса, билдән түбән шаяртыуҙар һөйләп, зауыҡыбыҙға тап килмәгән көләмәстәргә көлөп ултырыуҙан арынырға ваҡыт. Йәштәрҙе лә үҙебеҫсә өйрәтергә кәрәк. Улар, ғәҙәттә, күберәк хәрәкәт һәм ым менән көлкөлө хәл тыуҙыра. Ә уйлап ҡараһаң, беҙҙең халыҡ элек-электән берберенә төртмә телле таҡмаҡ та әйткән, кешене көйҙөрмәй генә мәрәкәләгән дә, ҡыҙыҡ хәл-ваҡиғаны сағылдырған көләмәстәре лә булған, хатта кинәйәле итеп әкиәт менән дә тәрбиәләй белгән. Быға һүҙ оҫталығы, тос фекерле, зирәк зиһенле булыу кәрәк. Быуа шул үҙебеҙҙең саф башҡорт юморын тергеҙеү маҡсатында "Башҡортостан" Дәүләт концерт залы нигеҙендә юмор клубын астыҡ һәм киләсәктә был проектты ҙур фестиваль итеп ойоштороу ниәте менән янабыҙ. Бер һүҙ менән әйткәндә, килегеҙ, күрегеҙ, беҙҙең менән бергә көлөгөҙ!

**Сәриә ҒАРИПОВА яҙып алды.**

АҠЫЛ-ҠАҘНА



**Аҡыллы кешеләрҙең һүҙҙәренә эйәреп, донъяуи хәҡиҡәткә баҡ, һығымталар яһа һәм, әлбиттә, тормошта ҡуллан. Бәхетле һәм уңышлы кеше булыр өсөн.**

# ТАЛЛЫ КҮЛДӘ ҺЫУ БУЛМАҪ,

## ярты аҡылда мал тормаҫ

Башһыҙ өйҙә ата тороп, ул һөйләр, инә тороп, ҡыҙ һөйләр.

**(Башҡорт халыҡ мәҡәле).**

Аҡсағыҙҙы һанап бөтә алаһығыҙ икән, тимәк, һеҙҙең миллиард доллар аҡсағыҙ юҡ.

**(Пол Гетти).**

Кешеләр булмаған ерҙә лә кеше булып ҡалырға тырыш.

**(Гиллель Старший).**

Үҙе килеп борсомаҫ элек бәләне борсомағыҙ.

**(Амер).**

**Шулай итеп, тағы бер риүәйәт: "Ҡуйы урман араһындағы бер болонда тылсымсы йәшәгән, ти. Ул көн һайын үҙенең көтөүенән бер һарыҡ һуйып ашай икән. Ә һарыҡтар, хужаларының ниәтен һиҙенеп, урмандың төрлө ягына ҡасып китә лә, тылсымсыға уларҙы тотоу өсөн күп ваҡыт сарыф итергә тура килә, ти. Быны туҡтатыр өсөн тылсымсы бер хәйлә уйлап таба. Ул һәр һарыҡ менән айырым һөйләшеп сыға һәм уларҙы үҙенең һүҙҙәренә ышандыра икән. Береһенә шулай ти был: "Һин һарыҡ түгел, һин минең кеүек үк кеше. Мин һарыҡтарҙы ғына һуйып ашайым, һинә ҡурҡырға түгел, һин минең дуҫым, кәнәшсем". Икенсеһенә: "Ниңә минән ҡасаһың? Һин бит арыҫлан, ә мин һарыҡтарҙы ғына һуям", - тигән. Өсөнсөһөн шулай тип ышандырған: "Һин бит һарыҡ түгел, ә бүре". Был һөйләшеүҙән һуң һарыҡтарҙың тәртибе бөтөнләй үҙгәргән - улар тыныс ҡына болонда үлән көйшәй, бер ҡайҙа ла ҡасмай. Тылсымсы берәйһен һуйған саҡта ла һарыҡтар: "Ул бит һарыҡты үлтерҙе, ә мин һарыҡ түгел һәм миңә бер ниҙән дә ҡурҡырға кәрәкмәй", - тип уйлай, ти. Тылсымсы ҡорбанға әҙерләгән һарыҡ менән дә йомшаҡ ҡына һөйләшә, ти: "Дуҫым, һинең менән күптән һөйләшкән юҡ, әйҙә, инеп сыҡ, һарыҡтар мәсьәләһендә һинең менән кәңәшләшеп алырға кәрәк". Шунан һуң һарыҡ, ғорурланып, хужаһы артынан эйәрә, ти. Хужа ысынлап та тәүҙә көтөү тураһында һораша, үҙенә кәрәкле мәғлүмәттәрҙе ала ла, ҡорбанын тиҙ генә салып ебәрә икән, хатта һарыҡ быны һиҙмәй ҙә ҡала, ти. Тылсымсы үҙенең хәйләһенән бик ҡәнәғәт ҡала. Сөнки хужаның һүҙҙәренә ышанған һарыҡтар тыныс ҡына үлән йолҡоп ашай, хатта иттәре лә тәмлерәк була башлаған, ти. Үҙҙәрен бүре, арыҫлан, кеше тип тойоусы һарыҡтар тылсымсыға хатта көтөүҙәге хәлдәр менән уртаҡлашып, ниндәй һарыҡ үҙен сәйер тотоуы тураһында мәғлүмәт еткереп, ярҙам итеп йөрөй башлаған, ти. Икенсе көнөнә үк тылсымсы үҙен сәйер тотҡан һарыҡты барып һуя, ти... Ә һин үҙеңде кем тип уйлайһың: арыҫланмы, бүреме әллә кешеме?"**

СӘНҒӘТ ЯҢЫЛЫҠТАРЫ

# МОРТАЗИН ТУРАҺЫНДА...



**Арыҫлан Мөбәрәков исемендәге Сибай дәүләт башҡорт драма театрында ҡуйыусы режиссер, Башҡортостандың атҡаҙанған артисы һәм мәҙәниәт хеҙмәткәре Сәлихйән Әфләтунов етәкселегендә "Урал бөркөтө" тигән яңы спектакль буйынса эш башланған.**

"Буласаҡ сәхнәләштереү нигеҙендә Наил Ғәйетбайҙың "Муса Мортазин" тигән пьесаһы ята. Оптимистик драма легендар комбриг, Рәсәйҙең һәм Башҡортостандың күренекле дәүләт эшмәкәре Муса Мортазиндың тыуыуына 130 йыл тулыуға арналған", - тип хәбәр иттеләр театрҙың матбуғат үҙәгенән. Спектаклде билдәле композитор Нур Даутов музыкаль яҡтан биҙәйәсәк, сценография авторҙары - С. Әфләтунов, Л. Ғарипова, Ю. Сиражетдинова. Ролдәрҙә - Башҡортостандың халыҡ артистары Риф Сәйфуллин, Нурзиә Әбдрәшитова, Зифа Баязитова, БР атҡаҙанған артистары Урал Зәйнуллин, Венер Сөнәғәтов, артистар Нәфис Сәйетов, Юнир Мансуров, Айгөл Зәйнуллина, Залина Усманова, Нәфисә Мәзитова, Юлиә Мөхәмәтйәнова, Вадим Ғилманов, Салауат Вәлиев, Резеда Сафиуллина.

# ҒӘСКӘРОВСЫЛАР "ҘУР ГАСТРОЛДӘР"ҘӘ...




**Ф. Ғәскәров исемендәге Дәүләт академия халыҡ бейеүҙәре ансамбле "Ҙур гастролдәр" федераль программаһында ҡатнашыу өсөн тәүге һайлап алыу этабын үтте.**

Был программа сиктәрендә ансамбль 2021 йылда Рәсәй төбәктәре буйлап бик күп концерттар ойоштороға планлаштыра. Бейеүселәр Волга буйы, Төньяҡ Кавказ округы, Ханты-Манси автономиялы округы, Ҡырым Республикаһының күп ҡалаларында, Санкт-Петербург, Пермь, Бөйөк Новгород ҡалаларында сығыш яһаясаҡ. Дөйөм алғанда, концерттар Рәсәйҙең 50-нән ашыу ҡалаһында уҙасаҡ. Ансамблдең матбуғат секретары Элиза Сынбулатова хәбәр итеүенсә, федераль программаға илдең 78 коллективы ғариза биргән, белгестәр комиссияһы "Ҙур гастролдәр" Бөтә Рәсәй гастроль-концерт планында 2021 йылда ҡатнашасаҡ 26 милли коллективты ғына һайлап алған. Әйтергә кәрәк, Ф. Ғәскәров исемендәге ансамбль 2020 йылда ла "Ҙур гастролдәр" программаһы сиктәрендә пандемияға тиклем 10-дан ашыу концерт ҡуйып өлгөргәйне.

«Киске Өфө» гәзитен ойоштороусы:
**Өфө ҡалаһы ҡала округы хакимиәте**
Гәзит Киң коммуникация, элемтә һәм мәҙәни мирасты һаҡлау өлкәһен күҙәтеү буйынса федераль хеҙмәттең Башҡортостан Республикаһы идаралығында теркәлде.
Теркәү таныҡлығы
№ТУ 02-00001, 10 июнь 2008 йыл.

Баш мөхәррир:
**Гөлфиә ЯНБАЕВА.**
**Мөхәррирәт:**
Сәриә ҒАРИПОВА,
Сәрүәр СУРИНА,
Зәйтүнә ӘЙЛЕ,
Фәүзиә МӨХӘМӘТШИНА,
Миләүшә ҠАҺАРМАНОВА,
Артур БАТЫРШИН.

Редакция һәм нәшер итеүсе адресы:
**450005, Башҡортостан Республикаһы, Өфө ҡалаһы, Революцион урамы, 167/1**
Беҙҙең сайт: **www.kiskeufa.ru**
E-mail: **kiskeufa@mail.ru**
«Печатник» ЯСЙ типографияһында баҫылды (450591, Башҡортостан Республикаһы, Өфө районы, Чесноковка ауылы, Воровский урамы, 32).

**Телефондар:**
Баш мөхәррир 253-25-44
Хәбәрселәр 252-39-99, 246-03-24
Матбуғат таратыу 246-03-23

**Ҡул ҡуйыу ваҡыты -**
19 март 17 сәғәт 00 мин.
Ҡул ҡуйылды - 16 сәғәт 00 мин.

«Киске Өфө»нөң реклама хеҙмәте 253-25-44, 246-03-23 телефондары буйынса «Киске Өфө» гәзитенә ойошмаларҙан һәм айырым кешеләрҙән рекламалар ҡабул итә.

«Киске Өфө»нөң индексы – **ПР905**

Тиражы - 3400
Заказ - 198/03